***✓ Эзопҡа бер танышы килә лә: "Һинең турала шул тиклем әшәке ғәйбәттәр һөйләйҙәр", - ти һәм ишеткәндәрен түкмәй-сәсмәй һөйләп бирә. "Кинжал яһаусылар үлтереүсе түгел, шул кинжал менән файҙаланыусылар - үлтереүсе. Минең турала һөйләүселәр - ғәйбәтсе түгел, улар һөйләгәндә ҡабатлаусы һин ғәйбәтсе", - ти Эзоп.***

ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

6 - 12 ИЮЛЬ - (МАЙАЙ) 2013 ЙЫЛ

kiskeufa.ru
blog.kiskeufa.ru

2002 йылдан башлап сыға

Һатыуҙа хаҡы ирекле

№27 (549)

## БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

**Күләгәһе юҡ тауҙан биҙ**



3

**Сафлыҡҡа...**

реклама кәрәк!



6

**Яуаплылыҡ тойғоһо...**

ауыл кешеләрендә көслөрәк



8-9

**Ураҙа ләззәтен...**

белергә ашыҡ!



12

14 **ТВ-программа**

---

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## Балаларҙың мәктәп тамамлап, һөнәр һайлау алдында торған мәле. Улығыҙҙың, ҡыҙығыҙҙың йә уҡыусыларығыҙҙың ниндәй һөнәр һайлауын теләйһегеҙ, ул һөнәр заманға яраҡлымы?

***Рәйес НИЗАМЕТДИНОВ, "Асы" шифаханаһының директор урынбаҫары, Башҡортостандың атҡаҙанған мәҙәниәт хеҙмәткәре:*** Улым Айназ Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатын алтын миҙалға тамамланы, уҡығанда РФ Президенты стипендиаты булды. Һәм, ғөмүмән, төрлө яҡлы һәләткә эйә ул: физик та, лирик та, тигән һымаҡ килеп сыға инде - мәктәптең генә түгел, республикабыҙҙың сәнғәт тормошонда әүҙем ҡатнаша. Ҡурай конкурсында беренсе урын яулағайны, бейеүгә лә оҫта. Математиканан республика олимпиадаһында призлы урын яулауы ла бик ҡыуаныслы булды - ҡыҫҡаһы, киләсәктә сәнғәт донъяһын үҙ итһә лә отолмаҫ, фән юлынан китһә лә үкенмәҫ, тип уйлайым. Ләкин был һүҙҙәрем һөнәр һайлау кеүек яуаплы бурысты баланың үҙ елкәһенә генә ауҙарып ҡуйыуҙы аңлатмай һис кенә лә. Һөнәр һайлау үҙ мәйелендә булһа ла, беҙ, ата-әсәһе, балаға тейешле йүнәлеш бирергә тейешбеҙ, тигән ҡараштамын. Сөнки киләсәктә донъя ҡороп, ғаилә аҫрау бурысы тулыһынса ир-егет елкәһенә төшә бит. Яратып башҡарған һөнәрең дә булһын, шул уҡ ваҡытта уға лайыҡлы эш хаҡы ла түләнһен, шунһыҙ ҡоро энтузиазм менән йәшәүе ауыр бөгөн. Айырыуса бөгөн илебеҙҙә мәҙәниәт менән сәнғәт өлкәләренең ҡалдыҡ принципта көн итеүен танымай булмай. Шуға күрә, талантлы йәштәрҙең техник йүнәлешкә йөҙ тотоуын аңларға була. Унан ғына кешенең рухи донъяһы һайыҡмаясаҡ бит, тип әйткем килә. Булған талант барыбер үҙең менән ҡала һәм үҙеңдең генә түгел, халҡыңдың да тормошон байытып, яҡтыртып тороусы илһам шишмәһенә тиң бит ул.

***Рәүеф БИКТАШЕВ, 43 йыл педагогик стажлы хеҙмәт ветераны:*** Мин һеҙҙең был һорауға ҡартатай булараҡ яуап бирәм инде, сөнки үҙемдең балалар күптән уҡып бөтөп, һөнәр алып, бөтәһе лә үҙҙәре теләгән өлкәлә уңышлы хеҙмәт итәләр. Ейән-ейәнсәрҙәрҙе аяҡҡа баҫтырышыу, уларға һөнәр һайлауҙа ярҙам итеү - беҙҙең дә оло бурыс. Әле улымдың улы -ейәнем Ғәлләм Бикташев Рәми Ғарипов исемендәге 1-се Башҡорт республика гимназия-интернатын алтын миҙалға тамамланы. Башлы егет инде былай: йырлай ҙа, бейеүгә лә оҫта, ҡурайҙа ла уйнай, компьютерҙы ла шәп белә. Информатиканан Берҙәм дәүләт имтиханын 100 балға тапшырҙы. Ошо йүнәлеш буйынса уҡырға инергә теләй. Атаәсәһе лә, беҙ ҙә ҡаршы түгелбеҙ, әйҙә, уҡыһын ғына. Информатика - заман ғилеме, уның буйынса белгестәр һәр ҡайҙа, һәр ваҡыт кәрәк, тик бына документтарын ҡайһы уҡыу йортона биреү хаҡында ныҡлы ҡарарға киленмәгән әле. Үҙе Санкт-Петербург ҡалаһында уҡырға хыяллана, ә беҙ ҡартәсәһе менән Өфөлә ҡалыуын, йә булмаһа, Силәбе, Магнитогорск кеүек яҡыныраҡ ерҙә урынлашыуын теләйбеҙ. Ахыр сиктә, быныһы әллә ни мөһим дә түгел, ҡайҙа уҡыһа ла иҫән-һау булһын, маҡсатына ынтылышлы, белем тауҙарына артылғанда ныҡышмал булһын, Бикташевтар династияһын лайыҡлы дауам итһен, тип теләйбеҙ.

**(Дауамы 2-се биттә).**

---

ШАҒИР ҺҮҘЕ




## БАШҠОРТОСТАН

Арыҫландар үҙ ерен
Залимдарҙан таптатмаҫ,
Таптаймын тип атлаһа,
Башҡорт ҡаны атлатмаҫ.
Ил өҫтөнә сапҡан яу
Башҡорт йәнен ҡаҡшатмаҫ,
Быҫраҡ табан аҫтында
Башҡорт намыҫы ятмаҫ.
Башҡортостан - гөлбостан,
Сөнбөлөстан, нурбостан,
Шунда тыуған, шунда үҫкән
Башҡорт атлы арыҫлан!
Башҡортостан баҡсаһы -
Арыҫландар торған ер;
Арыҫландар бабаһы -
Ҡаһармандар йөрөгән ер;
Ҡаһармандар кәүҙәһен
Ҡосаҡлаған, күмгән ер;
Хәләл ҡандар шәүләһен
Күккә тәрсим ҡылған ер.
Башҡортостан - гөлбостан,
Былбылстан, нурбостан,
Шунда тыуған, шунда үҫкән
Башҡорт тигән арыҫлан.
Башҡорт халҡы тарихта
Ғәйрәт менән фаш булған;
Киң ирекқә ашҡынған
Күңелдәге ташҡындан;
Һәр ваҡытта намыҫын
Үҙ башына баш ҡылған;
Тыуған илен һаҡлауға
Үҙе булған таш ҡурған.
Башҡортостан - гөлбостан,
Рәйханостан, нурбостан,
Шунда тыуған, шунда үҫкән
Башҡорт улы арыҫлан.

Көслө намыҫ, ташҡын йән
Торҙо, тағы ҡалҡынды;
Тағы башҡорт халҡында
Иҫке ялҡын балҡыны.
Мең йәһәннәм тыуҙырыр
Бер башҡорттоң ялҡыны;
Миллион ожмах яратыр
Бер Уралдың алтыны!
Башҡортостан - нурбостан,
Рәйханостан, гөлбостан.
Шунда тыуған, шунда үҫкән
Башҡорт улы арыҫлан.
Уралҡайҙың аҫты алтын,
Өҫтө шиғыр, үҙе нур;
Киләсәктә был ергә
Хоҙай үҙе ҡыҙығыр;
Фирҙәүестәр төҙөлөр,
Әлуан ниғмәт теҙелер;
Күкте ташлап мәләктәр,
Был ерҙәргә гиҙенер.
Башҡортостан - йәмбостан,
Илһамстан, шиғырстан,
Шунда тыуған, шунда үҫкән
Башҡорт намлы арыҫлан!
Ҡыуан аңлап, эй, Ватан,
Беҙ аңланыҡ хәлеңде;
Һине һалып ҡулбашҡа,
Беҙ йөкләнек ғәмеңде.
Ғәреш әглә өҫтөңә
Мендерербеҙ даныңды;
Беҙ фидаи һинеңсөн -
Йәшәтербеҙ намыңды!
Башҡортостан йәшәһен,
Сөнбөлөстан йәшәһен!
Шунда тыуып, шунда үҫкән
Арыҫландар йәшәһен!

✓ *Гәзиттең урта битендә гел урын алған "Монолог", "Диалог"тарҙы иһә, халҡыбыҙҙың фекер һандығы, тип атарға булалыр. Дөйөм алғанда, гәзит халҡыбыҙҙың тын алышын көйләүсе лә, уға замана темпын биреүсе лә, минеңсә.*

ӘЙҘӘ, АҠСА ЭШЛӘЙЕК!

# ҺАТЫП АЛАМ ДА...
## үҙем дә һатам



**Мин Өфө ҡалаһында йәшәйем. Оҙаҡ йылдар магазинда һатыусы булып эшләп, күптән түгел хаҡлы ялға сыҡтым. Ғүмер буйы эшләп өйрәнгәнгә, өйҙә оҙаҡ ултырып сыҙаманым һәм күңелемә лә ятҡан, кеҫәмде лә бер аҙ ҡалынайтҡан шөғөл таптым.**

Үҙем бик аралашыусан кешемен. Тирә-яҡтағылар менән тиҙ үк уртаҡ тел табып, һәйбәт мөнәсәбәт ҡорам. Шулай бер баҙарға барғанда емеш-еләк, төрлө әйбер, йәшел тәмләткестәр һатыусылар менән һөйләшеп киттем. Улар араһында минең кеүек үк хаҡлы ялда булыусылар ҙа күп ине. Нәҡ ошо апайҙар миңә бер аҙ аҡса эшләү юлын өйрәтте лә инде. Хәҙер күп кенә баҙарҙар янында хаҡлы ялда булыусыларға һатыу итеү өсөн махсус урындар бирелгән. Бик уңайлы итеп эшләнгән бындай урындарҙа һатыу иткән өсөн пенсионерҙар бер ниндәй ҙә хаҡ түләмәй, уларға ниндәйҙер рөхсәт ҡағыҙы, ҡуртымға алыу өсөн килешеүҙәр төҙөргә кәрәкмәй. Тикшереү үткәреүселәргә пенсия танытмаһын күрһәтеү ҙә етә. Бындай шәп мөмкинлекте мин ҡулдан ысҡындырманым һәм "эшҡыуар" пенсионерҙар рәтен тулыландырҙым. Ҡала фатирында йәшәгәс, ҡайһы бер апай-ағайҙар кеүек, мин үҙ баҡсамда үҫкән йәшел һуған, укроп, петрушкаларҙы тәҡдим итә алмайым. Шуға күрә Затон биҫтәһендәге күмәртәләп һатыу баҙарынан көсөм еткән тиклем йәшел үләндәр һатып алам да, бәләкәй бәйләмдәргә бүлеп, һатыуға сығарам.Йәшел тәмләткестәрҙе бик теләп һатып алалар, шуға күрә килемем дә арыу ғына була. Мәҫәлән, сағыштырыу өсөн, Затон биҫтәһенән алған 150 һумлыҡ тауарҙан 300-400 тирәһе аҡса эшләйем. Ләкин был эшмәкәрлегем миңә, иң мөһиме, кеше араһында булырға, аралашырға мөмкинлек бирә.

**Луиза АҪЫЛБАЕВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

***Балаларҙың мәктәп тамамлап, һөнәр һайлау алдында торған мәле. Улығыҙҙың, ҡыҙығыҙҙың йә уҡыусыларығыҙҙың ниндәй һөнәр һайлауын теләйһегеҙ, ул һөнәр замانға яраҡлымы?***

**(Башы 1-се биттә).**

***Гөлшат ӘҮХӘҘИЕВА, Йылайыр районы, йорт хужабикәһе:*** Ҡыҙыбыҙ Айгөл быйыл IX класты тамамланы. Оптималләштереү, тип, ауылыбыҙҙа X һәм XI кластарҙы бөтөрҙөләр, уҡыуын дауам итеү өсөн хәҙер уға йә 12 километрҙа ятҡан күрше ауылға йөрөргә, йә Сибай, Магнит тирәһенә барып, мотлаҡ берәй колледжға инергә кәрәк. Бында инде һайланып тороп булмай - йөрөп уҡыуҙың ни икәнен һөйләп тороу кәрәкмәйҙер. Айгөл үҙе медицина колледжына барырға теләй, мәктәптә тик "дүрт" һәм "биш"кә генә уҡыны. Шулай булһа ла төрлө хәлгә әҙер булыу кәрәк. Кем белә, конкурстан үтмәй ҡалыуы ла ихтимал, сөнки имтихан һөҙөмтәләре буйынса күрһәткестәре уртасараҡ кимәлдә. Шуға күрә, түләп инергә тура килһә, тип, бер аҙ йыйнаштырған бол бар. Бер нигә ҡарамай, быйыл баланы колледжға индерергә кәрәк, тигән уйҙамын, сөнки X, XI кластарҙы бөтөргән хәлдә юғары уҡыу йортона инеүе тағы ла ҡыйыныраҡ, ә түләп уҡытыу өсөн тағы ла күберәк аҡса кәрәк буласаҡ. Фельдшер, шәфҡәт туташы - ул бик кәрәкле, изге һөнәр. Дөрөҫ, хәҙер ауылдарҙа фельдшер пункттарын да ҡыҫҡартып бөтөрҙөләр, уҡып сыҡҡас, эш табыуы проблема булыуы бар, ләкин беҙҙең өсөн әлеге көндә иң мөһиме - уҡырға инеү. Иҫән-һау булһаҡ, эше табылыр: медицина буйынса дипломы булһа, косметолог, диетолог йә массажист кеүек һөнәр үҙләштереүе ҡыйын булмаҫ, тип хыял итә ҡыҙыбыҙ үҙе лә. Беҙҙең теләктәр тап килә, тип әйтеүем.

***Илсур СӨЛӘЙМӘНОВ, Башҡорт республика лицей-интернатының "Үҫеш" фонды директоры:*** Билдәле булыуынса, беҙҙең лицейға һәләтле балалар бөтөн республика буйынса һайлап алына, һәм улар үҙҙәренең ҡайҙа, ниндәй йүнәлештә уҡыясаҡтарын алдан белеп килә, был уларҙың ата-әсәләренә лә яҡшы мәғлүм. Шуға күрә, лицейҙы тамамлаусыларҙың һөнәр һайлау мәсьәләһендә ата-әсәләре менән аңлашылмаусылыҡ, фекер айырымлыҡтары юҡтыр, тип уйлайым. Дөрөҫ, беҙҙең башҡорт балаһы бәләкәйҙән артист, ҡурайсы, йырсы, бейеүсе булырға хыяллана, ләкин ундайҙар лицей-интернатҡа килеп, информатика дәрестәрен үтә башлаһа йәки беҙҙең робот техникаһы ҡаҙаныштарын ғына күреп тә бөтөнләй икенсе донъяға килеп инеүҙәрен тоя һәм әлеге бала саҡ хыялдары менән хушлашыуын һиҙмәй ҙә ҡала, сөнки техника өлкәһе - үҙе бер мауыҡтырғыс донъя. Белеүегеҙсә, техник йүнәлеш һәм инглиз телен өйрәнеү, дөрөҫөрәге, математика, информатика, физика, химия кеүек фәндәрҙе инглиз телендә уҡытыу лицейҙың төп йүнәлеше булып тора һәм ғәҙәттә балаларҙың 70 проценты мәғлүмәт технологияһы, авиация һәм нефть уҡыу йорттарын һайлай һәм әле берәүҙең дә кире уйлағаны, үкенес белдергәне юҡ, булмаясаҡ та. Техник фәндәрҙе инглиз телендә үҙләштереүҙең дә өҫтөнлөктәре бәхәсһеҙ икәнен күрә улар. Мин үҙем, мәҫәлән, техник вузда бакалавриатты бөтөргәс, Бөйөк Британияла магистратурала белем алып ҡайттым. Бындай перспективанан бер кемдең дә баш тартҡыһы килмәҫ. Бар, әлбиттә, гуманитар йүнәлеште үҙ итеүселәр, юрист, иҡтисадсы һөнәрҙәрен һайлаусылар ҙа, ләкин киләсәктә улар үҙҙәрен эш урындары һәм хеҙмәт хаҡына бәйле проблемалар көтөүе хаҡында хәбәрҙар булырға тейештәр.

**Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА**
**яҙып алды.**

ТУҠТА, МӘЛ!

# ЙӨҘ ДУҪЫҢ БУЛҺЫН...



Туймазы районының башҡорт теле уҡытыусылары.

УҠЫУСЫ ҺҮҘЕ

# ХАЛҠЫБЫҘҘЫҢ...
## тын алышын көйләүсе

**Мин "Киске Өфө" гәзитен Ишембай районы Сәлих ауылында йәшәүсе 80 йәшлек әсәйемә лә, ошо уҡ райондың Смаҡай ауылында йәшәүсе 85 йәшен тултырған ҡәйнәмә лә яҙҙырам. Әсәйемдең Өфөгә килһә лә, башҡа урынға барһа ла, сумкаһына гәзиттең һуңғы бер-нисә һанын һалып алып йөрөтә торған ғәҙәте бар. Өйҙә уҡып өлгөрмәгән һандарын шулай уҡып бөтөрөп, күңелен тынысландырып ҡуя ул.**

Ҡала кешеһенең гәзит-журнал, китап-маҙар уҡып ултырырға ваҡыты ла етеңкерәмәй китә инде. Әммә мин "Киске Өфө"нө уҡырға ваҡыт табам һәр саҡ. Кухняла бешеренеп йөрөгән ваҡытта ла бер ҡулымда гәзит була минең. Өйҙәгеләр ҙә был ғәҙәтемә күнегеп бөткән инде. Ә гәзитте "Аҡыл-ҡаҙна" рубрикаһынан башлап уҡыйым, ундағы аҡылдың төплөлөгөнә хайран ҡалам. Гәзиттең урта битендә гел урын алған "Монолог", "Диалог"тарҙы иһә, халҡыбыҙҙың фекер һандығы, тип атарға булалыр. Дөйөм алғанда, гәзит халҡыбыҙҙың тын алышын көйләүсе лә, уға замана темпын биреүсе лә, минеңсә.

**Хәбирә ХӘМИҘУЛЛИНА,**
**Башҡортостан юлдаш телевидениеһы режиссеры.**

НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓РФ Хөкүмәте Премьер-министры Дмитрий Медведев Башҡортостанда эш сәфәре менән булып китте. Ул Благовещен ҡалаһында илдең нефть химияһы сәнәғәтен үҫтереү мәсьәләләренә арналған кәңәшмә уҙғарҙы, "Полиэф" асыҡ акционерҙар йәмғиәтенең эшмәкәрлеге менән танышты, продукция өлгөләрен ҡараны. Бөгөн был заводта меңдән ашыу кеше эшләй. Ул Рәсәйҙә терефталь кислотаһы етештереүсе берҙән-бер предприятие һанала, ә бындағы кеүек полиэтилентерефталат сығарыусы тағы ике генә предприятие бар. Продукция медицина препараттары, көнкүреш химияһы өсөн һауыттар, пластик шешәләр эшләүҙә ҡулланыла.

✓Башҡортостан Президенты Рөстәм Хәмитов билдәле театр һәм кино актеры Константин Хабенский һәм кинорежиссер, сценарист һәм продюсер Тимур Бекмамбетов менән осрашыу үткәрҙе. Һүҙ Өфөлә барған "Оперение-2013" Бөтә Рәсәй фестивале һәм артабан хеҙмәттәшлек итеү мөмкинлектәре хаҡында барҙы. Осрашыуҙа шулай уҡ Өфөлә дөйөм ҡала кимәлендә йәнә бер ижади үҫеш студияһын асыу тураһында һүҙ барҙы. Тәүге студия 2011 йылда баш ҡаланың 49-сы мәктәбендә асылғайны.

✓Мәскәүҙә, Һиндостандың Рәсәй Федерацияһындағы илселегендә, Башҡортостан презентацияһы үтте. Республика исеменән БР Хөкүмәте Премьер-министры урынбаҫары Салауат Сәғитов, Өфө ҡала округы хакимиәте башлығы Ирек Ялалов һәм башҡа рәсми вәкилдәр ҡатнашты. Һиндостан Республикаһының Рәсәйҙәге Ғәҙәттән тыш һәм Тулы хоҡуҡлы вәкиле Аджай Малхотра Башҡортостан халҡын һәм мәҙәниәтен яратыуы һәм ҡәҙерләүе хаҡында әйтте. Илсе республиканың юғары мәҙәни кимәлен билдәләне. Шулай уҡ ул Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театрының Рәсәйҙә берҙән-бер Джавахарлал Неру премияһы лауреаты булыуын иҫкә төшөрҙө.

✓Ҡырмыҫҡалы районының Тауһеңер ауылы эргәһендәге майҙанда "Төньяҡ амурҙары - 1812 йылғы Ватан һуғышында башҡорт яугирҙары" хәрби-тарихи реконструкцияһы республика конкурс-фестивале булып үтте. Фестиваль дүртенсе тапҡырға ойошторолдо һәм был юлы унда ун команда ҡатнашты.

МИЛЛИ ИДЕЯҒА ТОРОШ

# КҮЛӘГӘҺЕ ЮҠ ТАУҘАН БИҘ

**Гәзиттең быйылғы һандарында "Ботаҡһыҙ ағастың күләгәһенә барма" (4-се һанда), "Аҡ ҡайындан ҡара күләгә төшә" (9-сы һанда) әйтемдәренә һалынған мәғәнәләрҙе аңларға тырышып ҡарағайныҡ. Нисек килеп сыҡҡандыр, унныһы уҡыусы хөкөмөндә. Күләгәгә бәйле тағы ла бер әйтем: "Күләгәһе юҡ тауҙан биҙ". Тауҙың күләгәһе буламы ни, тип әйтер бераү. Нишләп булмаһын, ҡояш ҡырын ҡарағанда ер өҫтөндә һерәйеп торған һәр нәмәнең күләгәһе була инде ул. Тауҙарҙың да төрлөһө була. Әйтәйек, дала яҡтарында бер ағасты - урман, ҡалҡыулыкты тау тиҙәр. Уларҙың тауының күләгәһе булмаймы ни инде? Тимәк, әйтемгә һалынған төп фекер географик күренеш булған тау хаҡында ғына түгел. Фекер ағышыбыҙҙы шул тарафҡа йүнәлтәйек...**



Әҫе көндә бер кеше юл буйлап яңғыҙы китеп барған. Ул тәүҙә бер нәмәнән дә, бер кемдән дә ҡурҡмайынса, шикләнмәйенсә, һәүетемсә генә атлаған. Ҡурҡыр ине лә, юл буйында һиҫкәнерлек бер кем дә, бер нәмә лә тап итмәгән. Шулай бара торғас, уның күнеләнә, үҙе лә һиҙмәҫтән, ҡурҡыу тойғоһо инеп урынлашҡан. Дөрөҫөрәге, йәйәүле үҙ-үҙенән ҡурҡа башлаған һәм шәп итеп йүгерергә тотонған, атлаусынан йүгереүсегә әүерелгән. Йүгергән саҡта аяғы ергә ҡағылыуҙан сыҡҡан тауыш күнелендәге ҡурҡыу тойғоһон көсәйткән генә. "Кем минең артымдан баҫтырып килә һуң?" тигән уйға төшкән йүгереүсе. Ул, йүгереп барған килеш, күҙ ҡырыйы менән генә артына боролоп ҡараған. Тәне эҫеле-һыуыҡлы булып киткән йүгереүсенең, уның артынан үҙенең күләгәһе бер тотам да ҡалмай эйәреп, баҫтырып килә икән дә. Үҙ күләгәһенән ҡасып барыусы йүгереү тиҙлеген тағы ла арттыра төшкән. Шунан тағы ла артына боролоп ҡараған, ул ни тиклем шәберәк йүгерһә, уның күләгәһе лә шул тиклем шәберәк йүгерә, имеш.

Шулай итеп, был кеше бер нисек тә йүгереүенән туҡтала алмаған һәм һуңғы сиктә аҡылдан яҙа башлаған. Ауылдаштары көнө буйына болан етеҙлегендә талпынып йүгереп йөрөүсе кешене күреп, уны ниндәйҙер бөйөк ғәмәл башҡарып, аскетик йола гәмәле үтәп йөрөйҙөр, тип ҡабул ҡылған. Йүгереүсе кеше кистәрен ҡояш офоҡҡа барып йәшеренгәс кенә туҡталып ял итә алған. Әммә иртәгәһенә таңдан офоҡта ҡояш күренеү менән тағы ла йүгерә башлар булған ул. Бер-ике көн үтеүгә, ул хатта ҡояш байығас та йүгереүҙән туҡтамаған. Көнө буйы йүгереүем бик аҙ, күләгәм шундуҡ мине ҡыуып етә, исмаһам, төндә юл ыратып, күләгәмдән алыҫлашып ҡалайым, тип уйлаған ул. Тик гәжәп, уның күләгәһе һаман да артынан ҡалмаған, төшкөләккә хатта уны баҫтырып еткән, шуға ла төштән һуң был әҙәм кире тарафҡа йүгерә башлаған.

Тәүлек әйләнәһенә йүгергәс, ул ашамаған да, эсмәгән дә. Ҡайһы бер кешеләр уға һөкланыуын белдереп, юлына сәскәләр ташлаған, кемдер бераү уға икмәк, һыу биргән. Бер аҙҙан йүгереүсе кеше меңәрләгән кешенең һөкланыу объектына әүерелгән, әммә кешеләрҙең бындай мөнәсәбәтенән йүгереүсе тағы ла нығыраҡ аҡылдан яҙа барған һәм һуңғы сиктә ул йығылып китеп, йән биргән.

Ауылдаштары йүгереүсене хөрмәтләп, бер ағастың күләгәһенә ерләгән һәм уның ҡәбер ташына нимә яҙырға белмәйенсә, ауылдың бер фәкиренә мөрәжәғәт иткән. Фәкир унда шундай һүҙҙәрҙе яҙған: "Был ҡәберҙә ғүмере буйына үҙенең күләгәһенән ҡурҡып, унан ҡотолор өсөн ҡасып, ғүмерен заяға үткәреүсе кеше үҙенә тыныслыҡ тапты. Әммә был кеше үҙенең ҡәбер ташы белгән тиклемдә лә белә алманы: ҡәбер ташы бер кемдән дә, бер нәмәнән дә ҡасмай, шуға күрә ул һәр ваҡыт күләгәлә тора..."

Үлем - ул беҙҙең күләгәбеҙ. Әгәр ҙә беҙ унан ҡаса башлаһаҡ, бер ҡасан да туҡтала һәм уның ни икәнлеген белә алмаясаҡбыҙ. Әгәр ҙә ошо йүгереүсе кеше бер аҙға ғына туҡтап, үҙенең артынан нимә ҡыуғанын аңлаһа, шарҡылдап көлөр ине лә: "Әгәр ҙә үҙемдең күләгәмдән ҡасам икән, мин ниндәй кеше булып сығам инде?" - тип әйтер ине, моғайын. Кеше бер ҡасан да үҙ күләгәһенән ҡаса ла, уны еңә лә алмай. Был бер ҙә күләгәнең шундай көслө һәм уны еңеү мөмкин булмауын аңлатмай. Был бары тик күләгәнең бөтөнләй булмауы, шулай булғас, уны еңеү ҙә мөмкин түгеллеген аңлата. Булмаған нәмәне нисек еңәһең инде? Бына ни өсөн кешеләрҙе үлем еңә, сөнки үлем - ул ғүмерҙең күләгәһе.

Хәҙер инде юғарыла килтерелгән риүәйәттән сығып, "Күләгәһе юҡ тауҙан биҙ" тигән әйтемде аңларға тырышып ҡарайыҡ. Бында күләгә ҡояштан ышыҡланып ял итер, хәл йыйыр, ә тау ер өҫтөнән ҡалҡып, һерәйеп торған географик объект ҡына түгел. Әгәр ҙә беҙ әйтемде тура аңлашылған мәғәнәһендә ҡабул итһәк, ял итерлек күләгәһе булмаған өсөн генә ниңә беҙ тауҙан баш тартырға, унан биҙергә тейеш һуң әле, тип йылмайыр-көләр генә инек. Шуға күрә, әйтемгә һалынған кинәйәне түбәндәгесә тәфсирләргә мөмкиндер:

-кеше үҙ ғүмерендә ниндәй генә юғарылыҡҡа өлгәшмәһен (тау), ғүмерҙең фани икәнлеген аңлауы ғына уны рухи үлемдән һаҡлап ала;

-донъяла идеаль кеше булмай, хатта иң юғары дәрәжәгә өлгәшеүселәрҙең дә ҡара күләгәһе (үлеме), хатаһы, гонаһы була;

-кеше ни тиклем юғарыраҡ күтәрелгән һайын, уның күләгәһе лә, хата-гонаһтары ла ҙурыраҡ;

-Урал батыр йәншишмәнән алған һыуҙы эсмәйенсә, тирәяҡҡа һибә, үлемде ҡабул итә һәм уның тәненән Урал тауҙары хасил була. Һ.б.

Ә бит, төптән уйлап ҡараһаң, әйтемгә һалынған кинәйәнең төп асҡысы ла тап "Урал батыр" эпосында ята кеүек. Урал батыр кешелек, халыҡ өсөн көрәштең иң юғары ҡаһарманлығы, иң мөҡәддәс фиҙаҡәрлеге өлгөһө. Әгәр ҙә шулай булмаһа, оҙонлоо мең саҡрымдан ашыуға, арҡырыһы бер нисә йөҙ саҡрымға һуҙылған тауҙар теҙмәһенә уның исеме лә бирелмәҫ ине. Ул күләгәне - үлемде ҡабул итә һәм халҡыбыҙ күңелендә аҡтан-аҡ нур ҡалдыра. Һүҙемде ҡасандыр йәншишмәнән ауыҙ итеп, мәңге үлә алмай ыҙалап йөрөүсе ҡарттың Урал батырға әйткән һүҙҙәре менән тамамлайым:

*"...Һынап белгән эшем бар:*
*Донъяла мәңге ҡалам, тип,*
*Донъялай ғүмер һөрәм, тип,*
*Үлемгә буй бирмәҫкә,*
*Аны йола итмәҫкә*
*Йәншишмәнән эсмәгеҙ,*
*Миндәй хурлыҡ күрмәгеҙ.*
*Донъя - у бер бағ икән;*
*Йән эйәһе донъяла*
*Донъя быуынынан һанаған.*
*Ҡайһы быуын таплаған,*
*Ҡайһы аны аҡлаған,*
*Төрлө төҫкә биҙәгән,-*
*Бары үсемлек, гөл икән;*
*Беҙ Үлем тип һанаған,*
*Яуыз у, тип ҡараған -*
*Бағтың туҙған үсмерен,*
*Йәки көнө тулғанын*
*Сүпләп, бағты бушатҡан,*
*Анан донъя ташлатҡан*
*Бөтмәй торған йола икән.*
*Мәңге ҡалам тимәгеҙ,*
*Йәншишмәнән эсмәгеҙ..."*

**Әхмәр ҒҮМӘР-ҮТӘБАЙ.**

## Н И М Ә ? Ҡ А Й Ҙ А ? Ҡ А С А Н ?

✓РФ Президенты Владимир Путин балиғ булмағандар араһында традицион булмаған енси мөнәсәбәттәрҙе пропагандалауҙы тыйған законға ҡул ҡуйҙы. Шулай уҡ РФ Енәйәт кодексының 148-се статьяһына индерелгән төҙәтмәгә ярашлы, халыҡ алдында дин тотҡан кешеләргә хитирамһыҙлыҡ күрһәткән, уларҙы мыҫҡыллаған өсөн яза ҡарала. Яза 300 мең һумға тиклем штраф һалыуҙан, бер йылға тиклем иректән мәхрүм итеүҙән йәки ошо уҡ срокка мәжбүри эшкә йәлеп итеүҙән ғибәрәт. Әгәр ҙә дини йолалар башҡарыу урынында тәртипһеҙлек ҡылынһа, хоҡуҡ боҙоусыға 500 мең һумға тиклем штраф һалыныуы, уның өс йылға тиклем мәжбүри эшкә йәлеп ителеүе йәки иркенән мәхрүм ителеүе ихтимал.

✓Өфө халҡы Ленин һәм К. Маркс урамдары араһындағы Пушкин скверын Рудольф Нуриев исеменә үҙгәртеү тураһындағы тәҡдимде хупламаны. Һорау алыуҙа 1312 өфөлө ҡатнашты. Уларҙың күбеһе был аллеяның исемен үҙгәртмәү яғында булды.

✓БР Хөкүмәте, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитеты, "Айыҡ Башҡортостан" төбәк йәмәғәт хәрәкәте һәм "Шайморатов" яуаплылығы сикләнгән ойошмаһы Ҡырмыҫҡалы районының Тауһеңер ауылы эргәһендәге майҙанда "Айыҡ ауыл -2013" республика конкурсы саралары сиктәрендә II "Айыҡ ауылдарҙың мәктәп-слет"ын ойоштороҙо. Унда "Айыҡ ауыл -2013" конкурсында ҡатнашыусы ауылдар вәкилдәре йыйылып, төрлө лекциялар, айыҡлыҡ хәрәкәтен киң йәйелдереү буйынса тәжрибәһе булған ауылдар вәкилдәрен тыңланы, семинарҙарҙа, түңәрәк ҡор һөйләшеүҙәрендә, тренингтарҙа ҡатнашты. Сараға күрше төбәктәрҙән Башҡортостан тәжрибәһен өйрәнергә байтаҡ делегация ла килгәйне.

✓"Роспотребнадзор"ҙың БР буйынса идаралығы беҙҙең территориялағы сауҙа нөктәләрендә GII норовирусы менән зарарланған туңдырылған ҡурай еләге булыу ихтималлығы тураһында иҫкәртә. Был еләк республикаға Голландиянан индерелгән. Быға тиклем уның Польша эшҡыуарҙарынан алыныуы билдәле. Норовирус ашҡазан-эсәк ауырыуҙары эпидемияһына килтереүе ихтимал.

**"Башинформ"дан.**

✓ *Яңы уҡыу йылында туған телдәр уҡытыусыларының һаны кәмеү-кәмемәүгә ҡағылышлы һорауға яуап биреп, сығыш яһаусы райондарында бер генә мәктәптә лә туған телдәрҙе уҡытыусылар һанының ҡыҫҡартылмаясағын белдерҙе.*



ҮӘТ, ШУЛАЙ!

# ВАҠЫТ КҮРҺӘТЕР...

**Ҡала округы советының сираттағы сессияһы ултырышында депутаттар ике тиҫтәгә яҡын мәсьәлә ҡараны. Шулар араһында, моғайын, иң төп урында Өфөнөң Инвестицион стратегияһын тикшереү һәм раҫлау булғандыр.**

Быға тиклем беҙ был документ менән таныштырып, уның баш ҡала өсөн программа документы булып тороуын билдәләгәйнек инде. Әлбиттә, тәүге ҡоймаҡ төйөрлө була, тигәндәй, документ бар, эштәр гөрләп алға китер тип уйларға ярамай. Сөнки быңдай программа Өфө тарихында беренсе тапҡыр ҡабул ителә, ә инде Рәсәйҙең халҡы миллиондан ашыу булған ҡалалары араһында ла әлегә үҙ Инвестицион стратегияһына эйә булыусылар бик һирәк. Шулай ҙа Өфө ҡала округы хакимиәте башлығының инвестициялар буйынса урынбаҫары Илдар Хәсәнов белдереүенсә, йән башына инвестициялар күләме йылдан-йыл үҫә. Әлегә Башҡортостан илдә ошо күрһәткес буйынса алтынсы урында килһә, алдағы өс-биш йылда тәүге өсәү араһына инеү ихтималлығы бар. Шуға ла бында, ваҡыт күрһәтер, тип, яҡшыға өмөтләнергә генә ҡала.

Иғтибарға лайыҡ икенсе мәл - республиканың баш ҡалаһында көнкүреш һәм сәнәғәт ҡалдыҡтарын йыйыу, сығарыу, утилләштереү һәм ҡайтанан эшкәртеү мәсьәләһе булды. Бөгөн был эш менән "Ҡаланы таҙартыу буйынса махсус хужалыҡ" һәм ТСЖ-лар, Торлаҡ-эксплуатация участкалары шөғөлләнә. Әлеге ваҡытта 725 мең кубометр ҡалдыҡ сығарылған. Өфө эргәһендәге ауылдарҙан көнкүреш ҡалдыҡтарын йыйыу буйынса махсус "Ҡыҙыл-һары пакет" тип аталған программа эшләй. Ауылдар һәм ҡасабалар халҡы махсус сүп йыйыу пакеттарын һатып ала һәм уларҙы билдәле бер ваҡытта йорт алдарына сығарып ҡуя. Был пакеттарҙың хаҡына уларҙы йыйып сығыу һәм полигонға сығарыу сығымдары индерелгән. Махсус техника уларҙы йыйып ҡына ала. Ғөмүмән, таҙалыҡ булдырыу "командаһында 170 берәмек шундай техника иҫәпләнә.

Шулай ҙа баш ҡала өсөн көнкүреш һәм сәнәғәт ҡалдыҡтарын эшкәртеү предприятиеһының булмауы проблема тыуҙыра. Әле сүп-сар Черкассы ауылындағы 100 гектарҙан ашыу майҙанды биләгән махсус полигонға сығарыла. Был мәсьәлә буйынса күптән түгел тап ошо йүнәлештә махсуслашҡан НПК-Инжиниринг компанияһы вәкилдәре менән уҙған осрашыу тиҙҙән был проблеманы хәл итеүгә ынтылыш бирер, тип ышанғы килә.

Баш ҡалала уҙғарылған социологик һорау алыуҙарҙың һөҙөмтәләре лә иғтибарға лайыҡ. Былтыр ғына баш ҡалала 16 социологик тикшеренеү уҙғарылған. Уларҙа барлығы 14 мендән ашыу респондент ҡатнашҡан. Шулай уҡ хакимиәттең сайтында ла анкет мәсьәләләр буйынса граждандарҙың фекерен белешеү даими бара. Социологик һорау алыуҙарҙың тематикаһы тормошобоҙҙоң төрлө өлкәләренә ҡағыла.

**Земфира ХӘБИРОВА.**

...ҒӘҘӘТТӘРЕ КҮРКӘМ

# БАШҠОРТ ТЕЛЕНДӘ ҺӨЙЛӘШӘМ...

## башҡорт телендә!

**"Мин Өфө ҡала округы хакимиәтенең физик культура һәм спорт комитетында эшләйем. Мәскәү ҡалаһында тыуып-үҫһәм дә, үҙемде Башҡортостаныбыҙҙың ысын патриоты тип һанайым һәм шуға ла республикабыҙҙың икенсе дәүләт телен ҙур теләк менән өйрәнәм" - Өфө ҡала округы хакимиәтенең "Башҡортостан Республикаһы халыҡтары телдәре тураһында" БР Законын тормошҡа ашырыу буйынса комиссияһының сираттағы ултырышында "Башлап өйрәнеүселәр өсөн башҡорт теле" курстарын тамамлау тураһында сертификат алғандан һуң Татьяна Меркулованың шулай тип белдереүен йыйылыусылар көслө алҡыштарға күмде. Был көндә тиҫтәнән ашыу муниципаль белгескә шундай уҡ сертификаттар тапшырылды.**



Ҡала округы хакимиәте башлығы урынбаҫары Сынтимер Баязитов белдереүенсә, май-июнь айҙарында муниципаль хеҙмәткәрҙәр - ҡала округы хакимиәтенең идаралыҡтары һәм бүлектәр етәкселәре, белгестәре өсөн махсус курстар ойошторолған. "Уҡыусылар" менән Рәсәй Фәндәр академияһы Өфө ғилми үҙәге Тарих, тел һәм әҙәбиәт институтының өлкән ғилми хеҙмәткәре, филология фәндәре кандидаты Миңлехана Баһаутдинова шөғөлләнгән. "Кемдәр курс тамамлаған, улар минең менән осрашҡанда барыһы ла башҡортса һөйләшергә тырыша. Һәм аралашыу бына тиғән килеп сыға", - тип коллегаларының уңыштарына баһа бирҙе Сынтимер Биктимер улы.

Әлеге ваҡытта "Рус теле һәм телмәр мәҙәниәте" программаһы буйынса курстар бара. Уны тамамлаусылар һуңынан шулай уҡ сертификаттарға эйә буласаҡ.

Көн тәртибенә Орджоникидзе районында әлеге Законды тормошҡа ашырыу барышы мәсьәләһе лә сығарылғайны. Хакимиәт башлығы урынбаҫары Эмиль Фәхриев комиссия эше менән ентекле таныштырҙы. Районды 26 мәктәбендә уҡытыу рус, башҡорт, татар телдәрендә алып барыла. Шулай уҡ бында ике милли инновацион белем биреү усағы - 48-се башҡорт лицейы һәм 65-се татар гимназияһы, өс - башҡорт, татар, немец - йәкшәмбе мәктәбе эшләй. Ике балалар баҡсаһында - башҡорт, берәүһендә татар теле өйрәнелә.

Яңы уҡыу йылында, мәғариф тураһындағы яңы закон ҡабул ителгәс, туған телдәр уҡытыусыларының һаны кәмеү-кәмемәүгә ҡағылышлы һорауға яуап биреп, сығыш яһаусы райондарында бер генә мәктәптә лә туған телдәрҙе уҡытыусылар һанының ҡыҫҡартылмаясағын белдерҙе.

Өфө ҡала округы хакимиәтенең Йәштәр сәйәсәте буйынса комитет рәйесе Урал Килсенбаев Законды тормошҡа ашырыу төрлө мәҙәни саралар ярҙамында алып барылыуын һыҙыҡ өҫтөнә алды. "Шаяниум", "Йәш ғаилә", быйыл икенсе тапҡыр ғына ойошторолған "Кош юлы" фестивале һәм башҡа бик күп саралар быға миҫал булып тора.

Шулай ҙа быйыл дөйөм ҡала акцияһы форматында уҙғарылған "Йәштәр - грамоталы ҡалаға" акцияһына айырым иғтибар биреп, уға ентекләберәк туҡталмау мөмкин түгел. Ул апрелдә бер аҙна дауамында Мифтахетдин Аҡмулла исемендәге Башҡорт дәүләт педагогия университетының Башҡорт теле хеҙмәтенә йөрөгән төрлө курс студенттары ҡатнашлығында барҙы. Ҡала районлары хакимиәттәре акция хаҡында алдан хәбәрҙар булып, уның барышына ыңғай шарттар тыуҙырҙы.

Сараның маҡсаты предприятиеларҙың, ойошмаларҙың, учреждениеларҙың алтаҡталарындағы, юл күрһәткестәрендәге, туҡталыштарҙағы, рекламаларҙағы һәм башҡа визуаль мәғлүмәттең хатаһыҙ булыу-булмауын асыҡлау ине.

14 студент баш ҡаланың ете районында алдан билдәләнгән схема-маршрут буйынса башҡорт теле уҡытыусылары, хакимиәт вәкилдәре менән бергә 45 урамдағы төрлө 723 мәғлүмәттең Закон талаптарына тап килеү-килмәүен тикшерҙе. Һөҙөмтәлә бөгөн 349 орфографик, грамматик һәм стилистик хата күҙәтеү аҫтына алынған. Уларҙың 27-һе - Дим, 40-ы - Калинин, 50-һе - Киров, 74-е - Ленин, 95-е - Октябрь, 27-һе - Орджоникидзе, 36-һы Совет райондарына тура килә. Анализ күрһәтеүенсә, хаталар саҙа-күңел асыу комплекстары күп булған урындарҙа йыш осрай.

"Алтаҡталарҙа, башҡа визуаль мәғлүмәт сығанаҡтарындағы хаталар уларҙы эшләүсе ойошмаларҙа башҡорт хәрефтәренең булмауындалыр, тип уйлайбыҙ, - тине үҙәнең сығышында вуздың башҡорт филологияһы факультетының башҡорт теле һәм уны уҡытыу методикаһы кафедраһы доценты, филология фәндәре кандидаты Эльвира Рәхимова. - Мәсәлән, *ҡ, ң, ҙ, ғ* хәрефтәрен яҙғанда бик күп хата ебәрелә. Тәржемәләрҙә етди хаталар юҡ. Ҡайһы бер райондарҙа урамдарҙың башҡортса тәржемәһе яҙылмаған".

Әйткәндәй, ултырышта ошо акцияны үткәреүҙә әүҙемлек күрһәткән студенттарға һәм уларҙың етәксеһе Эльвира Рәхимоваға Рәхмәт хаттары, махсус футболкалар тапшырылды. Ә инде райондар хакимиәттәренә, акция барышында асыҡланған етешһеҙлектәр 1 сентябргә тиклем төҙәтелергә тейеш, тигән күрһәтмә бирелде.

**Шәрифә САЛАУАТОВА.**

## БАШ ҠАЛА ХӘБӘРҘӘРЕ

✓Хаж ҡылыусыларға квота быйыл 20 процентҡа ҡыҫҡартыла. Рәсәй мосолмандарының Үҙәк диниә назаратына - 1,3, Рәсәйҙең Мөфтөйҙәр советына 3 мең путевка бүленгән булған. Хәҙер кемдәргәләр сәйәхәтте кисектереп торорға тура киләсәк. Был Джиддә һәм Мәҙинәләге аэропорттарҙы, Ҡәғбәтуллла тирәһен, Мәҙдәлифә, Мина, Ғәрәфәт яландарын киңәйтеү эштәре алып барылыу менән бәйле.

✓Башҡорт дәүләт университетының иктисад факультеты Иктисад, финанс һәм бизнес институты итеп үҙгәртелде. Уҡыу йортонда һигеҙ кафедра, шулай уҡ төбәктәрҙең социаль-иктисади мәсьәләләрен тикшереү лабораторияһы, ғилми-мәғлүмәт секторы, уҡытыу бүлектәре бар. Директоры итеп Рөстәм Ахунов тәғәйенләнде.

✓Башҡортостанда IV "Эшләүсе әсәләр өсөн иң яҡшы предприятие" республика конкурсы үткәрелә. Эшләүсе әсәләр өсөн унайлы хеҙмәт һәм социаль шарттар булдырыу, хеҙмәт баҙарында социаль-хеҙмәт мөнәсәбәттәр өлкәһендә кире тенденцияларҙы булдырмауға булышлыҡ итеү конкурстың төп маҡсаттары булып тора. Сараны БР Профсоюздар федерацияһы, төбәктең Хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы, республиканың Сауҙа-сәнәғәт палатаһы ойоштора. Бәйге 1 октябргә тиклем дауам итәсәк.

✓Өфөлә Атлы туризм үҙәге булдырыласаҡ. Быңдай ҡарар баш ҡаланың "Аҡбуҙат" ипподромында үткән кәңәшмәлә ҡабул ителде. Билдәләнеүенсә, аттар республикабыҙҙа йөшәгән халыҡтар мәҙәниәтенең һәм көнкүрешенең айырып алғыһыҙ өлөшө булып тора, ә уникаль тәбиғәт шарттары туризмдың барлыҡ төрҙәрен үҫтерергә мөмкинлек бирә. Әммә Башҡортостандың был өлкәләге мөмкинлектәре тулыһынса файҙаланылмай. Мәсьәләне хәл итеүҙә "Аҡбуҙат" ипподромы ышаныслы партнер булып тора, шуға күрә Йылҡысылыҡты үҫтереү үҙәген тап бында асырға ҡарар ителде.

✓Болгарияның София ҡалаһында юниорҙар араһында заманса биш төр ярыш буйынса Европа беренселеге тамамланды. Ҡатнаш эстафетала беренсе урынды Рәсәй спортсылары яуланы. Өфөлә Гөлназ Ғөбәйҙуллина менән Илья Шугаровҡа етеүселәр булманы.

*✓ Өфө ҡалаһы буйынса бер кешегә 3,219 куб эҫе һыу ҡулланыу нормативы билдәләнһә, АСТ күләме айына уртаса 50 һум тәшкил итә. Түләүҙәр ғариза яҙып, Республика субсидиялар үҙәгенә мөрәжәғәт иткән бөтә граждандарға бирелә.*



*ХОҠУҒЫҢДЫ БЕЛ!*

**Халыҡта шундай мәҡәл бар: ҡулың менән биргәнде аяғың менән ал. Йәғни кемгәлер үҙ ҡулың менән бурысҡа аҡса биреп торһаң, уны аяғың менән йөрөп-йөрөп юллап алыуҙы аңлата ул. Тулыһынса бөгөнгө темаға тап килеп тә бөтмәйҙер, бәлки, әммә һүҙебеҙ тап аҡса мәсьәләһенә һәм уны нисек итеп бер ҡулың менән биреп, аяғың менән юллап, икенсе ҡулың менән ҡабат үҙеңә ҡайтарып алыу хаҡында.**

# УҢ ҠУЛЫҢ МЕНӘН БИР ҘӘ...

## һул ҡулың менән ал!

Ҡыҫҡаһы, июлдең беренсе көнөнән үк ғәмәлгә ингән коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләүгә тарифтар үҙгәреүгә бәйле халыҡҡа ентеклерәк аңлатма биреү - тап беҙҙең, киң мәғлүмәт саралары хеҙмәткәрҙәренең бурысы. Шуға ла Өфө ҡала округы хакимиәтендә үткән матбуғат конференцияһында хакимиәт башлығы урынбаҫары Владимир Дмитрюк һәм махсус хеҙмәттәр вәкилдәре бәйән иткән мәғлүмәтте гәзит уҡыусыларға еткерәбеҙ.

Мәғлүм булыуынса, хәҙер тарифтар йыл башынан түгел, ә 1 июлдән арта. Тарифтар буйынса федераль хеҙмәт 2013 йылға Башҡортостан өсөн һыуыҡ һыу һәм һыу бүлеү буйынса тарифтарҙы былтырғыға ҡарата - 6,8, йылылыҡҡа былтырғыға ҡарата 12,1 процентҡа арттырҙы.

Ошоға бәйле Башҡортостан Республикаһының Тарифтар буйынса дәүләт комитеты ла хаҡтарҙы күтәрҙе. Быға тиклем Волга буйы федераль округында республиканың баш ҡалаһында коммуналь хеҙмәттәрҙең барлыҡ төрҙәренә лә түләү махсус рәүештә артыҡ ныҡ арттырылмай, кәметелеп килде. Мәҫәлән, 1 ГКалл йылылыҡ өсөн Түбәнге Новгородта, Һамарҙа, Ҡаҙанда, Волгоградта, Пермдә, Һарытауҙа, Ульяновскиҙа түләү 1000 һумдан ашып китһә, Өфөлә ул быға са 792 һум булды.

Ләкин тарифтарҙың түбән булыуы һөҙөмтәһендә ресурс ойошмалары инженер ҡоролмаларының ышаныслы эшләүен тәьмин итә алмай. Шул сәбәпле бөгөн уларҙың 60 проценты тейешенсә ремонтланып еткерелмәгән. Әгәр артабан да тарифтарҙы махсус рәүештә кәметеп, әлеге кимәлдә тотҡанда, киләсәктә был хәл-торош тағы ла ҡатмарлашыуы ихтимал. Әлегә Башҡортостанда Рәсәйҙең башҡа төбәктәрендәге кеүек ҡышын, йылытыу миҙгелендә ғәҙәттән тыш хәл килеп тыумаһа ла, уҙған миҙгелдәге авариялар уйланырға сәбәп бирҙе. Әммә тарифтарҙың ҡапыл артыуы халыҡта ажиотаж һәм хәүеф тыуҙырмаһын өсөн республика Президенты һәм Хөкүмәте сығымдарҙың бер өлөшөн Адреслы социаль түләүҙәр (АСТ) менән кире ҡайтарырға ҡарар итте. Был маҡсатта республика бюджетынан дөйөм алғанда 500 миллион һум аҡса бүленәсәк. Йыл аҙағына тиклем шуның 405 миллионы Өфө ҡалаһы өсөн тотоноласаҡ, ҡалған сумма тотош төбәктең район-ҡалаларына китәсәк. Ни өсөн Өфөгә шундай ҙур сумма, тип баш ватыусыларға шуны ла аңлатып китеү зарур: Өфө - халҡы миллиондан ашҡан ҡала һәм бында коммуналь түләүҙәр башҡа район-ҡалалар тарифтары менән сағыштырғанда күпкә юғарыраҡ.



Адреслы социаль түләүҙәргә килгәндә инде, ул республика өсөн тарифтар буйынса федераль хеҙмәт ҡуйған тариф менән БР-ҙың Тарифтар буйынса дәүләт комитеты билдәләгән тариф араһындағы айырмаға тиң буласаҡ. Мәҫәлән, фатир буйынса иҫәпләүҙәр түбәндәге таблицала асыҡ күренә:

АСТ күләме эҫе һыуҙы ҡулланыуға һәм һыуҙы иҫәпләү ҡоролмаһының булыуына бәйле. Өфө ҡалаһы буйынса бер кешегә 3,219 куб эҫе һыу ҡулланыу нормативы билдәләнһә, АСТ күләме айына уртаса 50 һум тәшкил итә.

Түләүҙәр ғариза яҙып, Республика субсидиялар биреү үҙәгенең урындағы бүлексәләренә 2013 йылдың 31 декабренәсә мөрәжәғәт иткән барлыҡ граждандарға ла бирелә. Ләкин бында шундай сикләүҙәр бар: граждан исеменә торлаҡ һәм коммуналь хеҙмәттәргә түләү өсөн шәхси иҫәп асылырға, унын коммуналь хеҙмәттәр буйынса бурысы булмаҫҡа һәм бер нисә фатирға эйә булыусылар өсөн тап теркәлеү урыны буйынса (фатирҙы ҡуртымға алып йәшәүселәр өсөн ҡуртым килешеүе нигеҙендә) тормошҡа ашырылырға тейеш. Шуны ла иҫтән сығармағыҙ: эҫе һыу буйынса АСТ йыл башынан алып ҡайтанан иҫәпләнһә, йылылыҡ буйынса 1 июлдән иҫәпләнә. Йәғни эҫе һыу буйынса аҡсағыҙҙың бер өлөшөн 1 ғинуарҙан алып кире ҡайтара алһағыҙ, йылылыҡ өсөн 1 июлдән кире ҡайтарыу мөмкин. АСТ өсөн килем күләме иҫәпкә алынмай. Әлеге ваҡытта адреслы социаль түләүҙәр юллап, ни бары 2613 кеше мөрәжәғәт иткән. Шуларҙың 919-ына май айы өсөн аҡсалары кире ҡайтарылған да инде. Әйткәндәй, түләүҙәр документтарҙы **(ғариза, шәхси иҫәп номеры, аҡса күсереү өсөн Уралсиб, Сбербанк, Социнвестбанк картаһы йәки ошо банктарҙың һаҡлыҡ кенәгәһе; паспорт күсермәһе; торлаҡ майҙанға милексе хоҡуғын раҫлаған документтарҙың күсермәһе)** тапшырғандан һуң бер ай үткәс күсерелә. Әгәр документтарҙы иң һуңғы көндә (31 декабрь) тапшырһағыҙ, аҡса 2014 йылдың 10 ғинуарына тиклем күсәсәк. Ләкин оҙон сираттарҙа тороп, байрам алды кәйефен боҙғоғоҙ килмәһә, документтар тапшырыуҙы бөгөндән башларға мөмкин. АСТ алыу буйынса мәғлүмәтте **"БР-ҙың Өфө ҡалаһы Торлаҡ хужалығы идаралығы" ("УЖХ г. Уфы РБ"), "БР-ҙың Өфө ҡалаһы Берҙәм иҫәп-касса үҙәге" МУП-ы (МУП "ЕРКЦ г. Уфа РБ") сайттарында; Өфө ҡала округының рәсми сайтында; идара итеү компанияларында; "Граждандарға торлаҡ биналарға һәм коммуналь хеҙмәттәргә түләүгә субсидиялар биреү буйынса республика үҙәге" Дәүләт ҡаҙна идаралығының структура бүлексәләренән** алырға мөмкин.

| | 32,5 кв. м. майҙан. 1 кеше йәшәй | 45,9 кв. м., 2 кеше йәшәй | 66,9 кв. м., 3 кеше йәшәй |
|---|---|---|---|
| 2013 йылдың 1 ғинуарына Торлаҡ-коммуналь хеҙмәттәр өсөн түләү | **1738,47** | **2697,66** | **3865,22** |
| 2013 йылдың 1 июленә ТКХ өсөн түләү | **1981,85** | **3088,28** | **4469,17** |
| Артҡан, һумдарҙа | **243,38** | **390,62** | **603,95** |
| АСТ күләме | **145,23** | **235,17** | **347,09** |
| АСТ күләме иҫәпкә алынған артыу (йәғни граждан АСТ алғандан һуң түләргә тейешле аныҡ сумма) | **98,15** | **155,45** | **256,86** |
| АСТ күләме иҫәпкә алынған артыу, проценттарҙа | **105,6** | **105,8** | **106,6** |

**Республика субсидиялар үҙәгенең структура бүлексәләренең адрестары:**

**Дим районы:** Левитан урамы, 14/4а, тел.: 281-56-32;
**Калинин районы:** Плеханов бульвары, 5/1, тел.: 263-24-37;
**Төньяҡ (Калинин районындағы бүлексә составында):** Ферин урамы, 19/3, тел.: 239-48-67;
**Киров районы:** Киров урамы, 46, тел.: 276-62-12;
**Октябрь районы:** Рәсәй урамы, 56б, тел.:235-84-93;
**Һупайлы (Октябрь районы бүлексәһе составында):** Гагарин урамы, 10/2, тел.: 234-45-19;
**Орджоникидзе районы:** М. Горький урамы, 48, тел.: 264-66-60;
**Көнсығыш (Орджоникидзе районы бүлексәһе составында):** Рәсәй урамы, 56б, тел.: 284-92-45;
**Совет районы:** Бессонов урамы, 2а, тел.: 282-95-31;
**Ленин районы:** К. Маркс урамы, 45, тел.: 272-66-53.

**Зәйтүнә ӘЙЛЕ.**

# Х А Л Ы Ҡ Д А У А Һ Ы



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклекте онотмағыҙ.**

## Йәшел сәй

Борондан йәшел сәйҙе дизентерия һәм ҡорһаҡ тифын дауалау өсөн ҡулланғандар. Ҡаты итеп бешерелгән йәшел сәйҙе ашҡаҙан-эсәк трактына һәм баш мейеһенә ҡан һауыу ваҡытында, капиллярҙар шартлаған мәлдә файҙаланғандар. Был эсемлек бәүел ҡыуығында, бөйөрҙәрҙә, бауырҙа таш барлыҡҡа килеүҙән һаҡлай, шулай уҡ тиренең функцияларын әүҙемләштерә, тир бүленеп сығыуҙы көсәйтә, күҙәнәктәрҙе таҙарта. Әммә йәшел сәйҙең бөйөрҙәр аша шыйыҡлыҡ сығыуҙы тотҡарлауын да онотмағыҙ.

## Тоҙ ултырһа

❖ 2 йомортҡаны 100 грамм һеркә эссенцияһына һалырға. Йомортҡаларҙың тышы иреп бөткәс, шекәрәһен алып ташлап, йомортҡаны 30 грамм аҡ май менән болғатырға. Килеп сыҡҡан ҡатнашманы ауыртҡан быуындарға һөртөргә.

❖ Картуфты яҡшылап йыуырға һәм ҡабығы менән 3-5 мм ҡалынлығында киҫәктәргә турарға. Картуф ни тиклем бәләкәйерәк була, шул тиклем яҡшыраҡ. 1 килограмм картуфты 3 литр ҡайнап торған һыуға һалырға һәм бер сәғәт бешерергә. Һуңғараҡ әнис (укроп), петрушка, кинза, сельдерейҙы турап һалығыҙ һәм 10 көн дауамында ошо рәүешле әҙерләнгән аҙыҡты ғына ашағыҙ. 10 көндән һыҙланыуҙар баҫыласаҡ.

❖ Билгә һәм ҡулдарға тоҙ ултырһа, алма һеркәһе һеңдерелгән һәм төйөлгән ала миләүшә (лаванда) һибелгән йөн туҡыманы билгә һәм ҡул суҡтарына урап йоҡларға.

❖ Үксәгә тоҙ ултырһа, баҡыр тасты йылытып, өҫтөнә йөн туҡыма һалырға һәм тас һыуынғансы шунда баҫып торорға.

❖ 4 ҡалаҡ дөгөнө 8 сәғәт буйына 2 литр һыуға һалып ҡуйырға. Һуңынан йыуырға, 20 минут бешерергә. Ике стакан бешкән дөгө килеп сығасаҡ. Бер стакан дөгөнө көн дауамында ашап бөтөргә кәрәк.

**Марат ИШМӨХӘМӘТОВ.**

✓ *Килененең ҡулында ыҫмала һымаҡ ҡап-ҡара малайҙы күреп, артына йығылып китә яҙа ул: гонаһһыҙ сабый өләсәһенең бынан бик күп йылдар элек яратып йөрөгән африкан егетенә оҡшаған була!*



*БАҠЫЙ БЫУАТ ЙОЛАҺЫ*

# БАШҠОРТТАРҘЫҢ... дауалау һәм ҡурсалау магияһы

### Ололарға күҙ тейеү менән бәйле им-том

**Күҙҙән ергә ҡарау.** Күҙ тейеүҙән енел һаҡланып була. Бигерәк тә таныш түгел кешенең һиңә ауыр ҡарашын һиҙһәң һәм һеҙҙең күҙҙәрегеҙ осрашты икән, шунда уҡ ергә, ер булмаһа, иҙәнгә ҡара. Теге кешенең һиңә төбәлгән насар энергияһы шул саҡта ситкә йүнәлтелә.

**Сайынды һөртөү.** Күҙ тейһә, ишек тоҡталарын "Бисмилләһир-рахмәнир-рахим" , тип һыу менән сайҡатаһың да усыңа, маңлайыңа, ҡолаҡ арттарыңа һөртәһең.

**Биҙәнеү әйберҙәре тағыу.** Күҙ теймәһен өсөн йөҙөк, һырға, беләҙек, муйынсаҡ, яға, әмәйҙек, сәсбау таҡҡандар.

**Көмөш име.** Күҙ теймәһен тип, көмөш тәңкә, беләҙек, йөҙөк таҡҡандар. Көмөш күҙҙән, сихырҙан һаҡлай. Көмөш яраштыра, тынысландыра, кәйефте күтәрә.

**Күҙҙән им.** Кешегә күҙ тейһә, имсе бер күҙен йома, икенсе күҙен асып, ауырыуҙың күҙен ҡарай һәм шым ғына тауыш менән былай ти: "Атаң (исеме), инәң (исеме) бар, етем-тыума түгелһең (етем-тыумаға ҡарғыш, күҙ рәнйеүе төшмәй). Олатай баға, өләсәй баға (ете быуының әйтәләр, ти), ҡояш апайың бар, Ай ҡустың бар, күгең бар (күк һауа), ҡараң бар (ер)! Ел-нурың һиңә артыҡ, миңә бир. Бына бөттө! Тфү!" (ете мәртәбә).

**Күҙ әпсене.**
*Көнсөл күҙ, айға ҡара!*
*Унда һинең кук, ялтыр тәтәйең!*
*Кеше күҙе* (ауырыған кешенең исемен әйтәләр) *ай түгел,*
*Көҙгө түгел, тәтәй түгел уйнарға! Тфү!*
(Ете мәртәбә төкөрөргә).

**Тел күҙе тейеү.** Күршем бер туҡтамай һыйырын маҡтай, йүгереп керә лә, һыйырын маҡтай. Бер көн һыйыры үлгән. Бер туҡтамай һыйырыңды маҡтаның, "тел күҙе тейҙе һыйырыңа", тинем, ти Белорет районынан Ғәлиә Хисаметдинова.Малға ла, кешегә лә һоҡланып ҡарарға ярамай.

**Күҙ бесәне.** Күҙ бесәне тигән үләнде тауҙан йыйылар. Был үлән бик файҙалы, уны Ильин көнөндә йыйғандар. Шулай уҡ күҙ бесәне менән бергә әрем, таш әреме үләндәрен дә йыйылар. Күҙ тейгән кешене күҙ бесәне менән төтәсләгәндәр, төтөнөн уға еҫкәткәндәр.

**Күҙ үләне име.** Күҙ үләнен яндыралар ҙа күҙ тейеп ауырыған кешене төтөнөндә тоталар. Күҙ үләне бик ныҡ күҙ тейгәндә килешә. Ул үлән таулы урындарҙа һәйбәт үҫә. "Беҙ күҙ үләнен бик күп йыябыҙ. Иремдең күҙенә сыбыртҡы тейеп һуҡырая яҙҙы, күҙ үләне менән им иттеләр әбейҙәр", - тип яҙҙырҙы Шөкөр ауылынан М.Фәрхеева.

**Таң һыуы менән им.** Сәскә күҙ тейһә, йылғанан иртәнге биттә барып һыу алғандар. Шуны өшкөртөп, йыуына торған булғандар. Таңдан барып алғас, был һыуҙы таң һыуы тип әйтәләр, һыуҙы алғанда:
*Ни алам,*
*Таң һыуы алам,*
*Таң төшкәнгә,*
*Күҙ тейгәнгә, -*
*тип алалар.*
*Ни алаң?*
*Ни алам, им алам,*
*Таң һыуы алам, таң төшкәнгә,*
*Күҙ тейгәнгә,*
- тип йыуыншалар. Тәнгә лә, сәскә лә файҙаһы була.

**Фирҙәүес ХИСАМИТДИНОВА.**
**(Дауамы бар).**

*ҺАБАҠТАР*

**Бер танышым менән һөйләшеү күңелгә тынғылыҡ бирмәй. Күптән осрашҡаныбыҙ юҡ ине. Ҡыҙҙарыбыҙ балалар баҡсаһын тамамлағандан алып тигәндәй күрешмәгәнбеҙҙер. Хәл-әхүәлләшеп, тротуар уртаһында байтаҡ торҙоҡ.**

# САФЛЫҠҠА...

## реклама кәрәк!



Ҡыҙы мәктәпкә барғас, бер-бер артлы ике ул табып, ирен ҡыуандырғанын, өлкәненең быйыл 15-е тулғанын, кинйәләренең 5-се класта уҡыуын белдем. Әле мәктәптән атай-әсәйҙәр йыйылышынан ҡайтып килеүе икән.

- Икеһенең дә уҡыуы яҡшы былай, тик бына ҙурының тәртибе борсолдора, - тине әсә. - Үҙенән өс йәшкә оло бер ҡыҙға мөкиббән булды ла ҡуйҙы. Атаһы менән минең әйткәнгә ҡолаҡ та һалмай... Танышымды, әлбиттә, ҡыҙҙың йәше йәки уның имен булмаған ғаиләнән булыуы ғына борсолдормай. Йәй буйы көнө-төнө бергә булған йәштәр. Ҡуна ҡалып, икәүҙән-икәү Нөгөш буйында ла йөрөгәндәр. Ҡыҙҙа аулаҡ булһа, улы уларҙа йоҡларға ҡала икән. Аптырағас, әсәһе ҡыҙ ауырға ҡалып йә улы берәй ауырыу йоҡтороп ҡуймаһын, тип, улының кеҫәһенә ҡап-ҡап презерватив һала башлаған. 15 йәшлек улы менән етди һөйләшеү урынына, шуның менән проблеманы еңел генә хәл иткән дә ҡуйған. Һәр хәлдә, шулай тип уйларға урын бар, сөнки әсә һаҡланыу сараһын тәҡдим итеп, яңы 15-ен тултырған улының енси тормош менән йәшәүенә ризалыҡ биргә булып сыға бит.

Билдәле булыуынса, бөгөн демография мәсьәләһе илдең мөһим иҡтимағи-сәйәси проблемаларының береһе. Халыҡ һаны кәмеүе статистика белгестәрен генә түгел, ә сәйәсмәндәрҙе лә борсоуға һалды. Тыуым артһын өсөн һәр төрлө законлар ҡабул ителә, программалар ғәмәлгә ашырыла. Икенсе һәм унан һуңғы балаларға Әсәлек капиталы, өс балалы ғаиләләргә бушлай ер участкаһы бирелеүе, пособиелар күләме артыуы шуға дәлил. Шулай булыуға ҡарамаҫтан демографик көрсөк дауам итә. Тимәк, проблема ғаиләләрҙең матди хәлендә генә түгел, тигәндә аңлата түгелме был? Әйе, бөгөн беҙ "енси революция", аҙғынлыҡ, әхлаҡһыҙлыҡ, әҙәпһеҙлек, боҙоҡлоҡ өҫтөнлөк иткән заманда көн итәбеҙ. Быңдай енси боҙоҡлоҡ ике ҡаршы енес араһында ғына түгел, ә бер енестәгеләр араһында ла ныҡлап урын алып бара: урамдарға сығып, ундайҙар үҙ хоҡуҡтарын яулай, ғаилә ҡора. Ғаилә ҡороуҙың рәсми һәм рәсми булмаған төрҙәре киң тарала бара. "Гражданлыҡ никахы" тип атала уның рәсми булмағаны. Башҡортса әйткәндә, "бергә торалар". Бына шул "бергә торған"дарҙың күбеһе байтаҡ йылдар ир менән ҡатын булып йәшәһәләр ҙә, бала табырға уйламай.

Яңыраҡ туҡталышта шундай һөйләшеүгә шаһит булғайным. Бер ханым икенсеһенән "Улың өйләнмәнеме әле?" тип һораны:

- Өсөнсө йыл берәү менән йәшәй, әммә өйләнәм тип һүҙ ҡуҙғатҡаны юҡ. Уҡып бөтәйем, бер аҙ аҡса эшләп алайым, ти. Шул ҡыҙына өйләнерме-юҡмы, белмәйем, сөнки тегеләй ҡараһаң да, былай ҡараһаң да, ул улыма тап килмәй, юғары белеме лә юҡ, ата-әсәләре лә осоноҫҡа ялғап, хәлһеҙ генә йәшәгән кешеләр. Әммә улым ҡайҙа, кем менән йөрөй икән, тип борсолмайым, ситтә булһа ла, уның тамағы туҡ, өҫтө-башы таҙа булыуына күңелем тыныс. Шулай ҙа ҡыҙы йөккә уҙып ҡуймаһын, һаҡланыу сараһы күрегеҙ, тип тылҡып ҡына торам инде,- тип яуап бирҙе.

Улының да, уның менән йәшәгән ҡыҙҙың да хистәренә төкөрөп ҡараған был ҡатынға әңгәмәсеһенең дә башҡа әйтер һүҙе булманы шикелле, автобус көтөп байтаҡ торорға тура килһә лә, башҡа һүҙ ҡатманы. Минең иһә был тәкәббер ҡатынға һөйкөлө улын теләмәгән бала тыуыуҙан йәки төрлө ауырыу йоҡтороуҙан һаҡлай алһа ла, уның башҡа әҙәмтәләре лә булыуы хаҡында аңлатҡым килгәйне лә, һөйләшеүгә ҡыҫылырға ҡыйманым. Үҙен һәм үҙенең балаһын ғына яратҡан минминле кеше барыбер аңламаҫ, тип уйлап, өндәшмәй ҡалыуҙы хуп күрҙем. Ә бит ҡайһы бер ғалимдар танырға теләмәһә лә, телегония фәнен инҡар итеп булмай. Был термин ниндәй ҙә булһа ырыу билдәләрен быуындан-быуынға тапшырыу тигәнде аңлата. Һәм ул үрҙә атап кителгән ике осраҡта ла йәштәрҙең киләсәгенә хәүеф менән янай. Ошо темаға ҡасандыр бер мәҡәлә уҡығайным. Бер ҡыҙ Африканан килгән егеткә ғашиҡ була, ҡара тәнле егет үҙенең мәңгелек артыһы тип уйлап, уның менән енси бәйләнешкә инә. Тик уларға тормош һынауҙарын бергә үтергә насип булмай, тиҙҙән һөйгәне ҡояшлы иленә ҡайтып китә. Ваҡыт үтә, ҡыҙ икенсе кешегә кейәүгә сыға, балалары тыуа. Ҡатындың йәшлек мөхәббәте тураһында сер улы үҫеп, өйләнеп алып, ейәне тыуғас ҡына сиселә. Килененең ҡулында ыҫмала һымаҡ ҡап-ҡара малайҙы күреп, артына йығылып китә яҙа ул: гонаһһыҙ сабый өләсәһенең бынан бик күп йылдар элек яратып йөрөгән африкан егетенә оҡшаған була! Ҡатынына ҡаты ҡағылыуын күреп, улына йәш саҡтағы мауығыуы тураһында асыҡтан-асыҡ һөйләп биреүҙән башҡа сараһы ҡалмай ҡатындың.

Балаға уҙыуҙан, енси ауырыу йоҡтороуҙан һаҡлаһа ла, бер ниндәй һаҡланыу сараһы ла ир менән ҡатынды генетик йәһәттән мәғлүмәт алмашыуҙан һаҡлай алмауына асыҡ миҫал был. Беренсе енси партнерҙың йоғонтоһо тыуасаҡ баланың тышҡы билдәһендә генә түгел, ә психикаһында, ҡанында ла сағылыуы мөмкин. Шуға күрә "енси революция" яҡлыларға был йәһәттән бик һаҡ булырға кәрәк.

Һуңғы осорҙа киң мәғлүмәт сараларында енси мөнәсәбәт йәки теләк кин рекламалана. Аяҡ кейемен, хушбуй, кофе рекламаларында, әгәр иғтибар итһәгеҙ, асыҡтан-асыҡ ярылып ята улар. Бына, тәненең бөтә ҡабарынҡы-күперенке урындарын күрһәткән киске күлдәк кейгән ҡыҙ хуш еҫ таратып үтеп киткәйне, уның матурлығына һоҡланып ҡарап торған егеттең төймәләре шартлап ысҡынып китте. Ҡапыл ғына нимә рекламалағандарын аңламайһың да, уның ҡарауы, нимәгә ишаралағандарына, ымлағандарына шунда уҡ иғтибар итәһең.

Йәй көнө ВИЧ-инфекцияһы таралыу буйынса үткән медицина советында баш ҡаланан килгән белгестәр енси ауырыуҙарҙан һаҡланыуҙың иң тоғро ысулы тип иҫәпләнгән презервативтың Рәсәйҙә бөтөнләй рекламаһы булмауы тураһында борсолоу белдергәйне. Минеңсә, уға реклама бөтөнләй кәрәкмәй, сөнки ул үҙе үк ситләтеп кенә ирекле мөхәббәткә, ирекле мөнәсәбәткә ымлай, күрһәтә. Әхлаҡлылыҡты, сафлыҡты, инсафлылыҡты рекламаларға кәрәк бөгөн! Шул ваҡытта ғына элекке һымаҡ ныҡлы ғаиләләр барлыҡҡа килер, уларҙа өсәр-бишәр бала тыуыр, илебеҙгә файҙалы кешеләр артыр, иҡтисад нығыр, яңынан ҡеүәтле дәүләткә әйләнербеҙ. Тарихта шундай факт билдәле: Бөйөк Ватан һуғышының иң ҡыҙған мәлендә СССР-ҙан Германияға ҡыуып алып кителгән ҡыҙҙарҙы тикшергән немец врачы Гитлерға шулай тип мөрәжәғәт итә: 16 йәштән 20 йәшкә тиклемге ҡыҙҙарҙың 90 проценты саф булған юғары әхлаҡлы халыҡты еңеүе мөмкин түгел! Һәм, белеүегеҙсә, врачтың юрағаны юш килде. Тик илебеҙ бөгөн енси революцияға ҡаршы тора алманы...

**Лена АБДРАХМАНОВА.**

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# "УРАЛ БАТЫР" ЭПОСЫ ҺӘМ...

## Боронғо Греция мифтары араһында ниндәй уртаҡлыҡ бар?



Әммә был Тәңрелектең башланыуы, ә Зәңгәр күк - ул Урал Тәңреһе һәм уға тиңләштерелеп илаһилаштырылған Уран. Әйткәндәй, боронғо грек мифтарында был исемгә аңлатма биргән бер генә һүҙ ҙә юҡ. Элладаның үҙенең иң ҡеүәтле Зевсы Боронғо Греция мифтарында күпкә һуңыраҡ - Урандың ейәне һәм Ваҡыт Тәңреһе, үҙенең бик күп балаларын йотоп торған (күп ваҡыт үткән) Кроностың (Хронос) улы булараҡ барлыҡҡа килә. Артабан, Зевстан башлап боронғо грек мифологияһы үҙаллы үҫә, әммә бында ла Урал мифтарының элементтары үрелеп бара. Әммә Вакха хөрмәтенә ойошторолған байрамды һүрәтләгән антик барельефта арыҫландар егелгән арба һүрәтләнгән (Һүрәт 1. Вакха хөрмәтенә ойошторолған байрам).

"Урал батыр" башҡорт эпосында ла арыҫландар транспорт сараһы булараҡ һүрәтләнә. "Урал батыр"ҙа бәйән ителгән бер генә эпизод та эпостың ысын булыуының оппоненттары яғынан тап Урал менән Шүлгәндең арыҫландарҙа һыбай йөрөүе өлөшөнә төшкән тиклем мыҫҡыллауға һәм көлөүгә дусар ителмәгәндер. Әммә эпос геройҙарының арыҫландарҙа йөрөүе Боронғо Греция мифтарына күскән һәм Элладала ул хатта, барельефтарҙа һүрәтләгәнсә, ниндәйҙер символик әһәмиәткә эйә.

Ә Боронғо Греция мифтарында һүрәтләнгән Элладаның боронғо геройы Тесей (Тезей) үҙ сәфәрендә Урал батырҙың ҡаһарманлығын ҡабатлай. Ҡыҫҡаса уларҙың йөкмәткеһенә туҡталып үтәйем. Тесей Афинаға килгәс, бөтөн Аттика тәрән һағышҡа сумған була. Гекала исемле бер ҡарт ҡатын уға Крит утрауынан ҡеүәтле Минос батшаһынан яһаҡ артынан илселәр килеүе тураһында һөйләй. Был яһаҡ ауыр була. Афина халҡы һәр туғыҙ йыл һайын Критҡа, лабиринт һарайҙа йәшәүсе ярым-үгеҙ, ярым-кеше һүрәтендәге Минотаврға ете егетте һәм ете ҡыҙҙы ҡорбан итеп ебәрергә тейеш була. Дөйөм һағышты күреп, Тесей ҡыҙҙар һәм егеттәр менән бергә Критҡа барырға, уларҙы азат итергә һәм был ҡот осҡос яһаҡты түләүҙе туҡтатырға, бының өсөн Минотавр менән алышырға, йә уны үлтерергә, йә үҙе үлергә ҡарар итә.

Ҡорбандар тейәлгән карап Критҡа килеп еткәс, Афина егеттәрен һәм ҡыҙҙарын Миносҡа килтерәләр. Криттың ҡеүәтле батшаһы шунда уҡ һөйкөмлө Тесейға иғтибар итә. Батша ҡыҙы Ариадна ла егетте күрә һәм тәү ҡараштан ғашиҡ була. Миностың ҡыҙы Тесейға ярҙам итергә була һәм атаһынан йәшереп кенә уға үткер ҡылыс, бер йомғаҡ еп бирә. Тесейҙы һәм башҡа ҡорбандарҙы лабиринтҡа индергәс, Тесей ептең бер осон ингән ерҙә бәйләй ҙә, лабиринттың икһеҙ-сикһеҙ юлдары буйлап китә, шул уҡ ваҡытта йомғаҡты һүтеп, кире сығыр юлға билдә лә ҡалдыра бара. Ул Минотаврҙы еңеп, барлыҡ Афина ҡыҙҙарын һәм егеттәрен ҡотҡара. Лабиринттан сыҡҡан ерҙә уларҙы Ариадна көтөп тора.

Былар барыһы ла, ләкин тағы ла сағыуыраҡ итеп, "Урал батыр" башҡорт эпосында Урал батырҙың Ҡатил батшалығында булған өлөшөндә бәйән ителә. Бары тик лабиринт ҡына юҡ, әммә ул, күрәһең, тәүсығанаҡта булғандыр. Ҡатил батшаның ҡыҙы Урал батыр үгеҙ менән алышыр алдынан уға "Ариадна йомғағы" урынына алма бирә. Моғайын да, алма, лабиринт буйынса тәгәрәп, геройҙы алып сығырға тейеш була.

Тесей Афина дәүләтенә нигеҙ һалыусы тип иҫәпләнә, ә Уран (Урал батыр) башҡорт халҡының боронғо ата-бабалары дәүләтенең "беренсе батшаһы" була.

Башҡорт эпосын ижад итеүселәрҙең боронғо грек мифтарын белмәүе асыҡ, һәм был мифтарҙың Уралға нисек "килеүе" тураһында ла бер ниндәй ҙә мәғлүмәт юҡ. Ә бына "Урал батыр" эпосының Эгей диңгеҙе ярҙарына күсеү мөмкинлеге тарихи сығанаҡтарҙа бар. Әммә был һуң бронза дәүерендә, Уралда алтын яҡлыҡтары табылғас ҡына тормошҡа аша. Был хаҡтағы хәбәр скифтар аша тиҙ арала Урта диңгеҙгә барып етә. Бынан тыш, әгәр боронғо рәссам тарафынан Шүлгәнташ мәмерйәһе стеналарында һүрәтләнгән боронғо Урал аттары хәҙерге ғәрәп нәҫелле аттар кеүек нәфис, матур, йылғыр, түҙемле булған икән, уларҙың, ат үрсетеүселәрҙең даны Уралдан бик алыҫҡа таралыуына аптырайһы түгел. Урал Урта диңгеҙ цивилизацияһы вәкилдәрен тап алтын һәм аттар менән йәлеп иткән дә инде.

"Алтын өйәнәге" алдынан Уралға разведкаға мажара эҙләүселәр ағыла. Беҙҙең эраның VII быуатына тиклем боронғо грек шағиры Аристей Уралға, үҙенең төньяҡ ҡәрҙәштәре арийҙарға килә. Ул, боронғо сауҙа юлын файҙаланып, скифтар менән дала буйлап Көньяҡ Урал аръяғына тиклем барып етә һәм төньяҡҡа сәфәрен дауам итә. Урал аръяғында урынлашҡан исседондар иленә барып етә. Исседондар араһында булыуына ҡарамаҫтан, Аристей тыуған иленә ҡайтҡас, исседондар менән күрше йәшәгән аримасптар тураһында "Аримаспар тураһында эпос" йәки "Аримаспея" тигән поэма яҙа. Аристейҙы аримаспар нимә менән ҡыҙыҡһындырҙы икән?

Поэманың атамаһына иғтибар итәйек. Үрҙә әйтеп китеүемсә, "аспа" арийҙар телендә (һуңынан фарсылар телендә) "ат" тигәнде аңлата. Ә һүҙ башындағы ар һәм унан барлыҡҡа килгән арий, арийҙар һүҙе нимәне аңлата, ниндәй халыҡ улар? Арий, арийҙар һүҙе борон Уралда барлыҡҡа килә. Ул ваҡытта бында башҡорт халҡының боронғо ата-бабаларының теле, һуңынан уғыр-төрки телдәр төркөмөн барлыҡҡа килтергән телдәргә ҡәрҙәш тел була. Һәр телдең төп һүҙе булып "кеше" һүҙе тора. Һуңынан "үҙ кеше", "сит кеше" һүҙбәйләнеше килә. "Кеше" һүҙе, ғәҙәттә, ир енесенә ҡарай - "минең ир", "сит ир". Башҡорт ҡатын-ҡыҙы өсөн "үҙ ир", "минең ирем" тигәнде аңлата. Ә борон "сит ир" тигәнде аңлатҡан һүҙ ҙә булған - "ар". Бөгөн ул бик һирәк һәм "тартынырға, оялырға кәрәкле кеше" мәғәнәһендә ҡулланыла. Әммә уның эҙе "ар яҡ" - ҡаршы, сит яр (сит кешеләр төйәкләгән яҡ) тигән һүҙбәйләнештә һаҡланып ҡалған. Үҙеңдең яғың, яҡын яҡ тураһында "бир яҡ" тиҙәр. "Ир" менән "бир" араһындағы "үҙеңдеке, яҡын" тигән мәғәнәне аңлатҡан бәйләнеш булыуы күренеп тора. Боронғо башҡорттарҙың ата-бабалары өсөн арийҙар-һинд-европалылар, ниндәйҙер кимәлдә абаш мәҙәниәтен йөрөтөүселәр сит "ар" була. Арийҙар тигән атама шунан килеп сыҡҡан да инде. Геродоттың яҙмаларында Урал алдында бронза һәм алтын дәүерҙәрендә йәшәүсе халыҡтар араһында ирктар, аргиппейҙар, аримаспар иҫкә алына. Башҡорттарҙың боронғо ата-бабалары өсөн тормош рәүеше һәм дини инаныуҙары буйынса Волга буйының урман халҡы ла сит була. Борондан алып бөгөнгә тиклем башҡорттар удмурттарҙы, уларҙың үҙ атамаһы "вотяк" булһа ла, арҙар тип йөрөтә.

**Радик ВАХИТОВ.**

**(Дауамы бар).**

(һүрәт 1).



БАШҠОРТ ҠАМУСЫ



Сергей РУДЕНКО

# БАШҠОРТТАР

## Һунарсылыҡ, ҡошсолоҡ һәм балыҡсылыҡ

Башҡортостанда кәзәләрҙе бик аҙ аҫырағандар. Ярлыларға улар һыйырҙы алмаштырған. Башҡорт кәзәләре тоҡомо рустарҙыҡынан бер нисек тә айырылмаған - бәләкәй, ҡара, аҡ һәм һоро төҫтә булған. Йөндәре, нигеҙҙә, иҙән балаҫы һәм буҫтау эшләүгә тотонолған; дебетенән шарфтар һәм шәлдәр бәйләгәндәр. Ите аҙыҡ булараҡ ҡулланылған, тиреһенән күн эшләнгән, бик һирәк кенә тире иләнгән.

Кәзәләрҙең енес, йәш һәм тыуыу ваҡыты буйынса бүленеше һарыҡтарҙыҡынан әллә ни айырылмаған. Ваҡытында, яҙғыһын тыуған кәзә бәрәсе ылаҡ (тәкә ылаҡ, орғасы ылаҡ) тип аталған. Йәйгеһен тыуғаны - йәйҙәүес ылаҡ (тәкә йәйҙәүес ылаҡ, орғасы йәйҙәүес ылаҡ); көҙөн тыуғандары - әтәмбәй ылаҡ (тәкә әтәмбәй ылаҡ, орғасы әтәмбәй ылаҡ). Имеүҙән туҡтап, икенсегә бәрәсләгәнгә тиклемге бәрәс бәрән кәзә, ә ошо осорҙағы тәкәһе бәрән тәкә тип аталған. Ике йәштән ҙурырағы - тәкә, кәзә тәкәһе, ә орғасы кәзә икенсегә бәрәсләгәндән алып өсөнсө бәрәсләгәнгә тиклем шешәк кәзә тип йөрөтөлгән. Бестерелгән тәкә - беселгән тәкә, ә өсөнсөгә бәрәсләгәндән һуң артабан орғасы кәзә тип кенә аталған. Беренсе йыл бәрәсләмәгән кәзә - тыуса, үрсем бирмәгәне - тыу кәзә, башҡа йылдарҙа бәрәсләп, ағымдағы йылда бәрәсләмәгәне ҡыҫыр тип аталған.

Йорт хайуаны булараҡ сусҡалар, күрәһең, башҡорттар исламды ҡабул иткәс юҡҡа сыҡҡан. Һәм башҡорттарҙың сусҡа тотоуы тураһында бер ниндәй ҙә тарихи документтар юҡ. Киреһенсә, башҡорттар хатта ерҙәрен ҡуртымға алыусыларға ла сусҡа тотоуҙы тыйыу тураһында күрһәтмәләр бар. Мәҫәлән, Ҡырғыҙ олоҫоноң Ҡаҙан даруғаһы башҡорттарының береһенең (1745 йыл) Ҡаракүл крәҫтиәндәренә үҙ ерен оброкка биреүе тураһындағы яҙмаларында "сусҡанан башҡа теләһә ниндәй мал йөрөтөргә" рөхсәт бирелгән.

Борон башҡорттар, ҡаҙаҡтар кеүек үк, шундай уҡ тоҡомло ике үркәсле дөйәләр ҙә аҫыраған. П. С. Паллас белдереүенсә, XVIII быуаттың икенсе яртыһында улар бигерәк тә Урал аръяғындағы Иҫәт провинцияһы башҡорттарында күп булған. В. М. Черемшанскийҙың һүҙҙәре буйынса, уҙған быуаттың урталарында Ағиҙел, Дим, Һаҡмар һәм Исәт йылғалары буйында урынлашҡан башҡорттарҙың дөйәләре булған, улар аттар кеүек үк йөк ташыуҙа файҙаланылған. Рәсми мәғлүмәттәр буйынса, 1850 йылда Ырымбур губернаһында 800 дөйә иҫәпләнгән. Уҙған быуаттың аҙағына башҡорттар араһында бик һирәктәр генә дөйә аҫыраған.

Башҡорттар дөйәләрҙе күрше ҡаҙаҡтарҙан һәм ҡалмыҡтарҙан һатып алған, үҙҙәре лә үрсетергә тырышҡан. Дөйә әрһеҙ хайуан булһа ла, Урал алдының һыуыҡтары улар өсөн бик ҡаты булған. Шуға күрә башҡорттар улар өсөн йылы ҡыуыштар ҡорған, аҫтарына һалам йәки сытыр түшәгән. Йәш дөйәләрҙе улар, ҡаҙаҡтар кеүек үк, ҡышҡылыҡҡа кейеҙ кейем кейендереп, инә орғасы дөйәләр менән бергә ҡыуыштарға япҡан.

Дөйәләрҙең итен һәм һөтөн башҡорттар аҙыҡ итеп ҡулланған, йөнөн һәм тиреһен төрлө ихтыяжға файҙаланған.

# ЯУАПЛЫЛЫҠ ТОЙҒОҺО...

## ауыл кешеләрендә көслөрәк

**Әҙеһәм Мостафа улы ХӘМЗИНды коллегалары "халыҡ уҡытыусыһы" тип йөрөтә. Ихлас күңелдән әйтәләр. Бындай юғары исемде улар бушҡа бирмәгәндәр. Ни өсөн тигәндә, ҡайҙа ғына, ниндәй вазифала эшләһә лә, (ул завуч та, директор ҙа, мәғариф бүлеге етәксеһе лә булды), Әҙеһәм Мостафа улы һөнәренә хыянат итмәне, юғары вазифалар артына йәшенмәне, Уҡытыусы булып ҡала белде. Әле лә, хаҡлы ялда булыуына ҡарамаҫтан, үҙе һайлаған эшмыһына, уҡытыусы һөнәренә тоғро ҡала. Әйҙәгеҙ, һүҙҙе үҙенә бирәйек, сөнки шәхес тураһында һөйләүгә ҡарағанда, уның тормошҡа ҡарашын белеү, уй-фекерҙәрен ишетеү күпкә мәртәбәлерәк бит.**

### Физикамы, математикамы?

Мәктәп йылдарында ла, институтта уҡыған саҡта ла математика фәне ҡыйынлығы буйынса ниңәлер яҡыныраҡ булды. Өсөнсө курсҡа күскәс, беҙҙе физика менән математика төркөмдәренә айыра башланылар. Яратҡан уҡытыусыбыҙ, профессор Державин Арсений Николаевич егеттәрҙе физика фәнен һайларға өгөтләне, ә математиканан уҡытҡан Мария Ильинична мине үҙ төркөмөнә саҡырҙы. Егеттәргә эйәреп, физика төркөмөнә күсһәм дә, математиканы ташламаным. Ятаҡ бүлмәһендәге өс егет физика төркөмөнә күстек, ә Рәфҡәт менән Алик математиктар ине. Физика буйынса семинарҙарҙа ҡатнашҡандан һуң, курс эштәрен башҡарғас, математиктарға ярҙам итешеп, улар менән математиканан да шөғөлләнеүемде дауам иттем, сөнки был предмет минең өсөн иң ҡыҙыҡлы фәндәрҙең береһе булыуҙан туктаманы. Ул, шахмат уйынындағы кеүек, логик яҡтан теүәл фекергә килергә, тормоштоң әҙмә-эҙлекле булыуын төшөнөргә ярҙам итә, ваҡиғаларҙың, факттарҙың бер-береһенә бәйле булыуын аңларға мөмкинлек бирә.

Беҙ уҡыған осорҙа ихтималлыҡ теорияһы (теория вероятности), Чебышевтың статистик математикаһы өйрәнелә башланы. Александров, Колмогоров, Королев Сергей Павлович кеүек фән әһелдәре беҙҙең өсөн ҙур абруй булды. Физиканан Эйнштейндың сағыштырмалыҡ теорияһы ҡыҙыҡһындыра торғайны. Арсений Николаевич Эйнштейн тураһында бер китап бүләк итте. Уны уҡып сыҡҡас, был үҙенсәлекле шәхес тураһында ҡыҙыҡһыныуым тағы ла арта төштө. Авиаһәләкәттән һуң үлеп терелгән Лев Ландау кеүек талантлы кешеләрҙең хеҙмәттәре менән танышыу ҙа физика менән математика өлкәһенән ситкә ебәрмәне. Математиканы ғына өйрәнһәм, физика ситтә ҡалған кеүек тойолдо һәм - киреһенсә. Бөгөнгө көнгә тиклем был ике фәндә берҙәй яҡын күрәм. Миненсә, физикаһыҙ математика юҡ, математикаһыҙ физиканың булыуы мөмкин түгел.

### Теге донъя - был донъя

Алтмышынсы йылдарҙа физиктар һәм лириктар тигән төшөнсә бик популяр булып китте. Миненсә, физика ла, лирика ла фантазияға ҡоролған. Мәҫәлән, физика фәне шул тиклем киң фән, ул үҙе генә бишалты йүнәлештән тора. Хыялланыу, күҙ алдына килтереү, үҙ маҡсаттарыңды, пландарыңды тормошҡа ашырыу, иң мөһиме, үҙ фекереңде әйтә белеү физикала бигерәк тә күберәк сағыла. Лев Ландау әйтмешләй: "Асышты яһауы еңел, ул асышты ябай тел менән кешеләргә аңлатыуы ауыр". Әҙәбиәттә иһә, образдарҙы поэтик тел менән аңлатыуы ла, миненсә, шуға бәрәбәр. Физика менән лириканы мин бер-береһенә йәнәшә килгән йүнәлештәр тип ҡабул итәм.

Бөгөн, мәҫәлән, нанотехнология тураһында күп һөйләйҙәр. Беренсенән, нанондың нимә икәнен белергә кәрәк. Нано "минус туғыҙ" тигәнде аңлата. Балаларға беҙ бөтә әйберҙәр ҙә молекулаларҙан тора, тип аңлатабыҙ. Молекулаларҙың эсенә үтеп инеү, молекулаларҙы төҙөү, теләгән молекулаларҙың формаһын эшләү, моделдәрен төҙөү нанотехнология өлкәһе була ла инде. Ул кешенең уйхыялын идеаль тормошҡа, хәҡиҡәткә, теүәллеккә саҡырған һымаҡ. Атом физикаһын, ядро физикаһын уҡып төшөнә башлаһаң, тормоштоң асылын, уның ҡайҙан барлыҡҡа килеүе тураһындағы белемдең иң һуңғы нөктәһенә барып бәреләһең.



Физиканы үҙләштергән кеше донъяның төҙөлөшөнә, донъяны барлыҡҡа килтергән Көскә ышана башлай. Ул көстө беҙ Аллаһы Тәғәлә тип атайбыҙмы, икенсе берәй Көс типме, уныһы шәхсән инаныуыбыҙҙан тора. Фән менән шөғөлләнгән кешене бер ҙә динһеҙ тип әйтеп булмай. Физика ла бит дингә ҡаршы бармай. Һәр элементар өлөшсәгә ҡаршы антиөлөшсә, электронға ҡаршы позитрон бар икән, тимәк, был донъяға икенсе ҡаршы донъя бар. Теге донъя, был донъя бар, тибеҙ икән, физика фәне артабанғы үҫешендә, миненсә, ике донъя араһындағы бәйләнеште тикшерергә, өйрәнергә тейеш. Философик яҡтан ҡарағанда ла, яман менән яҡшы, изгелек менән яуызлыҡ бар бит.

> ***Физиканы үҙләштергән кеше донъяның төҙөлөшөнә, донъяны барлыҡҡа килтергән Көскә ышана башлай. Ул көстө беҙ Аллаһы Тәғәлә тип атайбыҙмы, икенсе берәй Көс типме, уныһы шәхсән инаныуыбыҙҙан тора. Фән менән шөғөлләнгән кешене бер ҙә динһеҙ тип әйтеп булмай. Физика ла бит дингә ҡаршы бармай. Һәр элементар өлөшсәгә ҡаршы антиөлөшсә, электронға ҡаршы позитрон бар икән, тимәк, был донъяға икенсе ҡаршы донъя бар. Теге донъя, был донъя бар, тибеҙ икән, физика фәне артабанғы үҫешендә, миненсә, ике донъя араһындағы бәйләнеште тикшерергә, өйрәнергә тейеш. Философик яҡтан ҡарғанда ла, яман менән яҡшы, изгелек менән яуызлыҡ бар бит.***

### Дин һәм фән

Ньютон Ерҙең тартыу көсөн иҫбат иткәнгә тиклем дә ул көс булған бит. Миненсә, фән күренештәрҙең законға ярашлы булыуының бер өлөшөн генә үҙләштерә ала. Был фән өлөшөнә төшкән көмөш. Йәшәйеш өсөн шарт ҡасан барлыҡҡа килгән? Шул шарттарҙы кем барлыҡҡа килтергән? Был һораўҙарға бөтөн кешелек донъяһы һаман да яуап эҙләй. Бәлки шул шарт, шул Көс Хоҙайҙыр? Әле бер кем дә асылына тулыһынса төшөнгәне юҡ. Мосолман донъяһынан Әл Бируни, Насретдин Туси, Ғүмәр Хәйәм кеүектәр фән эшмәкәрҙәре булыуҙан алда, дини кешеләр булған, Ҡөрьәнде үҙләштергән. Улар, миненсә, матди тормошто рухи тормоштан айырып ҡарамаған. Мәҫәлән, Ғүмәр Хәйәмдең:

"Ышанамын үлгәндән һуң баш терәр ер табырыма,
Ышанамын теге донъя барлығына.
Менәр йылдар үткәс тә, мин ышанамын,
Өр-яңынан йәшел үлән булып ҡалҡырыма", - тип әйтеүе быға асыҡ миҫал.

Тик атеистик йәмғиәттә фән менән динде бергә бәйләү иң ауыр эштер ул. Студент саҡта ҡулыма "Четвертое состояние вещества" тигән бер йоҡа ғына китап килеп эләкте. Мәктәп йылдарында уҡ есемдәрҙең ҡаты, шыйыҡ, газ хәлендә булыуын анлағайным. Баҡтиһәң, уларҙың дүртенсе хәле бар икән. Ул - плазма хәле. Профессор Державин беҙгә, был хәлде борон-борондан белгәндәр, тип аңлатты. Тәүратта ла, Ҡөрьәндә лә был турала яҙылған икән. Донъяның һәр фиғеле дүрт өлөштән тора: ерҙән, һыуҙан, һауанан, уттан. Ерҙән, тигәне - ҡаты хәл, һыуҙан тигәне - шыйыҡ, һауанан тигәне - газ хәле, ә уттан тигәне - плазма. Быны бит менәр йыл алдан белгәндәр. Есемдең дүртенсе хәле беҙҙе, егеттәрҙе, бик ныҡ ҡыҙыҡһындырҙы. Алтмышынсы йылдарҙың башы физиканың бик ҡыҙыҡлы үҫешкән ваҡыты ине. 1964 йылда әрме хеҙмәте ваҡытында тәүге тапҡыр ике өҫтәл ҙурлығындағы видеомагнитофон күрҙем. Аҙаҡ Японияла етештерелгәнен алып килделәр, уныһы бер өҫтәлдәй ине. Бөгөнгө кәрәҙле телефондарҙың сығанағы шул осорҙа башланды. Матдәнең дүртенсе торошона төшөнөү, дини китаптарҙа менәр йыл алда яҙылғанды тормошҡа ашырыу быға булышлыҡ итте.

### Калькулятор ҡулдамы, баштамы?

Элек математикаға тәүге аҙым ҡабатлау таблицаһын ятлауҙан башлана торғайны. Дәрестәрҙә телдән һанау ҙа ҙур урын алып торҙо. Дөрөҫөн әйткәндә, етмешенсе йылдарҙың уртаһына тиклем мәктәптә арифметика уҡытылды. Ул осорҙа ыңғай һәм тиҫкәре һандар тураһында һүҙ ҙә булманы. Аҙаҡ арифметика менән алгебраны ҡушып, математика уҡытыла башланы. Шуға тиклем ҡара иҫәп менән хисаплау тормошҡа яҡыныраҡ ине. Мәҫәлән, мин әле һаман да төймәле контора счетыһында ҡуша-ала, ҡабатлай-бүлә беләм, телдән дә тиҙ иҫәпләйем. Ҡайһы берҙә магазиндағы һатыусы калькуляторында иҫәпләп сығарғансы мин хәтерҙән иҫәпләп тә ҡуям.

### Фән һәм ауыл

Әлбиттә, ғилми юлдан китергә мөмкинлектәр күп ине. Әммә ул ваҡытта атай-әсәй һүҙе беҙҙең өсөн закон булды бит, уларҙың һүҙенән сыға алманым. Икенсенән, ғилми хеҙмәткәрҙәрҙең йәшәү рәүешен ҡарап-белеп йөрөгәс, уларҙың ярлы хәлдә фатирһыҙ ыҙа сигеүҙәрен белгәс, телегем дә һүрелде. Аспирантура тамамлап, фән кандидаты булып та дөйөм ятаҡтарҙа ғаиләһе, балалары менән михнәт сиккәндәрҙең яҙмышын уртаҡлашҡым килмәне. Был йүнәлештә хәл бөгөн дә үҙгәрмәгән шикелле. Үҙемә тейешле ғүмеремдә ауылда, мәктәптә, балаларым, уҡыусыларым эргәһендә, саф һауала, иркенлектә, сираттарҙа тормай үткәреүҙе хуп күрҙем. Элек беҙ ҡалаларҙа йәшәүҙең күп өлөшө сираттарҙа тороп үтә ине. Фән үҙе ҡыҙыҡһындырһа ла, фәндә эшләгән кешеләрҙең тормошо ҡыҙыҡһындырманы. Әлбиттә, ауылда ла фән менән шөғөлләнеп булыр ине лә ул, ләкин шарттар юғыраҡ. Әле лә минең математиканан методика буйынса уңышлы ғына алымдарым бар.

### Кисә һәм бөгөн

Хәҙер мин йыш ҡына элекке уҡыусылар менән бөгөнгө уҡыусыларҙы сағыштырып ҡарайым. Элекке уҡыусылар үҙҙәре эҙләнеп, тормошта үҙаллы эҙләнеү юлы менән бара торғайнылар, сөнки ул ваҡытта, кеше булам, тиһән, уҡымайынса мөмкин түгеллеген яҡшыраҡ аңлайҙар ине. Бөгөнгө тормошта еңел йәшәү мөмкинлеге шул тиклем киңәйҙе. Етмәһә, бөгөн балаларҙы үтә ныҡ ҡурсалайбыҙ. Изге күренгән ниәттәр менән балаларға ҡаршылыҡтар тыуҙырабыҙ. Уҡытыу системаһы ла ҡырҡа үҙгәрҙе. Беренсенән, һәләтле балаларҙы күрмәйбеҙ, булғанын үҫтермәйбеҙ.

Математикаға килгәндә, элек ҡабатлау таблицаһын белмәгән бала дәрестә үҙен уҡыусы итеп тоймай ине, бөгөн калькулятор барҙа, бала башын ҡатырып тормай, әҙергә - бәҙер өйрәнде. Миненсә, СССР осорондағы мәғариф системаһы донъялағы иң көслө, фекерле, уңышлы си-

стема ине. 1961 йылда Гагарин космосҡа осҡас, Америка президенты Джон Кеннеди, Советтар Союзы беҙҙе мәктәп партаһы артында еңде, беҙҙе артта ҡалдырҙы, тине. Был һүҙҙәрҙә ҙур мәғәнә бар. Тимәк, беҙҙең система иң һыналған, иң һөҙөмтәле система булған. Ни эшләптер, беҙ яйлап-яйлап шул системанан ситкә тайпыла башланыҡ, Европа стандарттарын хуп күрҙек. Иң башта белем кимәлен тестлау килеп инде. Уйланмаған, баш ватмаған баланан яуап алырға тырышыу был. Артыҡ көсәнмәй генә "эйе-юк", тип әйтеү тәкдим ителгән яуаптар араһынан сиған һимаҡ күрәҙә ҡылыуға бәрәбәр. Бөгөнгә көндә Америка судтарында тестлау буйынса йөҙәр меңләгән материал тикшереү көтөп ята. Бәҡтиһәң, унда күптәр тест һорауларының яуаптары менән риза түгел икән.

БДИ буйынса апелляция комиссияһының бер эшенә барырға тура килде. Әммә мине, белгес булараҡ, комиссияға индермәнеләр, сөнки БДИ положениеһы буйынса уҡыусының иң яҡын кешеһен генә индерәләр икән. Ә иң яҡын кешеһе тип ата-әсәһе, яҡын туғандары ғына һанала. Әммә ул кешеләрҙең бөтәһе лә математик түгел бит. Шуға күрә, комиссияға юҡты бар итеп иҫбатлау бер тин шайы тормай. Баланың дөрөҫләгән фәндә яҡшы белгән кеше яҡларға тейеш тә баһа. Мәҫәлән, баланың уҡытыусыһы йә репетиторы яҡлашһа, дөрөҫөрәк булыр ине. Шуһыҙ, уҡыусы үҙенең дөрөҫләгән нисек иҫбат итергә тейеш улай булғас? Бер үк һан, бер үк яуап, мәҫәлән, иррациональ һан менән яҙған ваҡытта бер төрлө сыға, рациональ һан менән эшләгәндә икенсе төрлө килеп сыға. Комиссия өсөн был мөһим түгел, тестың яуабы нисек күрһәтелгән, уҡыусының яуабы мотлаҡ шуға тап килергә тейеш.

Әммә мин БДИ-ға тулыһынса ҡаршылар рәтендә түгелмен. Ни өсөн тигәндә, ул бигерәк тә ауыл балалары өсөн кәрәк. Был яңылыҡ төпкөлдән сыҡҡандарға туранан-тура үҙе теләгән юғары уҡыу йортона уҡырға инергә мөмкинлек бирә. Шуға күрә юғары белем алырға хыялланғандар ғына үҙ теләге буйынса шөғөлләнергә тейеш, бөтәһе өсөн дә БДИ-ның мотлаҡ кәрәге юҡ. Уҡыусы ирекле булһын, үҙе һайлаһын. Үҙенә имтиханға әҙерләй алғандай уҡытыусы тапһын. Бына әле балалар һанына ҡарап финанслау башланасаҡ. Ә бит оло өйгә ни кәрәк, бәләкәй өйгә лә шул кәрәк. Ун балаға ла уҡытыусы кәрәк, бер балаға ла уҡытыусы кәрәк. Был аҙ һанлы мәктәптәрҙе, бәләкәй ауылдарҙы юҡҡа сығарыу сәйәсәте. Һөҙөмтәһен күрә башланыҡ та инде. Мәктәптәр ябыла. Ә мәктәп бөтһә, ауыл да бөтә бит. Мәғариф өсөн үҙәкләштерелгән системаның ыңғай һөҙөмтә бирмәйәсәге көн кеүек асыҡ. Был үҙ нәүбәтендә ижади үҫешкә тоткарлыҡ яһаясаҡ.

### Математика һәм тормош

Спортсылар физик хәлен нисек формала тота, математиктар ҙа үҙ шөғөлөн ташламаҫҡа тейеш. Заман үҙгәрә, тормош бер урында тормай, математика фәне лә үҫешә. Ғүмер буйы мәктәп программаһындағы Пифагор теоремаһы менән генә сикләнеп булмай, уны ла бит тормошта дөрөҫ ҡуллана белергә кәрәк. Мәҫәлән, өй төҙөр өсөн нигеҙ һалғанда кәрәк ул. Пифагор темаһын дөрөҫ ҡуллана белһәң, ҡулыңда бер прибор булмайынса ла уны эшләп була. Процентты иҫәпләүҙе алайыҡ. Элек беҙ уны табыр өсөн һанды йөҙгә бүлеп, процентына ҡабатлай торғайныҡ. Ә бөгөн уны бер гәмәл менән генә эшләп була. Мәҫәлән, ҡырҡ процент - ул 0,4. Һанды 0,4 ҡабатлаһаң, процентын бер гәмәлдә таптың, тигән һүҙ. Йә булмаһа, берәй һанды тиҙ генә бишкә ҡабатлар өсөн ул һанды унға ҡабатлайһың да, икегә бүләһең. Ҡайһы бер уҡытыусылар формуланы теоретик яҡтан ғына өйрәтә, ятлата, әммә тормоштағы ҡулланылышын белмәй, шуға күрә баланы үҙ белемен дөрөҫ ҡулланырға өйрәтмәй. Тормошта ҡуллана белһәң генә кәрәк ул математика. Ауыл балаларын математикаға ылыҡтырыу бөгөн бигерәк тә файҙалы. Коммерция ныҡ үҫешкән заманда процент ставкалары, кредитор банктар менән эш итә белмәһәң, тормоштан артта ҡалыуың бар.

### Һоҡланыу һәм һоҡландыра белеү

Уҡытыусы булараҡ, һәр кемдең уй-фекерен, хыялдарын аңларға тырышырға һәм бер ваҡытта ла ярҙам итеүҙән баш тартмаҫҡа кәрәк. Үҙ ғүмеремдә кеше үтенесен изге ниәт менән үтәргә тырышам. Ҡай саҡ үҙем бурысҡа батып булһа ла ярҙам ҡулы һуҙам. Кеше бит иң ҡыйын саҡта, үҙ мөмкинлектәре булмағанда ғына мөрәжәғәт итә. Кешеләр тураһында бер ваҡытта ла насар фекерҙә була алмайым. Башҡалар, " ана ул шулай, ана ул былай", тиһәләр ҙә үҙ фекеремдә ҡалам. Ғаиләмдә лә шулай: балаларымды ошо өлгөлә тәрбиәләйем. Кеше тураһында насар фекерҙә булмағыҙ, үҙеңдән башҡаны әүлиә тип бел, тип бушҡа әйтелмәгән, тип йыш ҡабатлайым. Әммә был ғына аҙ: матур итеп йәшәйем тиһәң, хеҙмәтте яратырға кәрәк. Мәҫәлән, физик эшһеҙ ҙә, аҡыл эшенән дә бер ваҡытта ла буш тора алмайым. Бушҡа үткән ваҡыт булырға тейеш түгелдер, тип һанайым. Иң мөһиме - һәр эште башҡалар һоҡланғандай итеп эшләргә кәрәк.

### Мин - ауыл кешеһе

Мөмкинлектәр булһа ла, ҡала кешеһе була алманым. Булырға теләмәнем дә. Мин -ауыл кешеһе. Хыялым - тәбиғәткә яҡыныраҡ булыу, ауыл кешеләре менән аралашып йәшәү. Ҡалала бит бер-беренде белмәйһең, күп ваҡытың йәмәғәт транспортында үтә. Шул ваҡытты ауыл ерендә файҙалы ҡулланырға була. Ауылда яуаплылыҡ тойғоһо көслөрәк. Һин бөтәһен дә беләһең, һине лә беләләр, мөғәмәлә бөтөнләй башҡаса ҡоролған. Ҡала кешеһе - башҡаларға артыҡ кәрәге булмаған берәмек.

ШУЛАЙ ИТЕП...

**Яҙмышты өс төрлө юл менән үҙгәртеп була, тиҙәр. Ул да булһа, аҡылға таянып, хискә бирелеп һәм дә холоҡ-фигеленә ярашлы ҡылған ҡылыҡтарың, башҡарған эштәрең менән. Әллә өс мөмкинлекте лә бергә ҡулланып була микән?**

**Радик ӨМӨТҠУЖИН яҙып алды.**

ХӘТЕРКИТАП

# БЕҘҘЕ ЛӘ БЕЙЕРГӘ...

## Фәйзи Ғәскәров өйрәтте



**Фәйзи Ғәскәров һымаҡ кеше йөҙ йылға бер тыуамы, тыумаймы - быны әйтеүе ҡыйын. Әммә әле мин башҡорт бейеү сәнғәтен үҫтереүгә уның кеүек тотонған кешене белмәйем. Әле бына "Байыҡ" телевизион конкурсында ҡатнашыр өсөн Өфөгә килгәс, ирекһеҙҙән, остазыбыҙ тураһында ҡайһы бер иҫтәлектәрҙе хәтергә төшөрҙөм.**

Беҙҙең ауылға 1964 йылда килде Фәйзи Әҙһәм улы. Ауыл егеттәрен йыйып алып, уларҙы бейергә өйрәтә башланы. Мин, ҡыҙыҡһынып, репетицияны күҙәтәм. Фәйзи Әҙһәм улы мине шайләп алды ла, клубтан ҡыуа. Ҡамасаулағанмындыр инде. Ситтән күҙәтеүселәр ижад итергә һәр ваҡыт ҡамасаулай бит инде ул. Ул саҡта асыуым килһә лә, өлкән кешеләргә ҡарата ихтирам көслө булғас, ҡаршылашып торманым, күп һүҙгә етмәҫ элек сығып киттем. Икенсе көндө мине партком секретары, совхоз директоры саҡыртып алды. "Бар бейергә", тиҙәр. Бәҡтиһәң, Ф. Ғәскәров минең турала ауыл егеттәренән һораштырып алған икән. Мине "Ауыл йәштәренең атаманы", тигәстәр, бейетеп ҡарарға булғандыр инде. Барҙым. Саңғы, хоккей, бокс менән мауыға инем уға тиклем. Бейей башлағайным, башкөллө ғашиҡ булдым да ҡуйҙым был сәнғәт төрөнә, хәҙер ҙә ташлап булмай.

Бөгөнгә йәштәрҙе бейеүгә ылыҡтырыуы бик ауыр. Уларҙа илһөйәрлек тиәйемме, рухмы, ҡыҫҡаһы, тойғоларҙы, көстө сығарыу тигәндәре самалыраҡ. Бейегәс, уны ысын мәғәнәһендә шартлатып бейергә, образға инеп, икенсе сүрәттә балҡып белергә кәрәк. Бөгөнгә ансамблдәр сығышында ла хәрәкәт бар, ә тойғо юҡ. Ә беҙҙе уҡытыусыбыҙ Фәйзи ағай тойғоларҙы, хисте түгеп, ярһыуҙарға юл ҡуйып бейергә өйрәтә торғайны.

Ағай менән булған бик күп ҡыҙыҡтар хәтерҙә ҡалған. 60-сы йылдарҙа ул беҙгә "Беҙҙең байрам" бейеүен һалды. Бейеүҙә еңеүсе егет образы бар. Финалда был егет уртаға сығып, сыбыртҡы шартлатырға тейеш. Миңә әлкте еңеүсе егет роле. Бер мәл репетиция барғанда ун ике пар бейеүсе йәштәр алдына сығып баҫҡанмын да, сыбыртҡы шартлатам. Уҡытыусыбыҙ ҡарап тора. "Юҡ, улай ярамай!" тип, минең был хәрәкәткә ҡәнәғәтһеҙлек белдерә. Байтаҡ ваҡыт үтеп китте - ҡабат-ҡабат сыбыртҡы шартлаттыра ағайыбыҙ. Йән көйө башланы. Бер саҡ бар көсөмдән, йән асыуы менән һелтәнеп ебәрҙем - сыбыртҡының осо өҙөлөп китеп, ағайыбыҙҙың битенә осоп барып тейгән. Ярай әле, күҙлек кейгән булған, юғиһә, күҙенә зарар килер ине. Шул мәл мине, язалауһыһын, бик ҡаты итеп әрләй-әрләй сығып китте Фәйзи ағай. Биш-алты минут та үтмәне, бик етди, талапсан, сәнғәтте, спортты яратҡан ул ваҡыттағы совхоз директорыбыҙ Әҙһәм Ғәни улы Шәрәфетдинов саҡыртып алды: "Нимә эшләттең ҡартты?" - тип, минә ҡаҙала. Аңлатып бирҙем. "Бар, ғәфү үтен! Кире килһен, эшләһен", - ти. Ҡунаҡхана бүлмәһенә инеп, ишек шаҡыйым. "Фәйзи ағай, мөмкинме?" - тим. "Килденме, бандит!" - ти ҡарт. "Һеҙ мине ғәфү итегеҙ, мин бит юрамал эшләмәнем", - тим. Ағай минә бер талай текләберәк ҡарап торҙо ла: "Хәҙер аңланыңмы инде: минә һинең сыбыртҡы шартлатыуың кәрәкмәй, беләм мин һине - һин себендә лә үлтерә һуға алаһың. Минә һинең шул бандитский морданң кәрәк. Еңеүсе образында бейергә сыҡҡанда, халыҡ "Был бит ысын еңеүсе!" тип ах итерлек булһын!" - тине...

Тағы бер ваҡиға иҫкә төштө. Бер йылды көҙөн беҙҙең ауылға Фәйзи Әҙһәм улы тағы килде. Бөтә Союз телевизион фестивалендә ҡатнашырға әҙерләнәбеҙ. Ҡараһам, остазыбыҙ тәҙрә янына баҫҡан да, уйланып, тышҡа ҡарап тора. Нимәнелер күҙәткәндәй, ни тураһындалыр уйланғандай тойола. "Ҡарттың башында яңы бейеү тыуа шикелле", - тигән һығымтаға килдем. Шул саҡ ағай миңә әйләнеп ҡараны ла: "Миҙәхәт, кил әле, кил тиҙерәк!" - ти. "Фәйзи Әҙһәм улы, әллә ауырып киттегеҙме?" - тип, йәһәт кенә янына килә һалдым. "Юҡ, һин урамға ҡара әле, анау ҡаҙҙарҙы күрәһеңме?" - ти ағай. Ҡараһам, Яйыҡ буйынан ҡырҡлаған ап-аҡ ҡаҙ ҡайтып килә. Иллә мәгәр, тышта бер ниндәй ҙә күҙгә элерлек башҡа нәмә күренмәй. Барыһы ла ябай, ауылса: өйҙәр ултыра, ҡаҙҙар һыу буйынан ҡайтып килә. "Ана бит, һалдаттар һымаҡ теҙелешеп ҡайтып киләләр!" - ти Фәйзи Әҙһәм улы. Шулай итеп, Фәйзи Ғәскәров шул ерҙә яңы бейеүгә - "Әсәләр көтәләр улдарын" бейеүенә нигеҙ һалды булып сыҡты...

Бына шундай ижадсы ине Фәйзи ағай Ғәскәров. Мине ул Өфөләге бейеү ансамбленә әллә нисә тапҡыр саҡырҙы, әммә минең күңел тартманы - ауылымдағы "Ләйсән" бейеү ансамблемә тоғро ҡалдым. Ул ансамбль дә Фәйзи ағайҙың ижад емеше бит һәм беҙ уның рухын һаҡларға тырышабыҙ.

**Миҙәхәт АЛСЫНБАЕВ,**
**Учалы районы Уральск ауылының "Ләйсән" бейеү ансамбле етәксеһе.**

✓ *Һуңғы ваҡытта килешеүе мөмкин булмаған кире күренеш - ул Фәйзи Ғәскәров кеүек, халыҡ бейеүҙәрен төбөнә төшөп аңлаған бейеү ҡуйыусы белгестәр юҡлығы. Бейеү сәнғәте бер урында тапана һымаҡ тойолоп китә ҡайһы саҡта.*

ЗАУЫҠ

# МИН ВӘЛИДИ УРАМЫНАН КИЛӘМ,

## Урам тулып кеше ағыла...

### ӨС ҺОРАУ



**Ирек ағай, халҡыбыҙ шағиры Рәми Ғарипов шиғриәтте нанға ла, намға ла, данға ла, ҡанға ла тиңләй. Бына һеҙҙең өсөн шиғриәт нимә ул? Башҡа жанрға тотоноп ҡарағанығыҙ булманымы?**

- Шиғриәт минең өсөн йәшәү мәғәнәһе, һыу, һауа, икмәк. Шиғриәт минең өсөн хобби түгел. Шиғыр яҙа башлағанымда шағир булам, кеше әйтмәгән фекерҙе әйтәм, яңы йондоҙ асам, тигән маҡсаттарым булманы. Тоғролоҡ сифатының нимә икәнен Ҡара диңгеҙ флотында хеҙмәт иткәндә аңланым, сөнки һүҙгә, антҡа, ергә, дуҫтарға тоғролоҡ һаҡлауым аҙаҡ мине ижадта тик бер жанрға - шиғриәткә тоғро ҡалырға өйрәтте. Төрлө жанрҙарҙа ижад итеүселәр беҙҙең әҙәбиәттә лә, донъя әҙәбиәтендә лә бик күптәр. Уларҙың араһында шиғыр яҙа алмайынса, прозаға, драмаға, бик тә бик булмаһа, тәнҡиткә тотоноусыларҙы ла беләм. Тамсының бер урынға тамғанда ғына ташты тишкәнен белгәнгә күрә лә, мин шиғриәткә тоғро ҡалдым.

**Һәр кемдең үҙ ғүмерендә ҡыуанып иҫкә алырлыҡ, юҡһынып иларлыҡ, һағынып һарғайырлыҡ миҙгелдәре, иҫтәлекле ваҡиғалары була. Ундай миҙгелдәрегеҙ, ваҡиғаларығыҙ бармы?**

- Ундай миҙгелдәр һәм ваҡиғалар тормошомдоң һәр осоронда ла бар. Шуға күрә лә мин уларҙың араһынан береһен генә айырып әйтә алмайым. Тотош ғүмер үҙе бер оло даръя бит ул. Шуға күрә һуңғы китабымды ла "Ғүмер китабы" тип атаным. Унда бөтә ғүмерем буйы яҙған шиғырҙарым һайлап тупланған. Унда барлыҡ тормошомдоң юҡһынып иларлыҡ, һағынып һарғайырлыҡ, ҡыуанып иҫкә алырлыҡ мәлдәре ниндәйҙер кимәлдә яҡтыртылған.

**Яңыраҡ Рәми Ғариповтың шиғырҙарын һөйләү буйынса Өфө, республика, Рәсәй, донъя кимәлендә флеш-моб булды. Дөрөҫөн әйткәндә, үткән быуаттың 90-сы йылдарынан башлап милләтебеҙ Рәми ағайҙың шиғырҙарын ятлап, үҙ йөрәге аша үткәреп, уның рухы менән күтәрелеп сыҡты. Ни өсөн хәҙерге ваҡытта шағир, шиғриәт Рәми Ғарипов өлгөһөндә милләтебеҙҙең алғы сафында була алмай, тип уйлайһығыҙ?**

- Донъяға киң билдәле Америка яҙыусыһы Эрнест Хемингуэй "Буласаҡ яҙыусы өсөн иң һәйбәт мәктәп - уның бәхетһеҙ бала сағы" тип әйткән. Рәми ағайҙың һәм беҙҙең быуынға ана шул бәхетһеҙ баласаҡ тура килде. Халыҡтың хәҡиҡәткә күҙе асылып, замандың ҡаршылыҡлы ваҡытына тура килеүе Рәми ағайҙың рухын ныҡ сыныҡтырҙы һәм уның үҙ һүҙен әйтергә тейешлеген аңлап ижад итеүе милләт алдына сығарҙы. Әлбиттә, башҡалар ҙа был хаҡта уйлай ине, әммә әйтергә баҙнат итмәне. Рәми ағай халыҡ уйлағанды тура ярып әйтеүе менән халыҡтың йөрәгенә инде. Нимә генә тимә, ҡаршылыҡҡа дусар булыу ижад кешеһен уята, сәмләндерә, асыуландыра. Шундай экстремаль хәлдәр һәр ижад кешеһен уята торған шарт булып тора. Рәмиҙе тыйыуҙар уятты, ҡаршылыҡтар ысын ижадсы итеп үҫтерҙе.

90-сы йылдарға килгәндә, ул саҡта барлыҡ тыйыу быуалары йырылып, кеше алдында торған ҡаршылыҡтарҙы алып ташланы. Барлыҡ төйөндәр сиселде, серҙәр асылды, барыһы ла теленә нимә килә, шуны һөйләне, кемде теләһә, шуны әрләне һәм бер аҙҙан быларҙың да ҡыҙығы ҡалманы. Шуға күрә ижад кешеләре халҡы алдына сығып, уны үҙенең артынан әйҙәп эйәртеп китә алманы. Әйтәйек, ситлектә торған филде тышҡа сығарһаң, ул аҙ ғына тышта йөрөй ҙә, кире ситлегенә инеп тора. Шунда уға ситлек эсендә ашарға-эсергә бирәләр. Һәр хәлдә, һәйбәт тормошта шәп шағирҙар тыуғанлығы хаҡында мин ишеткәнем юҡ әле.

### Хыял хаҡы

Яҡшы нәмә тик хыялдан тыуған
Барыһы ла уйҙан тыуғандар.
Әлмисаҡтан алып бөгөнгәсә
Тик хыяллы юлды ҡыуғандар.

Ниҙәр һабыштырмай, ниҙәр килмәй
Шағир башы, шағир уйына,
Ғәмәлгә лә ашмаҫ хыял менән
Башын вата ғүмер буйына.

Кешелекте яуҙан ҡотҡарырға,
Үҙе әҙер ауға ҡабырға;
Ә кешегә быға тиклем юҡты,
Барлыҡ теләгәнен табырға.

Был уйҙарҙы шағир ғына уйлай,
Аҡыллыһы, иң-иң йүләре;
Күҙ алдына килмәй - хыял хаҡын
Ғәзиз башы менән түләре.

### Вәлиди урамынан

Мин Вәлиди урамынан киләм,
Күп меңдәрҙең булып береһе;
Гүйә, һинең яҡын туғаныңмын,
Мең-мең ейәнеңдең тереһе.

Халҡың тере, халҡың иҫән, тиеп,
Илең, тиеп, донъя һанлаған;
Бөгөн беҙҙең менән иҫәпләшә
Барлыҡ белгән, барлыҡ аңлаған.

Һинең йәш сағыңда теләһәләр:
Беҙҙең өсөн донъя тарлыҡты.
Бөгөн ғаләм белеп, күреп тора
Ер шарында беҙҙең барлыҡты.
Элек уйҙа, бары башта ине,
Тик йөрәктә ине исемең:
Янар тауҙар һымаҡ яныуҙары
Халыҡ йәне, халыҡ хисенең.

Ҡояш нуры һымаҡ хаҡ хәҡиҡәт
Күпме ятты сыҙап, быуылып;
Халыҡ өмөтөндә һис өҙөлмәй,
Халыҡ йәштәрендә йыуылып.

Һин көткәнде бөгөн халҡың күрә,
Илең күрә хәләл шатлығын.
Инде илдәр күрә, донъя күрә
Һинең хыялдарҙың хаҡлығын.

Был урамдан тура мәңгелеккә
Тауға менһә һәйкәл - Салауат,
Үрләй йәштәр белем үрҙәренә,
Шул урамдан шулай самалап.

Улар бөгөн - һинең вариҫтарың,
Ашығыусы ошо урамдан.
Һин уйлаған юлдан барыусылар,
Киләсәк, тип бары - ҙур анда.

Баш ҡаламдың башҡа урамы юҡ,
Һәр килеүсе шулай тартылған.
Ошо көндө күрер өсөн халҡым
Күпме ҡайғы-хәсрәт артылған.

Йәшәү өсөн барыбыҙға кәрәк
Вәлидиҙең зирәк аҡылы.
Хаҡлыҡ һаман өҫкә сыға бара
Һәр саҡ ҡаршылыҡтар арҡылы.

Мин Вәлиди урамынан киләм,
Урам тулып кеше ағыла.
Белә улар ҡайҙан барғанлығын,
Ҡайҙа барасағын тағы ла.

### Тағын да

Күпте күргән башҡорт ере
Күрмәҫ, тимә, тағын да.
Күп ҡазалар урап йөрөй,
Онотма мул табында.

Күп күрҙе ер күк аҫтында
Ҡараһын да, ағын да.
Ауыҙ асып ҡарап торһаҡ,
Ҡабатланыр тағын да.

Күпме батыр, бахыр күргән,
Тыумай, тимә, тағын да.
Салауаттар, Мортазиндар
Йәшәй башҡорт ҡанында.

Ер туйҙыра, гел туйҙыра,
Туйҙырыр ул тағын да.
Аслыҡ ҡырған йылдарҙы ла
Онотма туҡ сағыңда.

Ер һатылған, алынған да,
Ҡабатлана тағын да.
Күтәрә ер беҙ ҡылғандың
Бысрағын да, пағын да.

Ерһеҙ ҡалыу - илһеҙ, телһеҙ
Тороп ҡалыу алдында.
Иң аҡтыҡҡы өмөт һүнһә,
Нимә ҡала тағын да.

Ташҡа ҡарғыш яҙыу түгел,
Беҙ яңы йыр яғында.
Бабичтарҙы, Рәмиҙәрҙе
Тыумаҫ тимә тағын да.

Бер күргәнде инде ҡабат
Күрмәһен ер тағын да.
Баш осонда, керпек ҡаҡмай,
Ныҡ торайыҡ һағында.
Нишләргә һуң тағын да?

*Ирек КИНЙӘБУЛАТОВ*

ЗЫЯЛЫЛАР МАЙҘАНЫ

**Һәр заманда ил-йортҡа ауырлыҡ ишелгәндә йә ниндәйҙер ҡатмарлы мәсьәләләрҙе хәл итергә кәрәк булғанда майҙанға зыялылар сыҡҡан. Уларҙың аҡылы, ялҡынлы телмәре яуға күтәргән, урынһыҙ сәбәләнеүҙәрҙән төңөлдөргән, ярһыуҙарҙы баҫҡан йә тоҡандырған. Бөгөнгө еңел булмаған осорҙа замандаш зыялыларҙың үҙ халҡына әйтер һүҙе ниндәй булыр?**



# БЕЙЕҮ СӘНҒӘТЕ ЛӘ...

## ярҙамға мохтаж

**Ратмир БӘҘРЕТДИНОВ, Башҡортостандың халыҡ артисы:** Мин әле туҡһанды ҡыуам. Балалар араһында үткәрелгән "Байыҡ"та сәхнәне дер һелкетеп, йөрәктәре елпелдәп, тамашасының күҙҙәренә йәш алдырып бейеп киткән йәш бейеүселәргә ҡарайым да, минең дә сәхнәгә һикереп менеп, ошо балаларға ҡушылып, бейеп киткем килә, тик аяҡтар ғына "рөхсәт итмәй". Заманында Европа, Африка илдәрен башҡорт бейеүе менән таныштырып йөрөгән йәш саҡтар иҫкә төшә...

Ә бөгөнгө зыялылар майҙанында тотҡан һүҙем башҡорт бейеүен һаҡлап ҡалыу тураһында. Һүҙ ҙә юҡ, бөгөн Башҡортостан юлдаш телевидениеһының "Байыҡ" проекты был изге эшкә ғәйәт ҙур өлөш индерә. Ундағы сығыштар ҡыуандыра ла, ҡайһы бер проблемаларҙы асырға ла ярҙам итә. Мәҫәлән, һуңғы ваҡытта килешеүе мөмкин булмаған кире күренеш - ул Фәйзи Ғәскәров кеүек, халыҡ бейеүҙәрен төбөнә төшөп аңлаған бейеү ҡуйыусы белгестәр юҡлығы. Унан-бынан йолҡоп ҡына бейеү сәхнәләштереүселәр башҡорт бейеү сәнғәтенең бәҫен һаҡлай алмай. Ҡайҙа икән һуң беҙҙең бейеү сәнғәте буйынса һөнәр алған йәш белгестәребеҙ? Бейеү сәнғәте бер урында тапана һымаҡ тойолоп китә ҡайһы саҡта. Ә сәнғәт бер урында тапанһа, әрем баҡсаһына әйләнә.

Бейеүселәр күсәгилешлеге тураһында һүҙ алып барғанда, әлбиттә, бихисап ыңғай күренештәрҙе лә билдәләргә кәрәк. Оло быуын сәхнәнән төшөүе була, уның урынын йәш, көслө бейеүселәр биләй. "Был күтәрмә туҙҙы бит әле", тип туҡталып ҡалыу юҡ, йылдар үтеү, быуындар алмашыныу менән, баҫҡыс та юғарыға үрләй. Сәнғәт үҫеше менән халыҡ та үҫә, тормош та алға бара. Әле, ишетеүемсә, Рәйес Низаметдинов башҡорт ырыуҙарының берләшеүен сағылдырған шәп тарихи бейеү һалған. Бына был эш, һис шикһеҙ, маҡтауға лайыҡ.

Күптән түгел "Байыҡ" телевизион конкурсының һайлап алыу турҙарында Башҡортостандың көньяҡ-көнсығыш райондарында булырға тура килде. Был райондарҙың ҡайһыһын ғына төртөп күрһәтмә - һәр береһендә бейеү сәнғәтенә етди иғтибар бүленә. Башҡорт бейеүен ныҡ тотҡандары өсөн район хакимиәттәре башлыҡтарына рәхмәт, улар алдында башымды эйәм. Беҙҙең бейей генә башлаған 1952-1953 йылдарҙа 5-6 бейеүгә бер костюм ине, ә әлеге райондар үҙ бейеүселәренә матур-матур сәхнә костюмдары тектереүгә аҡса йәлләп тормай. Ошонда ла күренә бейеүсегә иғтибар һәм мөнәсәбәт. Шуға ла мәҙәниәтте һаҡлауҙа халыҡ ҡына түгел, йырлаусы, бейеүселәр генә түгел, ә юғарылағылар, етәкселәр ҙә, шулай уҡ аҡсалы кешеләр ҙә үҙ өлөшөн индерергә тейеш, тип уйлайым.

**Илгиз ИШБУЛАТОВ яҙып алды.**

✓ *Был изге айҙа ураҙа тотоусының һәр сәғәте, һәр минуты оло ҡиммәткә эйә. Кеше үҙенең Аллаһы Тәғәлә янына ҡайтасағын хәтергә төшөрә. Донъя ләззәттәренең ҡасан да булһа бөтөүөн аңлай. Мәңгелек ҡиммәттәргә ынтыла башлай.*

ИНТЕРНЕТТАН



# ТЕХНИКА ҒЫНА ТҮГЕЛ...

## ҡурҡыу тойғоһо ла төрләнә

■ Ашағандан һуң 15 минут йәйәү йөрөү оло кешеләрҙә диабет барлыҡҡа килеү хәүефен кәметә. Американың Джордж Вашингтон университеты ғалимдары асыҡлауынса, йәйәү йөрөү оҙайлы физик күнекмәләр кеүек үк, ҡанда шәкәр күләмен түбәнәйтә. Ҡанда шәкәр күбәйеүе икенсе типтағы диабет ауырыуына килтереүе ихтимал, шуға ла ашағандан һуң йәйәү йөрөү бик файҙалы. Доктор Лоретта ДиПиетро әйтеүенсә, ашағандан һуң ҡапыл шәкәр күләменең артыуы шәкәр диабетының башланғыс этабының үҫешенә килтереүе һәм организмдың глюкозаны үҙләштермәй башлауы ихтимал.

■ Кеше дөрөҫ туҡланып, шулай уҡ даими рәүештә спорт менән шөғөлләнеп, сәләмәт йәшәү рәүеше алып барыуға ҡарамаҫтан, ултыраҡ тормош алып бара икән, был кире күренеш организмға насар тәьҫир итә һәм сәләмәт йәшәүҙең файҙаһы юҡ, тип иҫәпләй Тель-Авив университеты ғалимдары. Етмәһә, бер үк позала ултырыу организмға май йыйылыуға килтерә. Әгәр ҙә кеше оҙаҡ хәрәкәтләнмәйенсә ултырһа, бер ниндәй диеталар ҙа ярҙам итмәйәсәк. Миссури университеты ғалимдары белдереүенсә, оҙаҡ ултырыу артыҡ ауырлыҡ йыйыуға ғына килтермәй. Организмда сәләмәтлеккә зыян килтереүсе метаболик процестар - йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәренә, диабетҡа илтеүе ихтимал. Белгестәр бындай кешеләргә ҡайһы бер эштәрҙе ултырып түгел, ә тороп башҡарырға кәңәш итә.

■ Йель университеты (АҠШ) ғалимдары асыҡлауынса, медитация психик ауырыуҙарҙы, шул иҫәптән шизофрения һәм аутизмды иҫкәртеү өсөн иң яҡшы сара булып тора. Невролог Джадсон Брюэр медитация ваҡытында баш мейеһе ҡабығы әүҙемлеген тикшергән һәм ошондай һығымтаға килгән. Оҙайлы ваҡыт медитация менән шөғөлләнеүселәр сит йоғонтоға бирелеп бармай, улар үҙҙәренең хәлен дөрөҫ баһалай ала. Шизофрения һәм аутизм менән яфаланыусы пациенттарға үҙҙәре тураһындағы уйҙар тынғы бирмәһә, медитация бындай уйҙарҙы ситкә ҡыуып, күберәк әлеге ваҡытта тирә-яҡта барған ваҡиғаларға йүнәлтергә мөмкинлек бирә.

■ Техник революция беҙгә яңы аралашыу һәм коммуникация саралары ғына түгел, ә яңы фобиялар ҙа алып килде. Мәҫәлән, бөгөн күп кеше мобиль телефон менән ҡуллана алыу мөмкинлеген юғалтып ҡуйыуынан ҡурҡа. Бик ҡыҙыҡ тойолһа ла, был фобияны медицина донъяһында күптән танығандар һәм номофобия тип атағандар. Номофобия менән яфаланыусылар бер ҡасан да өйҙәренән телефонһыҙ сығып китмәй, хатта бәҙрәф һәм ванна бүлмәһенә лә телефон менән йөрөй. Бындай кеше бәйләнеш булмаған зонаға эләкһә, ул мотлаҡ асыулана башлаясаҡ. Донъяла шулай уҡ һигеҙ һанынан ҡурҡҡан кешеләр ҙә бар. Табиптар белдереүенсә, октофобия менән ауырыусы кешеләр телефондан һандар йыйырға ла, гәзит уҡырға ла, төрлө техника менән ҡулланырға ла ҡурҡа. Тап уларҙа йышыраҡ тахикардия осрай ҙа инде.

МОСОЛМАН ДОНЪЯҺЫ



# УРАҘА ЛӘЗЗӘТЕН...

## белергә ашыҡ!

**Рамаҙан айы хаҡ мосолман өсөн иң ғәзизе, иң ҡәҙерлеһе. Ул һәр рамаҙанды Аллаһы Тәғәләгә рәхмәтле булып, хата-гонаһтары өсөн ярлыҡау һорап, шөкөр итеп, насар уйҙарҙан арынып ҡаршы ала.**

Ҡыҫҡа ғына мәлгә килә беҙгә рамаҙан. Ошо ваҡыт эсендә әҙәм балаһына ғүмер юлын Аллаһы Тәғәлә ғәфиәтенә ирешеп, Уның баһалап бөткөһөҙ әжерен алып, камиллашып, яңы тыуған гонаһһыҙ сабый шикелле таҙарынып дауам итеү мөмкинлеге бирелә. Раббыбыҙ рамаҙан айында үҙ ҡолдарына оло мәрхәмәтен күрһәтә, йәннәт ҡапҡаларын аса, йәһәннәм ҡапҡаларын яба, әҙәмдәрҙе тура юлдан тайпылдыртмаһын өсөн иблисте һәм уның ҡуштандарын бығаулап ҡуя. Хәҙистәрҙә "Кешеләр Рамаҙан айының өҫтөнлөктәрен белһә, улар уның мәңге һуҙылыуын теләр ине", тип әйтелә.

Әҙәм балаһында ике башланғыс йәшәй. Беренсеһе - изгелеккә, яҡшылыҡҡа өндәгән фәрештәләр башланғысы булһа, икенсеһе - түбән хистәргә тартҡан хайуан башланғысы. Кешегә ошо ике башланғыс, ихтыяр, бер ни тиклем һайлау мөмкинлеге бирелеүе уны йә фәрештәләрҙән юғары изге зат итә, йә хайуандарҙан меҫкенерәк итеп, түбәнгә төшөрә. Ураҙа аша нәфсеһенә һәм шәһүәтенә ҡаршы торған, көн дауамында аҙыҡтан баш тартҡан, түбән теләктәрҙе ауыҙлыҡлай алған, ғәйбәттән телен һаҡлаған, ғәҙелһеҙлектән йыраҡлашҡан кеше фәрештә асылын ала, хатта фәрештәләрҙән дә юғарыраҡ күтәрелә.

Ураҙа тотҡан кешенең асығыуында оло хикмәт ята. Йыш ҡына беҙ Аллаһы Тәғәлә ебәргән муллыҡтарҙы, ниғмәттәрҙе, байлыҡтарҙы ҡәҙерһеҙләп, уларҙың ысын хужаһы хаҡында онотоп, исраф итә башлайбыҙ, рәхмәт төшөнсәһен юғалтабыҙ, Раббыбыҙға ҡарата ғәфләткә биреләбеҙ. Ә ураҙа тотҡанда, ифтар мәлендә ҡатҡан икмәктең дә Аллаһы Тәғәләнең оло ниғмәте икәнен хәтергә төшөрәбеҙ. Үҙебеҙҙең ни тиклем етеш, бай йәшәүебеҙҙе аңлайбыҙ. Сөнки ана шул икмәк һынығы хаҡында хыялланыусылар ҙа бар бит донъяла. Сомали дәүләтенән бер мосолман дин ғалимына "Бер нисә көн рәттән сәхәрһеҙ һәм ифтарһыҙ тотолған ураҙа ҡабул буламы?" тигән һорау бирә. Сөнки был мосолмандың сәхәр ашарға ла, ауыҙ асырға ла ризығы булмай. Шунда ғалим күҙ йәштәрен тыя алмайынса илап ебәрә. Был ҡасандыр урта быуаттарҙа түгел, ә беҙҙең көндәрҙә булған хәл.

Ураҙа ләззәтен белмәүселәргә был ғәмәл ауыр, яфа-михнәттәр килтереүсе ғазап булараҡ күренә. Уларға исламдың төп тәрәге булған ғәмәлде башҡарыусылар шулай ыҙалана, үҙ-үҙҙәренә зыян килтерә кеүек тойола. Араларында мосолмандарҙы ысын күңелдән йәлләүселәр ҙә табыла. Ләкин ысынбарлыҡта рамаҙан айындағы фарыз ураҙала ике оло ҡыуаныс ята. Был ҡыуаныстарҙың береһе - ауыҙ асҡандағы аҙыҡ менән килһә, икенсеһе - кешегә Раббыһы янына баҫҡас бирелә. Мөхәммәт бәйғәмбәр, ураҙа тотоусы өсөн ике шатлыҡлы мәл бар, тигән. Улар - ауыҙ асыу мәле һәм Аллаһы Тәғәлә менән осрашыу мәле.

Хәҙисе-ҡотдусиҙа бөтә нәмәгә көсө һәм ҡеүәте еткән Бөйөк Аллаһ әйтә: "Әҙәм балаһының ураҙанан башҡа булған бөтә ғәмәлдәре үҙе өсөн, ураҙа ғына Минең хаҡыма тотола. Уның өсөн әжер-сауаптарын да үҙем бирермен". Ошо изге ғәмәлдең алдағы мәңгелек тормошта ҙур сауаптар килтерәсәге, Хаҡ Тәғәлә ризалығына өлгәшеүгә сәбәпсе буласағы тураһындағы изге уйҙар мөъмингә көс бирә. Ул көнө буйы үҙенең Хакимы хаҡында уйлай. Уйҙары Аллаһы Тәғәлә тураһында булғанға күрә, уның бар тормошо хаҡ юлда төҙөлә башлай. Шуға күрә лә ураҙа тотоусылар түгел, ә мөмкинлектәре була тороп та, был ғәмәлде ҡалдырыусылар оло юғалтыу кисерә, Ҡөрьәндә әйтелгәнсә, хәсрәттә булыусылар исемлегенә эләгә.

Был изге айҙа ураҙа тотоусының һәр сәғәте, һәр минуты, һәр секунды оло ҡиммәткә эйә. Кеше үҙенең Аллаһы Тәғәлә янына ҡайтасағын хәтергә төшөрә. Донъя ләззәттәренең ҡасан да булһа бөтөүөн аңлай. Мәңгелек ҡиммәттәргә ынтыла башлай. Бер ваҡыт шәғбан айының һуңғы йома көнөндә һөйләгән вәғәзендә мосолмандарға нәсихәт биреп, Бәйғәмбәребеҙ: "Эй, кешеләр! Аллаһтың игелектәр, мәрхәмәт-шәфҡәт менән тулы булған бер айы яҡынлашып килә. Был айҙы Аллаһ бөтә айҙарҙан да яҡыныраҡ күрә. Аллаһтың рәхмәтенә лайыҡ булғанығыҙ өсөн был айҙа һеҙ Уның үҙенә саҡырыласаҡһығыҙ. Рамаҙан айында һәр һулышығыҙ - Аллаһты данлау, йоҡоғоҙ - Аллаһты ололау, һеҙ эшләгән игелекле һәр ғәмәл ҡабул ителер, доғаларығыҙ яуап табыр", - тип әйтә.

Үҙ ҡолдарының гонаһтарын ярлыҡар өсөн Аллаһ игелекле миҙгелдәр, кисәләр, көндәр, айҙар бар иткән дә: "Был ваҡыттарҙың ҡәҙерен белеп, ололоғон аңлап гонаһтарығыҙҙы ярлыҡауымды һорағыҙ - мин һеҙҙе ғәфү итермен", - тигән. Билдәле ислам ғалимы, имам Ғазали: "Әгәр Аллаһ ҡолон ярата икән, уның әжерен арттырыу өсөн Ул мөьминде изге көндәрҙә яҡшы ғәмәлдәр башҡарыуға йүнәлтә. Әгәр ҡолон яратмаһа, гонаһтары өсөн ҡаты язалау маҡсатында, уны насар эштәр башҡарыуға йүнәлтә. Ә инде Аллаһы Тәғәләнең кешене һөйөү-һөймәүе был кешенең алдағы эштәренән тора", - тигән. Рамаҙан айының беренсе төнөндә Аллаһы Тәғәлә исеменән: "Эй, игелеккә ынтылыусы, изгелектәреңде арттыр. Яманлыҡта йөрөүсе, насар ҡылыҡтарыңдан баш тарт", - тигән саҡырыу ташлана.

Был айҙың ҡәҙерен тулы кимәлдә аңлаған сәхәбәләр рамаҙан башланғансы ярты йыл буйы Аллаһы Тәғәләгә, ошо изге айҙы ҡаршы алырға насип ит, тип доға ҡылһа, рамаҙан үтеп киткәндән һуң ярты йыл буйы Аллаһтан ошо айҙа ҡылған ғибәҙәттәренең, яҡшы ғәмәлдәренең ҡабул ителеүен һораған. Ә инде изге ғәмәлдәргә килгәндә, сөннәт булған ғәмәлде башҡарыусы фарызды башҡарғандай сауап алһа, фарызды үтәүсе етмеш фарыз әжерен аласаҡ.

"Рамаҙан айы бик тә мөбәрәк ай. Уның тәүге ун көнө - рәхмәт, урталағы ун көнө - мәғрифәт йәки гонаһтарҙың ярлыҡаныуына, аҙаҡҡы ун көнө Йәһәннәм утынан ҡотолоуға сәбәп булған көндәр", тиелә хәҙистә. "Шуның өсөн дә ихласлыҡ һәм пак күңел менән һеҙ ураҙа тотоу өсөн теләк һәм ҡеүәт һорағыҙ. Был изге айҙа, айҙың күркәм был көндәрендә Аллаһтың ярлыҡауын алып ҡала алған кеше - бәхетле кеше", ти Бәйғәмбәребеҙ. Ҡөрьән: "Фәкирҙәргә һәм мохтаждарға хәйер-саҙаҡа бирегеҙ", -тип нәсихәт бирә. Ошо нәсихәттәргә күнеп, мосолман ололарға ҡарата игелекле, кескәйҙәргә ҡарата миһырбанлы, һөйкөмлө һәм хәстәрле булырға ашығырға тейеш.

Ураҙа - ул ашау, эсеү, енси бәйләнештәрҙән тыйылыу ғына түгел, ә ғәйбәттән арыныу, кешеләр араһындағы мөнәсәбәттәрҙе боҙоп ҡуйыуҙан йыраҡлашыу, күҙҙәрҙе, ҡолаҡтарҙы бысраҡлыҡтарҙан һаҡлау ҙа. Ураҙа тотоу, бар эшмәкәрлекте туҡтатып, өйҙә эҫенән ҡасып, ҡояш байығанын, ифтарҙы көтөп ятыу ҙа түгел. Кеше ҡәҙимгесә хеҙмәт итеп, йәмғиәткә файҙа килтереп, ғаиләһен ҡарап, шул уҡ ваҡытта ғибәҙәттәрен арттырып, Раббыһының ризалығына ынтыла.

Ислам - ул урталыҡ дине. Шуға күрә баҡыйлыҡ тип фани донъянан ситләшмәгәндәр, был донъя тип, мәңгелек хаҡында онотмағандар ғына бәхет ҡаҙанғандар рәтендә буласаҡ, иншаллаһ. Ураҙаларҙы сәләмәтлектә ҡаршы алып, нур һәм иман менән тулы күңел, гонаһтарҙан таҙарынған ғәмәл дәфтәре һәм камиллашҡан ҡәлебтәр менән оҙатырға яҙһын.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Рамаҙан айындағы ураҙа шәһәҙәт кәлимәһе, намаҙ, зәкәт, хаж менән бергә исламдың төп шарты, тәрәге һанала. Уның мосолман өсөн мотлаҡлығы Ҡөрьән Кәримдең "Эй, Минең берлегемде һәм барлығымды таныған иманлы бәндәләр! Һеҙҙән алда булған өммәттәргә фарыз ителгән кеүек, һеҙгә лә ураҙа ғибәҙәте фарыз ителде, бәлки, һеҙ ҙә, дингә кәмселек килтереүҙән һаҡланып, тәҡүә кешеләрҙән булырһығыҙ" (Әл-Баҡара сүрәһе, 183-сө аят) аяты һәм башҡа аят-хәҙистәр менән дәлилләнә. Бәлиғ булғандарға, үҙҙәрен мосолман тип иҫәпләгәндәргә, аҡылға зәғиф булмағандарға был ғәмәл фарыз. Ныҡ ауырығанда, сәфәрҙә саҡта, ҡатын-ҡыҙҙар ауырлы булған, бала табып таҙарынған, сабыйҙы күкрәк һөтө менән ашатҡан осорҙарында, күрем ваҡытында ураҙа мөмкинлек сыҡҡансы кисектерелә (Сәфәр ваҡытында ҡыйынлығы булмаһа, ураҙа тотоу хуплана). Ләкин мөмкинлек сығыу менән мөьминдәр фарыз ғәмәлде көнөн көнгә килтереп үтәп ҡуйырға бурыслы. Сәхәрҙең ахырғы ваҡыты иртәнге намаҙ ингәнгә ярты сәғәт ҡалғас тамамлана. Шул ваҡыттан алып ҡояш байығансы кеше ашауҙан, эсеүҙән, енси бәйләнешкә инеүҙән тыйылырға бурыслы.**

**Шулай уҡ ураҙа тотҡанда ниәт итеү төп шарт булып тора. Ураҙа ябығыр, организмды таҙартыр, йә башҡа оҡшаш маҡсаттарҙа тотолһа, уның мәңгелек тормош өсөн файҙаһы юҡ, асығыу был донъя өсөн генә. Кеше Аллаһы Тәғәләнең барлығын, берлеген танып, ислам диненең хаҡлығына инанып, фарыз булыуын аңлап ураҙа ғәмәлен үтәһә генә ҡабул була. Ниәт сәхәр ваҡытында, йәки көндөң тәүге яртыһында әйтелә. Хәнәфи мәҙхәбендә ниәтте, ҡысҡырып, ишеттереп әйтеү мотлаҡ түгел, иң мөһиме, кеше йөрәк менән ниәт алырға тейеш.**

**Ураҙа ғәмәленең нескәлектәре күп. Уларҙы тулыраҡ белер өсөн дин әһелдәренә, дини китаптарға мөрәжәғәт итеү зарур. Белем генә кешене хаталаныуҙан һаҡлай, уға ураҙаһын һәм барлыҡ ғәмәлдәрен тейешенсә үтәргә ярҙам итә.**

**Быйыл рамаҙан айы 8 июлдә ҡояш байығас башлана. Беренсе тәрәүих намаҙы ошо кистә уҡыла. 9 июль - ураҙаның беренсе көнө.**

**Азамат САЛАУАТОВ әҙерләне.**

МОСОЛМАН ӘҘӘБЕ

**Ҡайҙа ғына сәфәр ҡылһаң да, юл ситтәрендә ағасҡа йә берәй ташҡа эленгән веноктар күҙгә ташлана. Улар ошо урында ғүмерҙәре фажиғәле өҙөлгән кешеләрҙе иҫкә алыу ғына түгел, ә юлсыларға иҫкәртеү, абай булырға саҡырыу булараҡ та ҡабул ителә. Сөнки Рәсәйҙә йыл һайын тиҫтәләрсә мең кеше юл фажиғәһендә һәләк була. Был фажиғәләр кәмеһен өсөн төрлө саралар күрелә, юлдар төҙөкләндерелә, транспорт төрҙәре камиллаштырыла, ҡағиҙәләрҙе боҙоусыларға яза төрҙәре арттырыла. 2005 йылдан алып ноябрҙең һәр өсөнсө йәкшәмбеһендә бар донъяла юл ҡазаларында һәләк булыусыларҙың хәтер көнө үткәрелә килә.**



# БӘХЕТ ҠАҘАНҒАНДАР...

## исемлегенә эләгәйек

Йәйҙең тынсыу көнөндә, ауылдарына бер нисә саҡрым ғына ҡалғас, юл фажиғәһенә тарып һәләк булған егеттәр ҙә ана шул тиҫтәләрсә меңдәр менән иҫәпләнгән статистиканы тулыландырғандыр. Ҡазаға шаһит булыусылар, йәштәрҙе йәлләп, тағы ла бер тапҡыр ғүмер һәм үлем хаҡында уйланғандыр... Ә тап ошо ваҡытта күрше ауыл халҡы, мәсеттәре манараһын ҡолатып төшөрөп, урамдың икенсе осона алып барып бырғытып китеүселәрҙең һәм уларҙы ҡоҙғортоусының вәхшилегенә шаҡҡатып геүләшә ине. Дингә бәйле бар нәмәләрҙе юҡ итеүгә ҡоролған совет заманында түгел, ә беҙҙең көндәрҙә, атеистик дәүләт тарҡалыуға ун биш йылдан ашыу ваҡыт үтеп, ауылдарҙа мәсеттәр төҙөлөп, халыҡ әҙме-күпме дингә ҡайта башлаған осорҙа булды бит был хәл. Баҡтиһәң, марксизм рухында тәрбиәләнгән пенсионерға әүәле үҙе эшләгән сельпоның мәсет итеп үҙгәртеп ҡоролоуы ғәҙелһеҙлек булып күренгән һәм ул билдәле бер хаҡҡа күрше ауыл егеттәрен яллап, "ғәҙеллекте" ҡайтарырға булған. Тегеләре, бер ни уйлап тормай, файҙалы килешеү, тип ризалашҡан. Эйе, шул егеттәр ауылдарына ҡайтып барышлай фажиғәгә тарый...

Яманлыҡ эшләргә әҙер тороусылар һәр заманда ла табылып тора. Изгелек, мәрхәмәтлек төшөнсәләре ят булған был бәндәләр, ҙур булмаған хаҡҡа йә дәрәжәгә алданып, Аллаһы Тәғәлә аманатына, кеше ғүмерҙәренә күҙ ҙә йоммай ҡул һуҙа. Ләкин уларҙың енәйәттәре был донъяла уҡ тейешле язаһын ала. Әлеге осраҡтағы кеүек...

Юлдарҙағы һәләкәттәр ни тиклем ҡурҡыныс, үкенесле булмаһын, унан да аянысыраҡ тағы ла бер фажиғә бар. Ул да булһа, тормош тип аталған юлда оло һәләкәткә осрау. Был фажиғә ғүмер башында Аллаһы Тәғәләнең йәннәтенә юл тотҡан инсандың аҙашып, яңылышып, гонаһтарға батып, иманын юғалтып йәһәннәмгә юлығыуынан ғибәрәт. Булмышына ҡаршы сығып, изге төшөнсәләргә ҡул һуҙыусылар, Аллаһы Тәғәләнең бойороҡтарын үтәмәйенсә, унның тыйыуҙарына ҡолаҡ һалмайынса, иблис ҡотортоуҙарына эйәреүселәр ошо бәхетһеҙлеккә тарый. Раббыңды танымау, кеше йәнен ҡыйыу, фетнә ҡуптарыу, иҫерткес эсемлектәр ҡулланыу, зина ҡылыу, мохтаждарҙың һәм көсһеҙҙәрҙең өлөшөн тартып алыу, ғибәҙәтханаларға, дингә ҡул һуҙыу кеүек гонаһтар ана шул бәләне яҡынайтыусы яман ғәмәлдәр. Ошо эштәрҙә ныҡышыусы әҙәм балаһы был донъянан тәүбәгә килмәйенсә китһә, мәңгелек бәхетенән ҡолаҡ ҡағасаҡ һәм ғазап уттарына ырғытыласаҡ.

Ни өсөн кеше һаман золом һәм аҙғынлыҡ кеүек яманлыҡтарҙы юлдаш итеп, бөйөк фажиғәһенә табан йүнәлә? Аллаһы Тәғәлә әмеренә буйһонмайынса, иблис шикелле тәкәбберләнә, уйланыуҙарға бирелеп, Раббыһының хаҡлығына шәһәҙәт килтерер урында, үҙ нәфсеһе шауҡымына бирелеп, ҡапма-ҡаршы тарафҡа йөҙөн бора. Кеше һаман да үҙенең дәрәжәһе менән маһайып, фирғәүендәр рәтенә баҫа, байлығына баш була алмай, ҡарунды үҙенә пот итеп ала, яманлыҡта уҙышыуҙа әбүйәһил һәм әбүләһәбте уҙҙырырға тырыша, ә аҙғынлыҡта Лут бәйғәмбәр ҡәүеменең танауына сиртә. Ләкин үҙ "кумирҙарының" ғүмер аҙағы хаҡында хәбәрҙәргә ҡолаҡ һалмай, Аллаһы Тәғәләне инҡар итеп, бәйғәмбәрҙәренә ҡаршы сыҡҡан халыҡтарҙың аяныслы яҙмыштарынан ғибрәт алмай. Аллаһы Тәғәлә Изге Ҡөрьәндә: "Бына шулай итеп, Беҙ уларҙың һәммәһен дә гонаһтарына күрә язаға тоттоҡ. Ҡайһыһының түбәһенә (таш яуҙырған) дауыл менән (Лут халҡын), ҡайһыһын ҡот осҡос бер тауыш (Сур борғоһо) тотто (Мәдйән, Сәмуд ҡәүемдәрен), ҡайһыһын ергә йотторҙоҡ (Ҡарунды), ҡайһыһын һыуға батырҙыҡ (Фирғәүен һәм Нух тоҡомдарын), Аллаһ уларға золом килтермәне, улар үҙҙәренә-үҙҙәре золом килтерҙе", - тип әйтә.

Ҡайҙа үткән быуаттар залимдары? Ҡайҙа уларҙың сикһеҙ күренгән ғәйрәттәре? Бер нәмәләре лә ҡалмаған. Ә халыҡ, быуаттар үтһә лә, был кешеләргә Тәфтиләүгә уҡыған шикелле бәддоға уҡый. Ғүмер бер генә, тип, йәшлектәрен ләззәттә үткәргән кешеләр ҡайҙа? Бөгөн уларҙың ҡартлыҡтары бер-бер артлы килгән бәләләр менән тетрәнә, ҡасандыр яндарында булған теҙгенһеҙ мөнәсәбәттәренән алған ләззәттәре лә күңел йылылығы бирмәй, ә киләсәктә ул мөнәсәбәттәре өсөн тағы яуап тотаһы бар әле. Ә ошо гонаһҡа юл асыусы халыҡтар йә юҡҡа сыҡҡан, йә быңа- быңа уларҙы юҡ итәсәк оло һәләкәт алдында тора. Аллаһы Тәғәлә иҫкәртә: башҡаларға һәм үҙҙәренең булмыштарына золом ҡылыусылар был донъяла уҡ кәрәкле язаларын ала. Ә бар ошо әшәкелектәрҙе эшләп тә, һаман именлектә булыусыларҙың хәлен күреп, кеше алданмаһын: уларға тағы ла күберәк гонаһ ҡылып, үҙ хәлдәрен тағы ла нығыраҡ мөшкөлләһендәр өсөн, кисектереү генә бирелә. Әлбиттә, тәүбәгә килмәһәләр әгәр.

Юл ҡазаларында һәләк булыусылар хаҡында мәғлүмәттәрҙе беләбеҙ, ләкин ана шул тормош тип аталған оло юлда фажиғәгә тарыусыларҙың һаны бары Аллаһы Тәғәләгә генә мәғлүм. Һандар мөһим дә түгел. Үҙебеҙ Изге китаптарҙа, бәйғәмбәрҙәр, әүлиәләр, аҡыл эйәләре ауыҙынан әйтелгән иҫкәртеүҙәргә ҡолаҡ һалдыҡмы, көндәлек тормошобоҙҙа уларҙы ҡулландыҡмы, тирә-йүндә барған ваҡиғаларҙан фәһем алдыҡмы, ошо бөйөк юл фажиғәһенә тарыуҙан ҡурсалаған аҙым эшләнекме? Кешенең физик фажиғәһе унның рухи фажиғәһе янында бер ни ҙә түгел. Бары Раббыһына итәғәт итеп, ләззәттәргә алданмай, иблис ҡотортоуҙарын һәм нәфсеһен ауыҙыҡлап, ауыр, шул уҡ ваҡытта хәҡиәҡәткә илткән юлды һайлағандар ғына ҡотолоу таба. Фани һәм баҡый донъяла бәхет ҡаҙанғандар исемлегенә эләгә. Шундайҙар рәтенә ашығайыҡ.

**Мораҙым АЙСЫУАҠОВ.**

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

***1434 һижри йыл.***

| Июль | Сәхәрҙең ахырғы ваҡыты | Иртәнге намаҙ | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Ауыҙ асыу, аҡшам | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 9, шишәмбе | 3:53 | 4:23 | 14:30 | 21:18 | 22:48 | 00:18 |
| 10, шаршамбы | 3:54 | 4:24 | 14:30 | 21:17 | 22:47 | 00:17 |
| 11, кесе йома | 3:56 | 4:26 | 14:30 | 21:16 | 22:46 | 00:16 |
| 12, йома | 3:57 | 4:27 | 14:30 | 21:15 | 22:45 | 00:15 |
| 13, шәмбе | 3:58 | 4:28 | 14:30 | 21:14 | 22:44 | 00:14 |
| 14, йәкшәмбе | 3:59 | 4:29 | 14:30 | 21:13 | 22:43 | 00:13 |
| 15, дүшәмбе | 4:01 | 4:31 | 14:30 | 21:12 | 22:42 | 00:12 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

УҢЫШ ҠАҘАН



# ЫСЫН ТОРМОШҠА СӘЙӘХӘТ

## "Мега тормош". 30 көнлөк программа

*Хыялыбыҙ киләсәктә үҙебеҙ өлгәшергә теләгәндең берҙән-бер сикләүсеһе булып тора.*
*Чарльз Ф. Кеттеринг.*

Аҡылды, тәнде һәм характерҙы камиллаштырыуҙың иң ҡулай эшмәкәрлек планы был 30 көнлөк программа. Ул ысын мәғәнәһендә ҡасандыр Көнсығышта йәки Көнбайышта әҙерләнгән тормошта оҙайлы ваҡытҡа уңыш ҡаҙаныуҙың иң һөҙөмтәле ысулдарын берләштереүсе шәхси үҫештең революцион планы. Ҡеүәтле һәм әлегәсә билдәһеҙ, әммә өйрәнеү һәм ҡулланыу өсөн еңел булған ысулдар меңдәрсә кешегә тулыраҡ, яҡшыраҡ һәм байыраҡ тормошҡа өлгәшергә ярҙам итте.

Был программа тормош уйынында еңеүсе булып сығыр өсөн кәрәкле барлыҡ ғәҙәттәрҙе үҙегеҙҙә булдырыу мөмкинлеге бирер. Әлеге ваҡытта ниндәй ҡаҙаныштарығыҙ булыуы, аҡыл ҡеүәтегеҙ нисек көйләнеүе, тәнегеҙ һәм характерығыҙ нисек күнегеүе мөһим түгел. 30 көнлөк программа артабанғы тормошоғоҙҙо үҙегеҙ ҙә күҙалламаған бейеклеккә күтәрергә һәләтле. Әгәр ихтыярығыҙҙы көн һайын тәҡдим ителгән концепциялар өҫтөндә даими эшләүгә йүнәлтеп, был программа өсөн кәм тигәндә бер сәғәт бүлһәгеҙ, бер айҙан мотлаҡ үҙегеҙҙә тәрән үҙгәрештәр һиҙерһегеҙ.

Һәр көн бәләкәй генә еңеү яулап, уларҙы бөртөкләп йыйып, камиллыҡҡа тыйып торғоһоҙ ынтылышҡа һәм көслө импульсҡа эйә була алаçаҡһығыҙ. Программанан мөмкин тиклем күберәк файҙа алыу өсөн барлыҡ күнекмәләрҙе лә башҡарырға кәрәк. Әгәр ошо программаға мөмкинлек бирһәгеҙ, бер айҙан һуң сарыф ителгән тырышлығығыҙ яңы энергия, сәләмәтлек, тыныслыҡ, донъяға ыңғай ҡараш һәм һеҙ күптән эҙләгән стимул булып кире ҡайтыр. Программа буйынса эшләгеҙ һәм барлыҡ маҡсаттарығыҙға өлгәшегеҙ, ысынлап та үҙегеҙ лайыҡ булған байлыҡҡа күмелеп йәшәгеҙ.

Программа бик ябай һәм ҡулланыу өсөн уңайлы. Һәр көн үҙенә ниндәйҙер күнекмәләрҙе, уңыш ҡаҙаныу өсөн кәңәштәрҙе һәм тап ошо көндә ҡулланырға тейешле философик тәҡдимдәрҙе үҙ эсенә ала ул.

Шулай уҡ ҡаҙаныштарығыҙҙы билдәләп барыу өсөн "Уңыш журналы" булдырығыҙ һәм унда көн һайын һөҙөмтәләрегеҙҙе яҙып барығыҙ. Тап көн һайын яҙып барыу бик мөһим, сөнки ул һеҙгә үҙегеҙҙе ойошторорға ярҙам итәсәк, илһам һәм күтәренкелек бирәсәк, ярты юлда туҡтап ҡалмайынса алға барырға этәргес буласаҡ.

**Робин ШАРМА.**



## 8 ИЮЛЯ ПОНЕДЕЛЬНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым" (12+)
13.45 "Истина где-то рядом"
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Я подаю на развод". Ток-шоу (16+)
16.10 "Женский доктор-2". Сериал (16+)
17.00 "Проспект Бразилии". Сериал (16+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Отражение". Драма (16+)
23.30 "Вечерний Ургант" (+16)
00.00 "Викинги". Сериал (18+)
00.55 "Слишком крута для тебя" (18+)
02.50, 03.00 "Гуру" (16+)
03.00 Новости
04.25 "Контрольная закупка"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан"
09.00 "1000 мелочей"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+)
13.00 "Особый случай" (12+)
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.00 "Тайны института благородных девиц", 124-я серия. Сериал
16.00, 17.30 "Вероника. Потерянное счастье". Сериал (12+)
17.00 "Вести"
17.00 "Вести - Башкортостан"
18.30 "Прямой эфир" (12+)
19.40 "Местное время. Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Любовь на миллион". Сериал (12+)
22.55 "Раскол". Сериал (16+)
01.00 "Вечный человек, или Повесть Туринской Плащаницы"
01.55 "Вести+"
02.20 "Американская трагедия"
03.40 "Большая любовь-5" (16+)

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
07.45 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.00 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
09.30 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.50 "Замандаштар". Гөлфиә Шәүәлиева (6+)
10.15 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
10.45 "Дәрүишхан төркөмө" (6+)
11.30 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.45 "Наза". Башҡорт халыҡ бейеүҙәре (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Уҙаман". Әмир Абдразаҡов (6+)
15.00 "Ихласлыҡ - күңелдең яҡтыһы". Гөлфиә Юнысова (6+)
21.00 "Өс мөхәббәт тарихы". Театрлаштырылған тамаша (6+)

### БСТ
**07.00 "Сәләм, лето!" (12+)**
**10.00, 11.30 "Новости недели" (на башк. яз.) (16+)**
**10.30 "Семәр"**
**10.45 "Городок АЮЯ"**
**11.00, 17.30, 02.00 "Замандаштар" (6+)**
**11.15, 17.15 "Орнамент"**
**11.30 Новости (на русск. яз.)**
**12.00 "Ура, каникулы!" (6+)**
**12.30, 16.15 "Учим башкирский язык"**
**12.45, 06.45 "Весело живем" (12+)**
**13.00 "Уңған килен" (16+)**
**13.30, 19.30, 00.30 Новости (на башк. яз.)**
**13.45 "Мелодии души" (12+)**
**14.45 "Автограф. М. Гиляжев"**
**15.15 "Царь горы"**
**15.30 "Гора новостей"**
**15.45 "Дневник фестиваля "Оперение"**
**16.00 "Бауырһаҡ"**
**16.30, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**16.45 "Дорога к храму"**
**17.45 "Вопрос+Ответ=Портрет"**
**18.30, 02.15 "Эдера" (12+)**
**20.00 "Сәңгелдәк"**
**20.15, 06.30 "Полезные новости" (12+)**
**20.30, 03.00 "Телецентр" (12+)**
**21.00 "Большой чемодан"**
**22.00 "Следопыт"**
**22.30 "Позывной "Барс"**
**22.45, 03.30 Художественный фильм (16+)**
**01.00, 01.45 Единое время"**

## 9 ИЮЛЯ ВТОРНИК

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым" (12+)
13.45 "Истина где-то рядом"
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Я подаю на развод". Ток-шоу (16+)
16.10 "Женский доктор-2" .Сериал (16+)
17.00 "Проспект Бразилии". Сериал (16+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Отражение". Сериал (16+)
23.30 "Вечерний Ургант" (16+)
00.00 "Викинги". Сериал (18+)
00.55 "Иллюзия полета" (16+)
02.45, 03.05 "Пустоголовые" (16+)
03.00 "Новости"
04.15 "Контрольная закупка"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан"
09.00 "Ауаз"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.50, 14.50 "Вести. Дежурная часть"
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+)
13.00 "Особый случай" (12+)
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.00 "Тайны института благородных девиц", 125-я серия. Сериал
16.00, 17.30 "Вероника. Потерянное счастье". Сериал (12+)
17.00 "Вести"
17.10, 19.40 "Местное время. Вести - Башкортостан"
18.30 "Прямой эфир" (12+)
20.00 "Вести"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Любовь на миллион". Сериал (12+)
22.50 "Раскол". Сериал (16+)
02.05 "Вести+"
02.30 "Честный детектив" (16+)
03.05 "Американская трагедия"
04.45 "Вести. Дежурная часть"

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
07.45 "Дарман" (6+)
08.15 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.20 "Кәмит". Юмор (6+)
08.30 "Йәштәр тауышы" . Йырҙар (6+)
09.15 "Автограф". Рәмилә Хоҙайғолова (6+)
09.45 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (0+)
11.45 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.45 "Наза". Донъя халыҡтары бейеүе (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Замандаштар". Илфат Йомағолов (6+)
14.30 "Алҡыштар". Әхәт Хөсәйенов (6+)
20.00 "Кис ултырып". "Арғымаҡ" төркөмө (6+)

### БСТ
**07.00 "Сәләм, лето!" (12+)**
**10.00, 16.45 "Круизы в мир открытий" (16+)**
**10.30 "Зеркальце"**
**10.45 "Царь горы"**
**11.00, 17.30, 02.00 "Замандаштар" (6+)**
**11.15, 17.45 "Орнамент"**
**11.30 "Здоровое решение" (12+)**
**12.00 "Ура, каникулы!"**
**12.30, 16.15 "Учим башкирский язык"**
**12.45, 06.45 "Весело живем" (12+)**
**13.00 "Уңған килен"**
**13.30, 19.30, 00.30 Новости (на башк. яз.)**
**13.45 "Мелодии души" (12+)**
**14.45 "Тәмле" (12+)**
**15.15 "Книга сказок"**
**15.30 "Гора новостей"**
**15.45 "Дневник фестиваля "Оперение"**
**16.00 "Йырлы кәрәҙ"**
**16.30, 21.30 "Новости (на русс. яз.)**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+)**
**18.00 "Үткән ғүмер. 1960-е годы" (12+)**
**18.30, 02.15 "Эдера" (12+)**
**20.00 "Сәңгелдәк"**
**20.15 "Власть отвечает" (16+)**
**20.30, 03.00 "Телецентр" (12+)**
**21.00 "Большой чемодан" (6+)**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+)**
**22.30, 03.30 Художественный фильм (16+)**
**01.00 "Единое время"**
**06.30 "Полезные новости" (12+)**

## 10 ИЮЛЯ СРЕДА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым" (12+)
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Я подаю на развод". Ток-шоу (16+)
16.10 "Женский доктор-2". Сериал (16+)
17.00 "Проспект Бразилии". Сериал (16+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Отражение". Сериал. (16+)
23.30 "Вечерний Ургант" (+16)
00.00 "Викинги". Сериал (18+)
00.55 "Форс-мажоры" (16+)
01.45, 03.05 "Белые люди не умеют прыгать" (16+)
03.00 Новости
03.55 "Евгений Матвеев. Всем сердцем - раз и навсегда"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан"
09.00 "1000 мелочей"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.50, 14.50 "Вести. Дежурная часть"
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+)
13.00 "Особый случай" (12+)
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.00 "Тайны института благородных девиц", 126-я серия. Сериал
16.00, 17.30 "Вероника. Потерянное счастье". Сериал
17.00 "Вести"
17.10 "Местное время. Вести - Башкортостан"
18.30 "Прямой эфир" (12+)
19.40 "Местное время. Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Любовь на миллион". Сериал (12+)
22.50 "Раскол". Сериал (16+)
01.00 "Икона". Док. фильм
02.05 "Вести+"
02.30 "Американская трагедия"
04.05 "Большая любовь-5" (16+)

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
07.45 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.00 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
09.45 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (0+)
10.45 "Онотолор тимә...". Ретро (6+)
11.10 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
11.45 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.20 "Байыҡ". 1-се тур (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Моң тулы күңелем...". Филүс Ҡаһиров (6+)
21.00 "Кис ултырып". Нурия Абдуллина(6+)

### БСТ
**07.00 "Сәләм, лето!" (12+)**
**10.00, 16.45 "Круизы в мир открытий" (16+)**
**10.30 "Шатлык йыры"**
**10.45 "Книга сказок"**
**11.00, 17.30, 02.00 "Замандаштар" (6+)**
**11.15, 17.15 "Орнамент"**
**11.30 "Отдел культуры" (12+)**
**12.00 "Ура, каникулы!" (6+)**
**12.30, 16.15 "Учим башкирский язык"**
**12.45, 06.45 "Весело живем"**
**13.00 "Уңған килен" (16+)**
**13.30, 19.30, 00.30 Новости (на башк. яз.)**
**13.45 "Байыҡ-2013"**
**14.45 "Автограф" 6+**
**15.15 "Преград.net" (12+)**
**15.30 "Гора новостей"**
**15.45 "Дневник фестиваля "Оперение"**
**16.00 "Городок АЮЯ"**
**16.30, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**17.45 "Алтын тирмә"**
**18.30, 02.15 "Эдера" (12+)**
**20.00 "Сәңгелдәк"**
**20.15, 06.30 "Полезные новоти" (12+)**
**20.3, 03.00 "Телецентр" (12+)**
**21.00 "Большой чемодан" (12+)**
**22.00 "Историческая среда"**
**22.30 "Аль-Фатиха"**
**23.00, 03.30 Художественный фильм (16+)**
**01.00 "Единое время"**
**01.45 "Позывной "Барс"**

## 11 ИЮЛЯ ЧЕТВЕРГ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым" (12+)
13.45 "Истина где-то рядом"
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Я подаю на развод". Ток-шоу (16+)
16.10 "Женский доктор-2". Сериал (16+)
17.00 "Проспект Бразилии". Сериал (16+)
18.00 "Вечерние новости" (с субтитрами)
18.50 "Давай поженимся!" (16+)
19.50 "Пусть говорят" (16+)
21.00 "Время"
21.30 "Отражение". Сериал (16+)
23.30 "Вечерний Ургант" (16+)
00.00 "Викинги". Сериал (18+)
01.45, 03.05 "Свадьба". Комедия (12+)
03.00 Новости
04.05 "Евгений Моргунов. Невыносимый балагур" (12+)

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 06.41, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Утро России"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Вести-Башкортостан"
09.00 "От всей души"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.50, 14.50 "Вести. Дежурная часть"
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+)
13.00 "Особый случай" (12+)
14.00 "Вести"
14.30 "Местное время. Вести - Башкортостан"
15.00 "Тайны института благородных девиц", 127-я серия. Сериал
16.00, 17.30 "Вероника. Потерянное счастье". Сериал (12+)
17.00 "Вести"
17.10 "Местное время. Вести - Башкортостан"
18.30 "Прямой эфир" (12+)
19.40 "Местное время. Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Любовь на миллион". Сериал (12+)
22.55 "Раскол". Сериал (16+)
02.05 "Вести+"
02.30 "Американская трагедия"
04.00 "Большая любовь-5" (16+)

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
07.45 "Йырлап асыла күңел " (6+)
08.15 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
09.00 "Замандаштар". Фәрит Яҡшығолов (6+)
09.30 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
09.45 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (6+)
10.40 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
11.30 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.45 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Кис ултырып". Гөлсинә Мөхәмәҙиева (6+)
17.00 "Тылсымлы ҡурай". Таһир Вәхитов (6+)
21.00 "20-се быуаттың билдәле йырҙары". Концерт (6+)

### БСТ
**07.00 "Сәләм, лето!" (12+)**
**10.00, 16.45 "Круизы в мир открытий" (16+)**
**10.30 "Каникулы НЕстрогого режима"**
**10.45 "Цирк в 13 метров"**
**11.00, 17.30, 02.00 "Замандаштар" (6+)**
**11.15, 17.15 "Орнамент"**
**11.30 "Власть отвечает" (16+)**
**11.45 "Тюрксой - 20 лет" (12+)**
**12.00 "Ура, каникулы!"**
**12.30, 16.15 "Учим башкирский язык"**
**12.45, 06.45 "Весело живем" (12+)**
**13.00 "Уңған килен" (16+)**
**13.30, 19.30, 00.30 Новости (на башк. яз.)**
**13.45 "Башкорт йыры" представляет"**
**14.45, 18.00 "Автограф"**
**15.15 "Ғәләмәт донъя"**
**15.30 "Гора новостей"**
**15.45 Фестиваль "Оперение"**
**16.00 "Йырлы кәрәҙ"**
**16.30, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**17.45 "Сәләм+" (12)**
**18.30, 02.15 "Эдера" (12+)**
**20.00 "Сәңгелдәк"**
**20.15, 06.30 "Полезные новости" (12+)**
**20.30, 03.00 "Телецентр" (12+)**
**21.00 "Большой чемодан" (6+)**
**22.00 "ФК "Уфа"**
**22.30 "Музыкальный фестиваль" (12+)**
**23.15, 03.30 "Художественный фильм" (16+)**
**01.00 "Единое время"**

## 12 ИЮЛЯ ПЯТНИЦА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.00 "Доброе утро"
09.00 Новости
09.05 "Контрольная закупка"
09.35 "Женский журнал"
09.45 "Жить здорово!" (12+)
10.55 "Модный приговор"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.20 "Время обедать!"
13.00 "Доброго здоровьица!" с Геннадием Малаховым (12+)
13.45 "Истина где-то рядом"
14.00 Другие новости
14.25 "Понять. Простить" (12+)
15.00 Новости (с субтитрами)
15.15 "Жди меня"
16.10 "Женский доктор-2". Сериал (16+)
17.00 "Проспект Бразилии". Сериал (16+)
18.00 Вечерние новости
18.50 "Человек и закон" (16+)
19.50 "Поле чудес"
21.00 "Время"
21.30 "Один в один"
00.30 "Концерт Кайли Миноуг". Док. фильм (16+)
02.20 "Викторина". Драма (12+)
04.35 "Контрольная закупка"

### РОССИЯ 1
05.00, 06.10, 07.10, 07.41, 08.10, 08.41 "Доброе утро, Россия!"
06.07, 06.35, 07.07, 07.35, 08.07, 08.35 "Местное время. Вести - Башкортостан"
09.00 "Ауаз"
09.45 "О самом главном"
10.30 "Кулагин и партнеры" (12+)
11.00 "Вести"
11.30 "Вести - Башкортостан"
11.50, 14.50 "Вести. Дежурная часть"
12.00 "Тайны следствия". Сериал (12+)
13.00 "Особый случай" (12+)
14.00 "Вести"
14.30 "Вести - Башкортостан"
14.50 "Вести. Дежурная часть"
15.00 "Тайны института благородных девиц", 128-я серия
16.00, 17.30 "Ласточкино гнездо". Сериал
17.00 "Вести"
17.10 "Вести - Башкортостан"
18.30 "Прямой эфир" (12+)
19.40 "Вести - Башкортостан"
20.00 "Вести"
20.50 "Спокойной ночи, малыши!"
21.00 "Кривое зеркало". Театр Евгения Петросяна (12+)
22.30 Торжественная церемония открытия XXII Международного фестиваля "Славянский базар в Витебске"
00.25 "Песочный дождь". Мелодрама (12+)
02.25 "Кодекс вора". Драма (16+)

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
07.45"Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.00 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
09.15 "Моңло аҙан". Дини йырҙар (6+)
09.35 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (0+)
10.40 "Онотолор тимә... ". Ретро (6+)
11.00 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
11.30 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.45 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 Альберт Шәһиев йырлай (6+)
15.00 "Бейеүсе ҡыҙға...". Әлиә Нурғәлиева (6+)
17.00 "Ваҡыт арбаһы". Музыкаль фильм (6+)
20.00 "Кис ултырып". "Тыуған ерем, Башҡортостан" (6+)

### БСТ
**07.00 "Сәләм, лето!" (12+)**
**10.00, 16.45 "Круизы в мир открытий" (16+)**
**10.30 "Город АЮЯ"**
**10.45 "Ғәләмәт донъя"**
**11.00, 17.30, 02.00 "Замандаштар" (6+)**
**11.15, 17.45 "Орнамент"**
**11.30 "ФК "Уфа"**
**12.00 "Ура, каникулы!" (6+)**
**12.30, 16.15 "Учим башкирский язык"**
**12.45, 06.45 "Весело живем"**
**13.00 "Уңған килен" (16+)**
**13.30, 19.30, 00.30 Новости (на башк. яз.)**
**13.45 "Мелодии души" (12+)**
**14.30 "Автограф" (6+)**
**15.15 "Зеркальце"**
**15.30 "Каникулы НЕстрогого режима"**
**15.45 "Фестиваль "Оперение"**
**16.00 "Сулпылар"**
**16.30, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**17.15 "Криминальный спектр" (16+)**
**18.00 "Йома"**
**18.30, 02.15 "Эдера" (12+)**
**20.00 "Сәңгелдәк"**
**20.15 "Полезные новости"**
**20.30, 03.00"Телецентр"**
**21.00 "Большой чемодан" (6+)**
**22.00 "Уфимское "Времечко" (12+)**
**22.30 "Отдел культуры" (12+)**
**23.00 "Специальный репортаж" (12+)**
**23.45 "Дарман"**
**01.00 "Смелая музыка"**
**03.30 "Художественный фильм" (16+)**

## 13 ИЮЛЯ СУББОТА

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
05.15, 06.10 "Исповедь содержанки" (16+)
06.00 Новости
07.00 "Ах, водевиль, водевиль"
08.20 "Дисней-клуб"
08.45 "Смешарики. Новые приключения"
09.00 "Играй, гармонь любимая!"
09.45 "Слово пастыря"
10.00, 15.00 Новости (с субтитрами)
10.15 "Смак" (12+)
10.55 "Татьяна Веденеева. Здравствуйте, я ваша тетя" (12+)
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Курская битва. И плавилась броня" (12+)
13.20 "Освобождение: огненная дуга" (12+)
15.10 "Великая война. "Курская дуга" (12+)
16.10 "Операция "Послушники".
17.05 "Дмитрий Певцов. "Мне осталось жить и верить" (12+)
18.00 Вечерние новости (с субтитрами)
18.10 "Женский журнал"
18.15 "Кто хочет стать миллионером?" с Дмитрием Дибровым"
19.20 "КВН". Премьер-лига (16+)
21.20 "Сегодня вечером" с Андреем Малаховым" (16+)
22.55 "Вся жизнь в перчатках"
23.30 Футбол. Суперкубок России. ЦСКА - "Зенит". Прямой эфир
01.35 "Бессоная ночь" (16+)
03.25 "Банда шести" (12+)
05.05 "Валентина Терешкова. Звезда космического счастья"

### РОССИЯ 1
04.50 "Воспитание жестокости у женщин и собак" (12+)
07.30 "Сельское утро"
08.00 "Вести"
08.10 "Вести - Башкортостан" (16+)
08.20 "Минутное дело". Развлекательная программа
09.20 "Субботник"
10.05 "Качество жизни"
11.00 "Вести"
11.10 "Местное время. Вести - Башкортостан"
11.20 "Вести. Дежурная часть"
11.55 "Честный детектив" (16+)
12.25, 14.30 "Источник счастья". Мелодраматический сериал (12+)
14.00 "Вести"
14.20 "Местное время. Вести - Башкортостан"
16.45 "Субботний вечер"
18.40, 20.30 "Подари мне воскресенье". Мелодраматический сериал (12+)
20.00 "Вести"
22.55 "Миллионер". Мелодрама (12+)
01.05 "Окончательный анализ". Триллер (16+)
03.35 "Горячая десятка"
04.40 "Комната смеха"

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
07.45 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
08.20 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.40 "Замандаштар". Хисмәтулла Юлдашев (6+)
08.55 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (6+)
10.25 "Йырҙарым һеҙҙең өсөн" (6+)
11.00 "Онотолор тимә... ". Ретро (0+)
11.25 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.45 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 "Уйна, ҡурай... " (6+)
19.00 "Етегән". Хит-парад (6+)
21.00 "Кис ултырып". "Башҡорт йыры" (6+)

### БСТ
**07.00, 19.30 Новости (на башк. яз.)**
**07.15 "Концерт "Доброе утро!"**
**07.45 "Фильм детям"**
**09.00 "Көндәлек" (6+)**
**09.30 Мультфильм (на башк. яз.)**
**10.00 "Сәләм+" (12+)**
**10.15 "Бәхетнамә"**
**10.45 "Вопрос+Ответ=Портрет"**
**11.30 "Аль-Фатиха"**
**12.00 "Следопыт"**
**12.30, 21.30 Новости (на русск. яз.)**
**12.45 "Специальный репортаж с Праздника русской песни и частушки (Белокатайский р-н)" (12+)**
**13.30 "Замандаштар" (6+)**
**13.45 "Весело живем" (12+)**
**14.00 "Дарю песню". Концерт**
**16.00, 05.15 "10 июля. И день, и ночь" Спектакль (6+)**
**17.45 "Бизнес-обзор" (12+)**
**18.00 "Автограф" (6+)**
**18.30 "Хазина"**
**19.00 "Башкорттар"**
**20.00 "Сәңгелдәк"**
**20.15 "Еду я деревню"**
**20.45 "Живое село" (12+)**
**21.15 "Преград.net" (12+)**
**22.00 "Башҡорт йыры - 2013"**
**22.45 "Праздник русской песни и частушки" (12+)**
**01.30 "Весенняя неделя моды" в Уфе (12+)**
**02.00 Художественный фильм (16+)**

## 14 ИЮЛЯ ВОСКРЕСЕНЬЕ

### ПЕРВЫЙ КАНАЛ
06.00 Новости
06.10 "Вербовщик"
07.40 "Армейский магазин" (16+)
08.15 "Дисней-клуб"
08.40 "Смешарики. ПИН-код"
08.55 "Здоровье" (16+)
10.00 Новости (с субтитрами)
10.15 "Непутевые заметки"
10.35 "Пока все дома"
11.25 "Фазенда"
12.00 Новости (с субтитрами)
12.15 "Наследник Британской империи"
12.55 "Ералаш"
14.00 "Жизнь и приключения Мишки Япончика". Сериал (16+)
17.05 "Клуб Веселых и Находчивых". Высшая лига (16+)
19.15 "Вышка" (16+)
21.00 "Воскресное "Время"
21.15 "Универсальный артист"
23.00 "Невероятный Гудвин" (16+)
23.55 "Дневник Бриджит Джонс". Романтическая комедия (16+)
01.40 "Аферисты Дик и Джейн развлекаются" (12+)
03.15 "Макс Дьюган возвращается" (12+)

### РОССИЯ 1
05.40 "Анискин и Фантомас". Детектив
08.20 "Сам себе режиссер"
09.10 "Смехопанорама" Евгения Петросяна"
09.40 "Утренняя почта"
10.20, 14.20 "Вести - Башкортостан. События недели"
11.00 "Вести"
11.10 "Городок. Дайджест"
11.45, 14.30 "В полдень на пристани". Мелодраматический сериал (12+)
14.00 "Вести"
14.20 "Вести - Башкортостана"
16.05 "Смеяться разрешается".
18.00, 20.30 "Подари мне воскресенье". Мелодраматический сериал (12+)
20.00 "Вести недели"
22.00 "Дочь баяниста". Мелодрама (12+)
00.00 "Враг № 1". Мелодрама (12+)
02.00 "Закусочная на колесах". Комедийный боевик (16+)
04.00 "Комната смеха"

### "ҠУРАЙ"
07.00 Башҡортостан Республикаһының гимны (0+)
07.05 "Йәшмә". Күңелле, дәртле йырҙар йыйынтығы (6+)
07.45 "Аҫылйәр". Башҡорт халыҡ йырҙары (0+)
08.00 "Төрки донъя". Төрөк телендә йырҙар (12+)
08.20 "Йәштәр тауышы". Йырҙар (6+)
09.15 "Автограф". Гөлназ Ҡотоева (12+)
09.45 "Һеҙ яратҡан йырҙар" (6+)
10.50 "Йырлап асыла күңел" (0+)
11.30 "Илһам" . Милли музыка ҡоралдары яңғырауы (0+)
12.00 "Йондоҙло ямғыр". Йырҙар (6+)
12.45 "Наза". Бейеүҙәр (0+)
13.00 Реклама, анонсы, ролики, блиц, повтор блока.
14.00 Муллайән Сөйәрғоловтың ижад кисәһе (6+)
19.00 "Йондоҙло сәғәт". Лиана Хәбибуллина (0+)
22.00 "Иман нуры халҡыма". Концерт (+6)

### БСТ
**07.00 Новости (на башк. яз.)**
**07.15 Концерт "Доброе утро!"**
**08.30 "Йома"**
**09.00 "Еду я в деревню"**
**09.30 "Живое село"**
**10.00 "Бауырһаҡ"**
**10.15 "Городок АЮЯ"**
**10.30 "Семәр" (6+)**
**10.45 "Сулпылар"**
**11.00 "Счастливый троллейбус"**
**11.45 "Алтын тирмә"**
**12.30 "Үткән ғүмер, 1960-е годы"**
**13.00 "Тәмле" (12+)**
**13.30 "Башкорттар"**
**14.00 Концерт "Дарю песню"**
**15.00 "Весело живем" (12+)**
**15.15 "Специальный репортаж" (16+)**
**16.00 "Дорога к храму"**
**16.30 "Замандаштар" (6+)**
**16.45 "Газпромтрансгаз Уфа"**
**17.00 "Историческая среда" (12+)**
**17.30 "Фестиваль "Оперение"**
**17.45 "Орнамент"**
**18.00 "Дарман"**
**18.45 "Автограф" (6+)**
**20.00 "Мир настоящих мужчин" (16+)**
**20.15 "История признания" (12+)**
**20.30 "Боевой дух" (6+)**
**21.00 "Урал Лото 6 из 40" (16+)**
**21.15 "Займи свое место" (12+)**
**21.30 Новости недели (на русск. яз.)**
**22.00 "Байыҡ-2013"**
**23.00 "Вечер.com" (12+)**
**23.45 "Свидание с джазом" (12+)**
**01.00, 01.30, 06.30 "Единое время" (16+)**
**02.15 Художественный фильм (16+)**
**03.30 "Праздник русской песни и частушки" (12+)**

✓ *Был үҫемлек төнәтмәһенең күп ағыулы матдәләрҙе нейтралләштерә алыу үҙенсәлеген шул ваҡытта уҡ белгәндәр. Тибет медицинаһы раҫлауынса, татлы тамыр ҡарттарҙың көсөн һиҙелерлек арттырған, йәш организмды нығытҡан.*



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# ӘБЙӘЛИЛ - ЙӘМЛЕ ИЛ!




**Горизонталь буйынса:** 6.Юл төҙөү машинаһы. 11. Алыҫ Көнсығыш сардинаһы. 12. Рим императоры. 13. Боронғо грек геройы. 14. Ярты йәшкә тиклемге һыйыр малы. 15. Ҡамырға һала торған хуш еҫле матдә. 18. Байрамдың сюжетлы планын кем яҙа? 26. Күк есеменең юлы. 28. Көньяҡ ағасы, Өфөлә "Нефтсе" мәҙәниәт һарайы эргәһендә үҫә. 29. Йәйенке һай һауыт. 31. Осло ҡанатлы, тар ҡыҫҡа ҡойроҡло, көрәнһыу һыртлы йыртҡыс ҡош. 34. Әйләнә. 35. Буйға ҡарап сафҡа теҙелеү ысулы. 36. Машина майы. 37. Быуын-быуындан килгән ҡан-ҡәрҙәш. 39. Нью-Йорк штатының административ үҙәге. 42. Вуз етәксеһе. 45. Кәрәкһеҙ, мәғәнәһеҙ буш һүҙ. 47. Көнбайыш Европалағы король ғаиләһендә ҡыҙ бала. 50. Алыча (алса) соусы. 55. Риф утрауы. 56. Яһалма сәс. 57. Помидор. 58. Сәғәт механизмы. 59. Эмульсия менән һүрәт төшөрөү ысулы.

**Вертикаль буйынса:** 2. Япондарҙың ҡағыҙ сәнғәте. 4. Разведчик Исаев. 5. Ҡала транспортының беренсе төрө. 7. Лауреаттар ярышы. 10. Мосолман байрамы. 16. Баштағы ореол. 17. Был транспорт төрөн Грузияла түләүле иттеләр. 19. Ҡара борсаҡ. 20. Өтөрлө башватҡыс. 22. Күңел тыныслығы. 23. Берәй нәмә эшләүгә, башҡарыуға иҫәп. 25. Үҙенә генә "йомолған" психотип. 27. Төрлө емештәрҙән яһалған компот. 28. Орден менән бүләкләнгән ветеран. 30. Ҡарт йонсоу ат. 32. "Көсләп асҡан күҙҙең (...)ы юҡ". 33. Төркиәләге күл. 38.Тере "кактус". 40. Кәрт уйынындағы хәйлә. 41. Яфа, михнәт. 43. Еңел-(...). 44. Йәш һыйыр малы. 45. Йәйғор (...) күпере. 46. К-700 йәки ДТ - 75. 48. Оҙонлоҡ үлсәү таҫмаһы. 49. Иң нәҙек ҡатын-ҡыҙ тауышы. 51. Моряк фуражкаһындағы краб. 53. Кәрт. 54. Пальма төрө.

**Илдар ҒӘБИТОВ төҙөнө.**

**26-сы һандағы сканворд яуаптары: Горизонталь буйынса:** Ҡамсығорт. Космонавтика. Геолог. Гонаһ. Атака. Сюрприз. Немец. Һеләүһен. Иваси. Консилиум. Тутыя. Тирәклек. Ҡая. Торт. Бот. Селәүсен. Альбатрос. Мисәү. Күстәнәс. Баҡта. Күбә. Эшләпә. Зилзилә. Икенде. Хөнәсә. Сюриляс. Лавр. Акционер. Тариф. Тәфтиш. Ишелмә. Әңгәмә. Азот.

**Вертикаль буйынса:** Ҡура. Сентябрь. Ҡолон. Травма. Пилот. Кәзә. Осор. Күгә. Азимут. Сәүкә. Зөлҡағиҙә. Ҡамыл. Әтраф. Гранит. Сиам. Тәкә. Грим. Силсилә. Фиҙа. Ориентация. Екән. Һөҙһөт. Сәүек. Ришүәт. Илсе. Үтенес. Лотос. Әшәлсә. Тәҡдир. Үрәсә. Люкс. Нарвал. Кәрниз. Сфинкс.

*ИҒЛАН*

**"Киске Өфө" гәзите редакцияһына водитель талап ителә. Белешмәләр өсөн телефондар:**
**253-25-44, 246-03-23.**

## *ҠОТЛАЙБЫҘ!*

Иң яҡын әхирәтем, бала саҡ дуҫым, ауылдашым, әлеге көндә Сибай сәнғәт колледжының театр бүлеге уҡытыусыһы булып эшләүсе һөйөклө

**Римма Лоҡман ҡыҙы ЙӘРМӨХӘМӘТОВАны**

тыуған көнө - юбилейы менән ихлас ҡотлайым! Тормошта үҙ урынын табып, 40 йылға яҡын ғүмерен яратҡан һөнәренә - илаһи сәнғәт донъяһына бағышлап, әле лә янып-янып, йәштәрсә сәм һәм илһам менән хеҙмәт итә ул халҡына. Ғүмер юлдашы Илъяс менән сәскәләй ике ҡыҙҙарына матур тәрбиә биреп, хәҙер бәхетле өләсәй менән ҡартатай ҙа улар. Артабан да Хоҙай рәхмәтендә бөтмәҫ шатлыҡ-ҡыуаныстар менән оҙон-оҙаҡ бергәләшеп ғүмер кисерергә насип итһен һеҙгә!

**Изге теләктәр менән Өфө ҡалаһынан**
**Фәүзиә Мөхәмәтшина.**

*ДАРЫУХАНА*

# ТАТЛЫ ТАМЫР



**"Татлы тамырҙы (солодка Коржинского) беләһеңме? Уның файҙалы үҫемлек икәнлеге билдәлеме, юҡмы?" - тип атайым күп йылдар элек үк һорағайны инде. Ул ошо үләндең 1921 йылғы йотлоҡта һәм унан һуңғы ауыр йылдарҙа берҙән-бер тәмләткес булыуын, аслыҡтан үлем хәленә еткән кешеләрҙең ошо үләндең тамырын сәйнәп һауығыуҙарын легенда итеп һөйләгәйне...**

Баймаҡ районы Татлыбай ауылының өлкән уҡытыусыларының береһе Юнир ағай Әбделкәримов та ошо фекерҙе ҡеүәтләп: "Көнө буйы бесән эшләп арыйһың, ә ҡайтышлай ошо үләндең тамырын сәйнәһәң, яңынан көс ингәндәй була", - тип, үҙенең йәш саҡтағы хәтирәләрен уртаҡлашты. Ул саҡта мин ғилем юлын яңы ғына башлап йөрөй инем әле. Әммә минең буласаҡ ғилми эшкә этәргес көс булды ул һүҙҙәр.

Татлы тамыр - ҡуҙаҡлылар семьяһына ҡараған бик ҡиммәтле, һирәк осрай торған күп йыллыҡ дарыу үҫемлектәренең береһе. Ул беҙҙең илебеҙҙә Волга, Урал, Тобол, Ишим йылғалары араһындағы эндемик (тик ошо урындарҙа ғына осрай торған) үҫемлектәрҙән һанала. Татлы тамыр дала зонаһында, бер аҙ татырлы болондарҙа үҫә. Уны шулай уҡ йәй көнө ҡороп бөтә торған бәләкәй йылғаларҙың ярҙарында ла осратырға мөмкин. Тоҙло грунт һыуҙары булған урындар татлы тамыр өсөн һәйбәт шарттар тыуҙыра. Ул ҡылған, аҡтамыр, әрем араһында үҫергә ярата. Башҡортостанда уны Баймаҡ районының Байыш, Кәрешкә ауылдары һәм Хәйбулла районының Таштуғай, Мәмбәт тирәһендә һ.б. ерҙәрҙә осратырға мөмкин.

Баймаҡ районының Ирәндек аръяғы халҡы һөйләүенсә, татлы тамыр был тирәлә күпләп үҫкән. Күрәһең, малдың, бигерәк тә һарыҡтың, күбәйеүе уға кинәнеп үҫергә ирек бирмәйҙер. Бына шуның өсөн дә ул хәҙер бик һирәк осрай торған (юғала барған) үҫемлектәрҙең береһенә әүерелгән.

Бер аҙ тарихҡа иғтибар итәйек. Татлы тамыр - иң боронғо дарыу үҫемлектәренең береһе. Уның ғәжәп тәмле тамыры Боронғо Ҡытайҙа киң ҡулланылған. Тибет медицинаһында уны женьшень үҫемлегенән дә юғары баһалағандар. Был үҫемлек төнәтмәһенең күп ағыулы матдәләрҙе нейтралләштерә алыу үҙенсәлеген шул ваҡытта уҡ белгәндәр. Тибет медицинаһы раҫлауынса, татлы тамыр ҡарттарҙың көсөн һиҙелерлек арттырған, йәш организмды нығытҡан.

Был үҫемлектең тамырында 23 процентҡа тиклем (!) глицерризин бар. Ул үҫемлеккә тәм бирә лә инде. 4 процент тирәһе флавоноид бар. Татлы тамыр шулай уҡ төрлө эфир майҙарына, аспаратинға, аскорбин кислотаһына һәм башҡа физиологик әүҙем матдәләргә бай. Бөтә әйтеп үтелгән сифаттар уны күп төрлө ауырыуҙарға ҡаршы торорлоҡ дарыу сифатында файҙаланырға мөмкинлек бирә.

Татлы тамырҙың морфологияһы тураһында бер нисә һүҙ. Ул, әйтеп үтелгәнсә, күп йыллыҡ үҫемлек. Бейеклеге 30-70 см, төп тамыры бик тәрәнгә - 8 метрға, грунт һыуҙарына тиклем етә. Сәскәһе 10-13 мм ҙурлыҡта, күкһел аҡ төҫтә, суҡ рәүешендә урынлашҡан. Емеше 1-3 см оҙонлоғондағы ҡуҙаҡ. Япраҡтары яҫы йәки киң эллипс формаһында, һабағы йөнтәҫ, тимгелле. Май-июнь айҙарында сәскә атып, сентябрь баштарында өлгөрә.

Үҫемлек тамырын сентябргә ҡаҙып алырға кәрәк. Һәйбәтләп һалҡын һыу менән йыуып, күләгәлә киптерәләр. Дөрөҫ киптерелгән тамыр һары йәки һоро төҫтә булып, мурт ҡына һынып торорға тейеш.

Татлы тамырҙы, үрҙә әйтелгән сифаттарын иҫәпкә алып, айырым плантацияларҙа сәсеп үҫтереү маҡсатҡа ярашлы булыр ине.

Һуңғы йылдарҙа татлы тамыр яңынан күпләп таралып үҫә башланы. Быға, әлбиттә, һарыҡ малы көтөүҙәренең ҡырҡа кәмеүе сәбәпсе булды.

**Сәфәрғәле ЙӘНТҮРИН,**
**биология фәндәре докторы.**

*✓ Ул бер генә секундҡа ла уйланып тормай, эпосты шул урындан дауам итеп һөйләп алып китә. Баҡтиһәң, ул эпосты тотошлай ятҡа белә икән. Был хәлде бары тик ҡан хәтере, рухи көсәгилешлелек менән генә аңлатып булалыр.*



СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



# МАЙҘАН ТОТА ТАҒЫ...

## ҡурай, думбыра, ҡыл-ҡумыҙ...

**11-12 июлдә Йылайыр районында Башҡорт халыҡ музыка ҡоралдарында уйнаусыларҙың республика конкурсы уҙғарыласаҡ. Сара Ишмулла Дилмөхәмәтовтың тыуыуына 85 йыллыҡҡа арналған**

Ишмулла Дилмөхәмәтов (1928-1984) виртуоз ҡурайсы, талантлы йырсы-импровизатор, башҡорт фольклоры белгесе, милли мәҙәниәтте сит илдәрҙә - Франция, Италия, Швейцария, Германия, Польша, Венгрия, Афғанстан, Пакистан, Бирма, Японияла танытыусы. Ул БАССР-ҙың халыҡ артисы, Салауат Юлаев исемендәге республика премияһы лауреаты, РСФСР-ҙың атҡаҙанған артисы.

БР Мәҙәниәт министрлығы, Республика халыҡ ижады үҙәге, Йылайыр районы хакимиәте, БР Ҡурайсылар союзы ойошторған был бәйгелә ҡурай, думбыра, ҡыл-ҡумыҙҙа уйнаусы профессиональ һәм үҙешмәкәр башҡарыусылар, ҡурайсылар ансамблдәре ҡатнаша ала. Ҡатнашыусылар ике - 16 йәшкә тиклем һәм 16 йәштән өлкәндәр категорияһында баһаланасаҡ. Сара сиктәрендә быға тиклем ойошторолған конкурстарҙа ҡатнашыусыларҙың, халыҡ йырсыларының, бейеүселәренең, алдынғы ижади коллективтарҙың сығыштары көтөлә.

Бәйгелә бер көйҙө музыкаль оҙатыу ярҙамында башҡарырға мөмкин. Бәйгеселәр халыҡсан башҡарыу оҫталығына эйә булырға тейеш. Көйҙәр һайлағанда һирәк башҡарылған көйҙәргә өҫтөнлөк бирелһә, тағы ла яҡшыраҡ. Ҡатнашыусы үҙе башҡарған көйҙөң тарихын, легендаһын мотлаҡ белергә бурыслы. Бәйгеселәрҙең сығышын билдәле белгестәр, сәнғәт һәм мәҙәниәт эшмәкәрҙәре баһалаясаҡ.

Ғаризалар Республика халыҡ ижады үҙәгендә, Өфө ҡалаһы, З. Биишева урамы, 17/2 адресы буйынса ҡабул ителә. Телефон: 8(347)289-65-50. Яуаплы: Әхмәтйәнова Эльвира Искәндәр ҡыҙы.

**ӘЙТКӘНДӘЙ...**

**6 июлдә** Хәйбулла районы Аҡъяр ауылында II "Бөйөк дала" Асыҡ Республика башҡорт рок-фестивале үтә. Милли рок-мәҙәниәтенең иң яҡшы традицияларын үҫтереү һәм популярлаштырыу, ҡатнашыусыларҙың профессиональ оҫталығын үҫтереү, рок йүнәлешендә эшләүсе музыкаль коллективтарҙы берләштереү, ярҙам итеү маҡсатында ойошторолған был сарала Башҡортостандың һәм сит төбәктәрҙең ошо йүнәлештә ижад итеүсе музыкаль төркөмдәре ҡатнаша ала. Төркөмдәр тере тауыш режимында эшләргә тейеш. Белешмәләр өсөн телефон: 8 (34758) 2-15-58, Хәйбулла районы мәҙәниәт йорто.

**ҺӘМ ТАҒЫ...**

**29 июндән 8 июлгә** тиклем ЮНЕСКО эштәре буйынса Башҡортостан Республикаһы комитеты Германияла - Рәсәй һәм Рәсәйҙә Германия көндәре сиктәрендә БР Мәҙәниәт министрлығы ярҙамында "Европа театрҙары диалогы" халыҡ-ара проектын тормошҡа ашыра. Был проект сиктәрендә Башҡортостан Республикаһының Рус дәүләт академия драма театры "Голубая камея" мюзиклы менән Германияның Баден-Вюртемберг еренең өс ҡалаһында - Фридрихсхафен, Оффенбург, Карлсруэла сығыш яһаясаҡ. Бының менән проект ҡатнашыусылары һәм театр коллективы тотош республика халҡы исеменән 2002 йылдың 2 июлендә Юберлинген ҡалаһы эргәһендәге авиакатастрофала һәләк булған балаларҙың ата-әсәләренә һәм туғандарына күрһәткән ихлас ярҙамы, тоғро дуҫлығы, шулай уҡ 11 йыл эсендә ойошторолған йылы кисәләре өсөн Бодензее төбәгендә һәм Баден-Вюртемберг ерендә йәшәүселәргә тағы бер тапҡыр оло рәхмәтен белдерҙе.

АТЫҢ КЕМ?

# ИКЕ СӘСӘН ОСРАШҠАНЫ



**Баймаҡ районының II Этҡол ауылында Мөхәмәтша Буранғоловҡа башҡорт халҡының мәшһүр "Урал батыр" эпосын әйтеп яҙҙырған ике сәсәндең береһе - данлыҡлы Хәмит сәсән Әлмөхәмәтовтың ейәнсәре Сәлимә Әлмөхәмәтова йәшәй. Һеҙ фотола уның ике ейәне - Искәндәр менән Хәмитте күрәһегеҙ.**

Искәндәргә - алты, ә ҡартатайының атына менгән, йәғни исемен алған бәләкәй Хәмиткә бер йәш кенә әле. "Ҡартатайығыҙҙың Мөхәмәтша Буранғоловҡа һөйләгән эпосты беләһегеҙме?" тип һорарға ла өлгөрмәнек, Искәндәр шундуҡ милли кейемен кейеп алды ла, күҙҙәрен йомоп, "Урал батыр"ҙы һөйләргә лә тотондо. Тағы ла шуныһы: малайҙы төрлө урында туҡтатып, тексты икенсе урындан башлауын һорайбыҙ. Ул бер генә секундҡа ла уйланып тормай, эпосты шул урындан дауам итеп һөйләп алып китә. Баҡтиһәң, ул эпосты тотошлай ятҡа белә икән. Был хәлде бары тик ҡан хәтере, рухи көсәгилешлелек менән генә аңлатып булалыр.

Данлыҡлы Хәмит сәсән тыуарҙары бит улар. Улай ғына ла түгел, Ишмөхәмәт Мырҙаҡаев "Урал һандуғасы" тип атаған данлыҡлы Буранбай сәсәндең дә ҡаны тибә уларҙа. Искәндәр, Хәмит Хәсәновтарҙың әсәһе Вәлиә Хәсәнова (ҡыҙ фамилияһы Ҡотдосова) Буранбай ауылынан, Буранбай сәсән Ҡотдосовтың туранан-тура нәҫелдәше - тыуасары. Бына бит нисек! Сәсән менән сәсән бына ни рәүешле XXI быуатта, яңы меңйыллыҡта килеп осраша икән! Сөнки Искәндәр менән Хәмит бөгөн донъяға ошо ике мәшһүр сәсәндең күҙҙәре менән баға, ишетә, тоя, һөйләй һәм көйләй.

**Һөйөндөк АҪЫЛОВ.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ҮЛӘ АШАҒАНСЫ...

## бүлә аша

Йөрәк ашъяулыҡ түгел, һәр кем алдында йәйеп булмай.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

**Шулай итеп, тағы бер аҡыл: "Ҡытайҙың бер батшаһы әтәс һуғыштырыу тамашалары ойоштороорға яратҡан. Бының өсөн уның хеҙмәтселәре илдәге иң көслө һәм иң матур әтәстәрҙе һайлап килтерер булған. Былдай тамашалар батшалыҡта көн дә тиерлек булып торған һәм оло байрамға әйләнгән. Бер ваҡыт батшаға эре тоҡомло, сағыу, матур ҡаурыйлы, ҡанаттары һәм аяҡтары көслө бер әтәс бүләк итәләр. Батша уны ҡыуанып ҡабул итә һәм: "Был әтәскә тиңләшерлек башҡа әтәс булмаясаҡ! Ул барыһын да еңергә тейеш. Синцзыны саҡырығыҙ, ул әҙерләһен әтәсте алышҡа", - тип бойороҡ бирә. Синцзыны батшаға алып киләләр. Үҙенә йөкмәтелгән бурысты тыңлағас, Синцзы әтәсте ентекләп ҡарай һәм уны алышҡа яраҡлы тип таба ла күнектерә башлай. Ун көн үткәс, Синцзыны батша үҙ янына саҡырта: "Ун көн үтте. Был ваҡыт эсендә һин әтәсте әтәстәр ярышына әҙерләп бөтөргә тейеш инең. Был донъялағы иң шәп әтәс һәм һуғышта уға тиңләшеүсе булырға тейеш түгел! Шулай итеп, әтәс әҙерме?" - тип, батша тәкәббер ҡарашын күнектереүсегә йүнәлтә. "Юҡ, әҙер түгел, - ти Синцзы.- Әтәс артығы менән үҙ-үҙенә ышаныусан һәм һауалы. Тәкәбберлеге күкрәгенә һыймай. Шуға ла уны майҙанға сығарырға иртәрәк әле..." "Һин быларҙы ҡайҙан беләһең?"- тип аптырай батша. "Батшам... - тип йылмая Синцзы.- Әтәскә ҡарағыҙ әле. Ул алыштағы һөҙөмтәләре тураһында бөтөнләй уйламаған, ә үҙ-үҙе менән һоҡланған кеше һымаҡ тота үҙен. Ул шул тиклем маһайған, уны теләһә ниндәй башҡа әтәс еңә аласаҡ..." Батша әтәсенә аптырап ҡарап тора ла, күнектереүсе менән килешә.**

**Тағы ун көн үтеп китә. Батша үҙенең баяғы әтәсен танылған бер хакимдың әтәсе менән һуғыштырырға теләп, түҙемһеҙләнеп, Синцзыны саҡыра: "Байтаҡ ваҡыт үтте бит, минең әтәсем алышҡа әҙерҙер, моғайын?"- тип һораулы ҡарашын күнектереүсегә төбәй. "Юҡ, батшам, ул әҙер түгел. Әтәстә әле сыҙамлыҡ һәм түҙемлек юҡ, ул әле теләһә ниндәй күләгә артынан ташлана, теләһә ниндәй тауышҡа яуап бирә. Ашығыусанлығы һәм түҙемһеҙлеге арҡаһында ул алышта еңеләсәк", - ти Синцзы. Батша бер ни тип тә яуап бирмәй һәм уйға ҡала. Ун көндән һуң тамам түҙемлеге шартлаған батша Синцзыға килеп етергә бойора. Синцзы алдына килеп баҫҡас, асыуын көскә тыйып, әтәстең алышҡа әҙер булыу-булмауы тураһында һорауын бирә. "Юҡ, батшам, тағы көтөргә кәрәк, - ти Синцзы. - Әтәскә әле башҡалар менән алышҡа сығырға иртәрәк. Ул асыулы, агрессив, уның ҡарашы - нәфрәт, тәне көс менән тулы. Ундайҙар алыштар мәлендә бары тик имгәнеүгә генә дусар була".**

**Ошонан һуң тағы ун көн үтә. Батша өндәшмәй генә Синцзының үҙе килгәнен көтә. Ун беренсе көндөң кисендә Синцзы батша эргәһенә килә һәм әтәстең алышҡа әҙер булыуы тураһында хәбәр итә. "Ә һин уның әҙер булыуын нисек билдәләнең?"- тип һорай батша. "Батшам, әтәскә ҡарағыҙ әле. Ул хәҙер бик тыныс тота үҙен. Уның көсө тышҡа бәреп сыҡмай, ә ҡыҫылған пружина кеүек эстә туплана. Былдайҙар үҙенең дошманын күргәндә ҡаушап төшмәй. Уның менән алышҡа сығырға бер әтәс тә батырсылыҡ итмәйәсәк, сыҡҡанда ла, әйләнеп ҡасып китәсәк. Сөнки уның камиллығы ла, көсө лә - уның үҙ-үҙен тотошонда, сыбырлығында, дәрәжәһендә..."**


“Киске Өфө” гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**

Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мираҫты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы №ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**

**Мөхәрририәт:**
Әхмәр ҮТӘБАЙ,
Ләйсән НАФИҠОВА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Таһир ИШКИНИН,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Артур БАТЫРШИН.

Беҙҙең адрес:
**450005, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
Беҙҙең блог: **blog.kiskeufa.ru**
E-mail: **info@kiskeufa.ru**
**kiskeufa@ufacom.ru**

«Башҡортостан» нәшриәте типографияһында баҫылды (450079, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Октябрҙең 50 йыллығы урамы, 13).

**Телефондар:**

| | |
|---|---|
| **Баш мөхәррир** | **253-25-44** |
| **Баш мөхәррир урынбаҫары** | **246-03-24** |
| **Бухгалтерия** | **246-03-23** |
| **Хәбәрселәр** | **252-39-99** |

Ҡул ҡуйыу ваҡыты - 5 июль 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте **253-25-44**, **246-03-23** телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.
Тәржемә хеҙмәтенә 253-25-44 телефоны менән мөрәжәғәт итергә.

«Киске Өфө»нөң индекстары – **50665, 50673**

Тиражы - 5006
Заказ 2555